✓ ***Республиканың барлыҡ мосолмандарын мөбәрәк Рамаҙан айының изге байрамы - Ураҙа ғәйете менән ҡотлайым. Илебеҙгә - тыныслыҡ, ғаиләләргә - татыулыҡ, балаларға - бәхетле баласаҡ, йәштәргә - тырышлыҡ, ил етәкселәренә - хикмәт, игенселәргә уңыш йыйыуҙа көс-ғәйрәт насип итһен.***

*Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты рәйесе мөфтөй Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18 - 24 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№33 (503)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Мәғариф өлкәһе...**

емештәрҙе барлай




4

**Атайым өйрәтте...**

тун бесергә лә, уҡ юнырға ла



6

**Милләтебеҙ...**

генетиканы ла, "Урал батыр"ҙы ла һаҡлаған



7

**Ҡибла ҡайһы яҡта?**



12

14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөтә өлкәләрҙә лә кадрҙар тәғәйенләү мәсьәләһе таныш-тоношлоҡ, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ принциптары буйынса тормошҡа ашырыла икәне яңылыҡ түгел, был хаҡта күптән түгел Башҡортостан Президенты ла белдерҙе. Ошо турала ни уйлайһығыҙ?

***СӘЙФУЛЛА ӘМИРОВ, Мәләүез районының "Көнгәк" гәзите мөхәррире:*** Әлеге ваҡытта кадрҙар әҙерләү, резерв булдырыу кеүек мәсьәләләрҙең ҡуйылышы, дөрөҫөн генә әйткәндә, халыҡҡа, йәмәғәтселеккә мәғлүм түгел, ул "шаршау артында" хәл ителә. Ә совет осоронда был эштең нисек ҡуйылыуын бөтәгеҙ ҙә яҡшы хәтерләйҙер: 14 йәштән комсомолға алалар ҙа, яуаплы эштәр йөкмәтеп, өмөтлө, әүҙем йәштәрҙе комсомол эшенә егәләр, үҙҙәрен тик яҡшы яҡтан күрһәткәндәрҙе партия сафына ҡабул итәләр, унан уны район йә ҡала комитеты резервына алалар. Ошонда бер аҙ тәжрибә туплағас, берәй хужалыҡҡа йә ойошмаға партком секретары итеп ебәрәләр. Унан инде ҡарайҙар: был кадрҙан эш сығырлыҡ булһа, уны йәнә райкомға алалар йәки өлкә комитетына тиклем үрләтәләр. Әлбиттә, ул замандағы партия кадрҙарына хәҙер мөнәсәбәт яҡшынан түгел, ләкин бөтәһен дә бер ҡалыпҡа һалып ҡарау ҙа дөрөҫ түгел. Мин нимәгә иғтибарҙы йүнәлтергә теләйем: элек кадрҙар ана шулай "уттан алып, һыуға һалып" тигәндәй, эштә, кешеләр араһында ҡайнап сыныҡтырылды, бында йәшертен йә булмаһа ситтән килтереп көтөлмәгән тәғәйенләүҙәр булманы, халыҡ бөтәһен дә белеп торҙо. Бөгөн иһә "быуыны" йомшаҡ, эш рәтен, ойоштороу мәсьәләләрен йүнләп төшөнөп етмәгән, ләкин әлеге лә баяғы ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ, танышлыҡ арҡаһында етәксе урын биләп ултырыусылар күп. "Киләсәктә көнөбөҙ шуларға ҡарап ҡалһа..." тип уйлаһаң, бигерәк ҡурҡыныс булып китә - бер нәмә лә белмәйҙәр бит! Мәктәптә "өслө"-гә саҡ уҡып йөрөгән балаларҙы ата-әсәһе аҡса түләп вузға индерә, уны бөтөр-бөтмәҫтән шул уҡ меҫкен ата-әсә таныш-тоношо аша әлеге балаһына йылы, уңайлы эш урыны йүнләп йүгермәләй башлай - бындай кадрҙан илгә ни файҙа булыр икән һуң? Ә бит бындай күренештәр торған һайын массовый төҫ ала бара. Минеңсә, указ, закондар менән генә быны туҡтатып булмаясаҡ. Йәмғиәттең ошо күренешкә битарафлығын бөтөрөргә кәрәк. Эшләй белмәгән кеше ултырырға тейеш түгел вазифалы урындарҙа. Беҙҙә ниндәйҙер схема буйынса аҡса урлау йәки ришүәтселек күренештәрен коррупция тиҙәр. Ә бит бына әле әйтеп үтелгән таныш-тоношлоҡ - үҙе үк йәшерен коррупция.

Тағы бер аптыраҡан күренеш бар беҙҙә: милли кадрҙар мәсьәләһе буйынса йә булмаһа етәксе урындарға төп халыҡ вәкилдәре тәғәйенләнгән осраҡтарҙа, ғәҙәттә, бына ошо "ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ, танышлыҡ һәм яҡташлыҡ принциптары"н иҫкә төшөрәләр. Ни ғәләмәттәндер, бындай билдәләмә фәҡәт башҡорт кадрҙарына ҡарата әйтелә, фәҡәт улар өҫтөнә япһарыла, ә башҡаларҙы күрмәйҙәр ҙә, белмәйҙәр ҙә, уларҙы тикшереп, соҡсонмайҙар ҙа. Ҡыҫҡаһы, башҡорттарҙан башҡалар һып-һылыу, аҡтан пак һәм бары тик "эш сифаттары һәм һәләттәре" буйынса һайлап алына, имеш. Ошо ҡараш арҡаһында ла бынамын тигән башҡорт кадрҙары үҙ һәләттәрен тормошҡа ашыра алмай йә ситкә сығып китергә мәжбүр була.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### ДИАЛОГ

# Йәнебеҙҙең һәр миҡдары...

## милләтебеҙҙе күтәреүгә сарыф ителә

**Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары - Башҡортостан Рәссамдар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары, Өфө дәүләт сәнғәт училищеһының художество бүлеге мөдире, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Йәлил СӨЛӘЙМӘНОВ менән Бөтә Рәсәй ижади йәмғиәт ойошмаһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе идараһының "Һынлы сәнғәт" секцияһы етәксеһе, Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының һынлы сәнғәт факультетында кафедра мөдире, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Башҡортостан Рәссамдар союзы идараһы ағзаһы Әмир МӘЗИТОВтың "Атайсал - Земля предков" әҫәрҙәр йыйылмаһы Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителде. Үткән быуаттың 90-сы йылдар башында башҡорт һынлы сәнғәтенә яңы һулыш, яңы фекер, яңы төҫ булып килеп ингән был ике ижадсы хаҡында бик күпте һөйләргә мөмкин булыр ине. Шуны ғына ла әйтеү етәлер: 90-сы йылдар романтикаһы шауҡымында ижад донъяһына аяҡ баҫҡан был ике егет, тормоштоң һәм ижадтың иң ауыр һынауҙарын үтеп, сынығып, икеһе лә ир уртаһы йәшкә етеп, хәҙерге ваҡытта башҡорт һынлы сәнғәтенең йөҙөн билдәләй, үҙҙәре үк сәнғәт уҡыу йорттарында яңы ижади көстәр тәрбиәләй. Уларҙың әңгәмәһе ижад, һынлы сәнғәт, милләт яҙмышы тураһында.**

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**



Й. Сөләйманов һүрәте.

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ДИҢГЕҘГӘ БАРЫРЛЫҠ БУЛДЫ



**Өфө мәктәптәренең береһендә сит телдәрҙән уҡытам. Коллективта йәш уҡытыусылар күп булғас, эшләүе лә күңелле, сөнки беҙҙең ҡыҙыҡһыныуҙар ҙа бер төрлөрәк, уй-хыялдар ҙа оҡшаш. Әлегә ғаилә лә булмағас, эштән һуң буш ваҡыттарҙы ла ҡыҙыҡлы итеп, төрләндереп бергә үткәрәбеҙ. Ләкин ҡайҙа барып төртөлһәң дә, аҡса кәрәк, ә әлегә эш стажы булмаған йәш белгестең эш хаҡы ла аҙ, тимәк, кесәһе лә таҡыр. Тик беҙ төшөнкөлөккә бирелеп ултырмайбыҙ, ә төрлө юлдар табып, өҫтәмә аҡса эшләү яйын эҙләйбеҙ. Беҙгә, уҡытыусы булараҡ, иң ҡулай юл - репетиторлыҡ менән шөғөлләнеү.**

Бөтә мәктәптәрҙә лә теге йәки был фәнде аңлап етмәгән йәки юғары уҡыу йортона уҡырға инеү өсөн ныҡлы әҙерләнгән уҡыусылар бар. Балаһының уҡыу кимәлен күтәрергә тырышыусы атай-әсәйҙәр ҙә етерлек. Нәҡ ошо саҡта улар репетиторлыҡ хеҙмәте күрһәтеүселәргә мөрәжәғәт итә. Кемдер юғары уҡыу йорттарында белем биреүсе, юғары дәрәжәләргә эйә профессорҙарға мөрәжәғәт итһә, икенселәр балаһына белем биргән уҡытыусы менән эш итеүҙе яйлыраҡ күрә. Миненсә, был дөрөҫ аҙым, сөнки төрлө уҡытыусының белем биреү алымдары ла төрлөсә һәм был балаға кире тәьҫир итергә мөмкин. Мин эшләгән мәктәптә лә күпселек атай-әсәй ошолай уйлай, күрәһең, сөнки миңә лә, бергә эшләгән коллегаларыма ла өҫтәмә шөғөлләнергә теләүсе уҡыусылар етерлек. Репетиторлыҡ хеҙмәте өсөн хаҡ ниндәй фәнде уҡытыуға ҡарап билдәләнә. Мәҫәлән, башҡорт телен төплөрәк белеү өсөн бер сәғәткә уртаса 300 һум, сит телдәргә, химия һәм физикаға - 350-400 һум аҡса сығарып һаларға тура килә. Ә Берҙәм дәүләт имтиханы яҡынайған һайын, беҙҙең дә эштәр арта, тимәк, кесәгә лә аҡса күберәк төшә.

Шуға күрә йәш белгестәрҙең "аҡсаһы аҙ", тигән һылтау менән 5 йыл уҡып сыҡҡан һөнәрҙәренән баш тартып, икенсе өлкәгә эшкә китеүен хупламайым. Ҡыйынлыҡ һәр ерҙә лә бар, ләкин уны йырып-еңеп сығырға тырышыу үҙе үк оло маҡтауға лайыҡ. Кеше күпме аҡса эшләһә лә тулыһынса ҡәнәғәт булмаясаҡ, ләкин тырышырға кәрәк. Мин, мәҫәлән, тик репетиторлыҡ менән шөғөлләнеп йыйған аҡсама Ҡара диңгеҙ буйында ял итеп ҡайттым.

**Зөлфәр ЯМАЛОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Бөтә өлкәләрҙә лә кадрҙар тәғәйенләү мәсьәләһе таныш-тоношлоҡ, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ принциптары буйынса тормошҡа ашырыла икәне яңылыҡ түгел, был хаҡта күптән түгел Башҡортостан Президенты ла белдерҙе. Ошо турала ни уйлайһығыҙ?*

(Башы 1-се биттә).

***Закирйән ӘМИНЕВ, прокуратура һәм хоҡуҡ хеҙмәте ветераны:*** Бөгөнгө көндә бөтә ерҙә лә ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ факттары тулып ята. Балыҡ башынан серей, тиҙәрме әле? Шуның кеүек, бындай күренештәр иң юғары кимәлдән башланғас, "өлгө" күрһәтелгәс, башҡаларға ни ҡала инде? Эйе, өлгөгә эйәрергә генә ҡала, тимәксемен. Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ: әле Рәсәй власына питерҙар килде. Был турала үҙәк матбуғатта бик күп тапҡырҙар яҙылды ла инде. Беҙҙең Башҡортостанға ситтән, урындағы халыҡтың тарихын да, йолаларын да белмәгән, ихтирам итмәгән кешеләр етәксе итеп тәғәйенләнә, ә улар, үҙ сиратында, үҙ кешеләрен, таныш-тоноштарын, бөгөнгөсә әйтһәк, "үҙ командаһын" тартып килтерә башлай. Беҙҙең үҙебеҙҙә лә бынамын тигән белгестәр, етәкселәр, ойоштороусыларыбыҙ бар бит, нињә ситтән килтереп ҡуйырға? Алмаш булғас, алмаш булһын ине лә бит, юҡ, Башҡортостандан берәүҙе лә сит өлкәгә етәксе вазифаһына тәғәйенләгәндәре юҡ әле. Етәксе кадрҙар билдәләгәндә урындағы халыҡ мәнфәғәттәренән сығып ҡарау тигән нәмә тамам юҡҡа сығарыла бара. Республикабыҙҙа йөҙҙән ашыу милләт вәкиле йәшәй, тип урынлы-урынһыҙға маҡтанырға беләбеҙ, ә урындағы етәксе кадрҙар хаҡында һүҙ сыҡһа, милләттәрҙең кәрәге ҡалмай ҙа ҡуя. Етәксе кадрҙар араһында уларҙың милли составы буйынса ла ниндәйҙер процент нисбәте күҙәтелергә тейештер бит?

***Таңһылыу ҒӘЙНУЛЛИНА, РФ мәғариф отличнигы:*** Күптәрҙең хәтерендәлер әле: элек "Кадрҙар бөтәһен дә хәл итә" тигән бик шәп девиз йәшәп килде, ләкин, үкенескә күрә, һуңғы йылдарҙа ул бөтөнләй онотолдо. Лозунгтың һүҙҙәре онотолһа ла, уның йөкмәткеһе, мәғәнәһе юғалманы, ул һаман да актуаль әле, сөнки, ысынлап та, бөтә эштең дә уңышы уны башҡарыусыларға, йәғни кадрҙарға бәйле. Элек кадрҙар әҙерләү тигән нәмә бар ине: өлкәндәр йәштәрҙе шефлыҡҡа ала, өйрәтә, уны оҫта белгес итеп кенә түгел, ә тормошта дөрөҫ юлдан атлаусы яҡшы кеше итеп тә тәрбиәләүгә күп көс һала торғайны. Кәнәшсе-тәрбиәсе тип тә йөрөтә инек уларҙы. Заманына күрә бик тә урынлы һәм әһәмиәтле хәрәкәт булды ул. Элек шулай уҡ һайлаған һөнәренә уның бөтә булған баҫҡыстары аша килеү баһалана ине. Мәҫәлән, мин уҡытыусы булырҙан алда комсомол һәм партия комитеты секретары, ойоштороусы, пионервожатый булып эшләнем. Әле йәштәр бөтөнләй тип әйтерлек әҙерлекһеҙ килә эшкә, сөнки әлеге лә баяғы - йәшерене юҡ - аҡса түләп уҡырға инәләр ҙә еңел генә диплом алып сығалар. Әйткәндәй, күптәр дипломды ла үҙҙәре яҙмай хатта - аҡса түләп кенә яҙҙырып алалар. Аҡсалының инде таныш-тоношлоғо ла күп була, эшкә урынлашҡанда тап шуларҙың файҙаһы тейә лә инде. Таныш-тоношлоғо булмағандар, ғүмер буйы бил бөгөп эшләһә лә, хатта хеҙмәт ветераны исеме лә ала алмайынса пенсияға китә.

Бәхеткә күрә, кадрҙар тәғәйенләү, эшкә урынлашыу мәсьәләһендә, ҡайһы берәүҙәр раҫлауынса, бөтә ерҙә лә ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ һәм танышлыҡ хөкөм һөрә, тип әйтмәҫ инем. Эш алымдары заманса ойошторолған күп кенә фирмаларҙа вакант урындарға асыҡ конкурстар иғлан ителә. Бында инде таныш-лыҡ ярҙам итә алмай. Конкурста фәҡәт үҙ һөнәре өлкәһендә юғары квалификацияға эйә кадрҙарға өҫтөнлөк бирелә һәм иң яҡшылар ғына һайлап алына. Миненсә, кадрҙар тәғәйенләүҙә ошо ысулды һөҙөмтәлерәк һәм әүҙем ғәмәлгә индереү аша ғына әлеге ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ, таныш-тоношлоҡ кеүек күренештәргә сик ҡуйыласаҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзитебеҙгә яҙылырға бер ваҡытта ла һуң түгел. Әгәр ҙә таныштарығыҙ араһында 2012 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылмай ҡалғандар булһа, әйтегеҙсе уларға: сентябрҙең 17-нә тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе октябрҙән алдыра башларҙар. Индекс - 50665.**



● Шулай уҡ июлдә, августа 2013 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙгә яҙылған квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәрә алаһығыҙ. Китаптан да яҡшыраҡ бүләк юҡ, тип иҫәпләйбеҙ һәм ошо ике айҙа 2013 йыл өсөн яҙылған 4 уҡыусыбыҙға - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ. Шулай итеп, индекс - 50665, ярты йылға яҙылыу хаҡы - **354 һум 24 тин**.

● Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Эш хаҡы үҫеше инфляция темптарынан алдараҡ барырға тейеш. Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республиканың власть органдары алдына шундай бурыс ҡуйҙы. БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 2011 йылда уртаса айлыҡ эш хаҡы, 2010 йыл менән сағыштырғанда, 12,3 процентка - 18397 һумға тиклем артты. 2012 йыл аҙағына уртаса эш хаҡы - 20495 һумға тиклем, ә 2015 йылда 29259 һумға тиклем артасаҡ. Инфляцияға килгәндә, 2012 йылда уның кимәле - 4,8 процент, 2013 йылда - 6,2-7,3 процент тәшкил итергә тейеш.

✓Башҡортостандың дәүләт власы органдары системаһында яңы структура булдырыласаҡ. Был хаҡта республика Президенты Рөстәм Хәмитов БР Хөкүмәте ултырышында хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, ведомство ҙур булмаясаҡ, ул административ хоҡуҡтарға эйә булған аналитик төркөмөнән тораcаҡ. Аҡсаларҙың республиканан ситкә китеү мәсьәләһе бындай структураны булдырыуҙың төп сәбәбе булып тора, тине тәфәк башлығы.

✓Алдағы өс йылда Башҡортостан бюджеты дефицитлы буласаҡ. Мәҫәлән, 2013 йылда ҡаҙнаға керемдәрҙең сығымдарға ҡарағанда 12 миллиард һумға әҙерәк булыуы көтөлә. Рөстәм Хәмитов дефицитты ҡаплау сығанаҡтарын атаны. Тәү сиратта, был республиканың эске резервы, шулай уҡ кредиттар. Шул уҡ ваҡытта, республика башлығы һүҙҙәренсә, федерацияның ҡайһы бер субъекттары кредиттар менән үтә мауығып киткән һәм хәүеф зонаһына ингән. Башҡортостан иһә "аҙ кредитлы" схема буйынса үҫешә.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республика чиновниктарын "аппетиттарҙы кәметергә" саҡырҙы. Был дәүләт структуралары эшмәкәрлеген финанслауға, шулай уҡ уларҙың штатын киңәйтеүгә лә ҡағыла. Шулай уҡ республиканың идара итеү системаһын оптималләштереү ҙә өҫтөнлөклө бурыстар иҫәбендә.

✓2013 йыл Рәсәйҙә Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип иғлан ителде. Тейешле Указға Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйҙы. 2012 йылда тәбиғәтте һаҡлаусылар Владимир Путинға төрлө экологик мәсьәләләрҙе хәл итеү үтенесе менән күп тапҡырҙар мөрәжәғәт итте һәм экологияны Рәсәй өсөн милли идея тип танырға тәҡдим итте.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ҠУНАҠ-

## Хоҙай илсеһе

**Хәҙер ҡунаҡ саҡырғанда ризыҡтарҙың ниндәйе генә әҙерләнмәй! Ҡош һөтөнән башҡаһы бар, тиҙәр ундай өҫтәлдәрҙе. Шул өҫтәлдәргә күҙ һалып ҡына ла йәшәү кимәлебеҙҙең ни тиклем күтәрелгәнен тоҫмалларға була бит. Тормош насар, тип зарланыусылар бынан 20-30, 40-50 йыл элекке байрам табындарына күҙ һалып, хәҙерге менән сағыштырһын ине. Әммә табындар мулыраҡ була барған һайын, кешеләр ҡунаҡҡа һирәгерәк саҡырыша башланы. Ҡунаҡҡа кеше саҡырыуҙар ҙа күберәк әшнәлек, иҫәп принцибына ҡоролғанына шаһит булырға тура килә хәҙер.**



Тағы ла ҡунаҡ саҡырышыуҙың "Ҡунаҡ ашы - ҡара-ҡаршы" тигән принцибы ла бар. Был принцип буйынса ҡунаҡта булыусы мотлаҡ рәүештә үҙен ҡунаҡ итеүсегә яуап биреп, ҡайтарып саҡырып, ҡунаҡ итергә тейеш. Тейеш кенә түгел, бурыслы. Әгәр ҙә бурыс үтәлмәһә, был беҙҙең халыҡ өсөн оло ғәрлек һанала. Шул уҡ ваҡытта ҡайтарып ҡунаҡ саҡырғанда тәүге мәжлестә булыусыларҙың барыһы ла саҡырыла. Ҡунаҡлашыуҙың бындай үҙенсәлекле "түңәрәге" хәҙерге ваҡытта һуғым ашына, Ураҙа ваҡытында ауыҙ асыуға саҡырғанда һаҡланып ҡалған. Бындай саҡырышыуҙарҙа туғандар ҙа, шулай уҡ туған булмаған ауылдаштар, бер урында эшләүсе коллегалар йә күршеләр ҡатнаша. Алыҫтан килгән ҡәҙерле ҡунаҡ янына алып саҡырыуҙы "ҡунаҡ янына алыу" тип атайҙар. Ә инде ҡунаҡ янына алынған кеше ҡайтарып барыһын ҡунаҡҡа саҡырһа, быны беҙҙең яҡта "тауыш итеү" тип атайҙар. Әсәйемдең "шуларҙы-шуларҙы тауыш итеп алайыҡ", тип атайым менән кәңәшләшкәндәре әле булһын хәтеремдә. Тауыш итешеүҙең үҙенә күрә айырым күркәм бүләк бирешеү миҙгелдәре лә була торғайны. Был осраҡта тауыш итеп ҡунаҡ йыйыусы алыҫтан килгән ҡәҙерле ҡунаҡҡа хөрмәт билгеһе итеп күлдәк кейҙерә. Беҙҙең яҡта "күлдәк кейҙереү" йолаһы кейем кейҙереү, бүләк биреү булараҡ ҡына аңлашылмай, "шатлыҡ бүләк итеү", "шатлыҡ күлдәге кейҙереү" булараҡ та аңлашыла. Йәғни өҫтөнә яңы, сағыу матур күлдәкте кейгән кеше үҙенә килешле булған кейемдән яңы сүрәткә инеп ҡыуана, быға тиклем үҙенә таныш булып тойолған шатлыҡ минуттары кисерә булып сыға. Шуға күрә яңы, матур күлдәк кейеү шатланыуға, ҡыуаныуға бәрәбәрҙер. Әйтәйек, "атҡа менгәндәй ҡыуанды" тигән һымаҡ. Тап шуның өсөн дә ҡунаҡҡа күлдәк кейҙереү иң ҙур бүләк биреү булып иҫәпләнә лә инде. Күлдәктән дә ҡиммәтерәк булған башҡа бүләк биреү ул тиклем уҡ баһаланмай беҙҙең яҡтарҙа. Оло- ларҙың "шуларҙа-шуларҙа булдым, күлдәк кейеп ҡайттым", тигәнен беҙҙең яҡта "ҡыуанып-шатланып ҡайттым" йәки "бығаса кисермәгән кинәнес кисерҙем", тип тә аңларға була.

Ҡунаҡлашыуҙың бындай күркәм йолалары юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгәндер тип уйланыла. Туғандарҙың да, бер-береһенә туған булмаған ете-яттарҙың да саҡырышып йәшәүе халҡыбыҙҙы берләштереүсе, берҙәм итеүсе бер сара ла булғанын тоҫмалларға була бында. Һәр хәлдә, йортонда булып, түрендә ултырып, ризығынан ауыҙ иткән кеше менән насар мөнәсәбәттә булырға тырышмайһың бит инде. Әсәйҙәребеҙҙең "ауылдағы ана шуларҙы, бына быларҙы ҡунаҡҡа саҡырғаныбыҙ юҡ, хатта оят булып китте", тип ҡунаҡҡа саҡырып иңнәләнеп ултырғандары ла хәтерҙә. Ана шундай табындарҙа беҙ белгәндән генә әсәйебеҙ әллә күпме апайҙарға, инәйҙәргә шатлыҡ күлдәге кейҙереп, үҙенә ҡиәмәтлек апаһын йә һеңлеһен, атайыбыҙға ҡиәмәтлек бажалар, беҙгә ҡиәмәтлек еҙнәйҙәр, олатайҙар тапты. Ҡиәмәтлек ҡунаҡлашыу аша туғанлашыу иң күркәм йола һанала беҙҙә. Тимәк, ҡунаҡлашыу халҡыбыҙҙың үҙенсәлекле ойошоу, берләшеү формаһы булғаны бында бәхәсһеҙ хәҡиҡәт булып тора. Өҫтәүенә, башҡорт өсөн ҡунаҡ Хоҙай илсеһенә тиңләнә икән, ҡунаҡсыллыҡ, һис шикһеҙ, Хаҡ Тәғәлә алдындағы иң сауаплы ғәмәлдәрҙән һаналыуы көн кеүек асыҡ.

Талантлы шағир, үҙенсәлекле ҡарашлы ғалим, олойән шәхес, мәрхүм Рәшит Әхтәриҙең ҡунаҡ булыу хаҡында шундайыраҡ шиғыр юлдары бар ине:

*Әй буйында йәй буйына*
*Ҡунаҡ булырға ине.*
*Ҡунаҡ булырға ине лә,*
*Тыйнаҡ булырға ине.*

*Әй буйында йәй буйына*
*Ҡунаҡ булып булманы.*
*Ҡунаҡ булып булһа ла бит,*
*Тыйнаҡ булып булманы.*

Ҡунаҡтың тыйнаҡлыҡ зарурлығы хаҡында ла күпте һөйләргә булыр ине. Һүҙҙе оҙонға һуҙмайынса, "Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул", "Өс көн - ҡунаҡ, өс көндән һуң - муйнаҡ" тигән әйтемдәрҙе генә килтереп үтәйек. Нимә генә тимә, Хоҙай әҙәм балаһын ҡунаҡ итеп тә һынай, рәхмәтлеләр менән рәхмәтһеҙҙәрҙе лә айыра. Юҡҡа ғынамы ни, рәхмәтле булыу әҙәм балаһы өсөн иң оло сауаптарҙан һанала. Рәхмәтле булыу ғына түгел, рәхмәт әйтә белеү ҙә оло сауап. Еребеҙгә ҡунаҡ ҡына булып килеп, һыйланып, һуңынан йөҙөбөҙгә төкөрөргә тырышыусыларҙы ла яҡшы беләбеҙ. Ундайҙар хатта ҡунаҡ роленән хужаға күсергә лә маташа. Был йәһәттән Хоҙай беҙҙең менән...

Гөлсөм Өмөтбаева ҡунаҡтарға күстәнәс биреп оҙатыу йолаһын, уның әһәмиәтен, мәғәнәһен шул тиклем матур итеп дәлилләп, дөрөҫ итеп яҙған. Мин дә был йәһәттән үҙемдең ҡайһы бер фекерҙәремде өҫтәп китмәксемен. Яңыраҡ отпускым ваҡытында мин тыуған ауылдан 32 саҡрым алыҫтағы ауылда йәшәүсе дуҫым мине кис ҡояш байығас үтәсәк күркәм сараға саҡырҙы. Беҙ бөләкәйҙән шуға күнеккәнбеҙ: ҡайҙа барһаҡ та, күстәнәсһеҙ йөрөмәйбеҙ. Сара дуҫымдың йортонда түгел, башҡа урында үтте һәм шулай килеп сыҡты: мин төнгә сәғәт берҙә генә уның йорто янынан ҡайтыр яҡҡа ҡуҙғалдым. Тик шул саҡта ғына уның ғаиләһенә тигән күстәнәсте дуҫымдың ҡулына тоттороп ҡайтырға сыҡтым. Һәм нимә булды тиһегеҙме? Иртәгеһен, уттай ҡыҙыу эш ваҡытында, юҡ һылтауҙы бар итеп дуҫым күстәнәсен тотоп минең янға килеп етә лә һалған. "Уңайһыҙландым, төнө буйы йоҡлай алмай сыҡтым", ти үҙе. Күстәнәс, бүләк биреү "Хоҙайға ҡайтыу" китабында түбәндәгесә аңлатыла: "Нимәләр биреү, алыу (күстәнәс, бүләк, әйбер, хоҡуҡ һ.б.) өсөн энергияның туҡтауһыҙ хәрәкәте талап ителә..."

Икенсе төрлө әйткәндә, нимәләр алыр өсөн иң тәүҙә нимәләр бирергә кәрәк, йәғни энергияның хәрәкәте генә артабанғы хәрәкәтте тәшкил итә. Урыҫтар был саҡта "Буш сыр тәпелә генә була", тиһә, башҡорттар "Буштың атаһы үлгән", ти. Тимәк, ҡунағына күстәнәс биреп ҡайтарыусы хужа был ғәмәле менән үҙенә лә күстәнәс, бүләк, рәхмәт, сауап булып ҡайтасаҡ изгелек энергияһын хәрәкәткә килтерә, йәғни изгелек, мәрхәмәтлек мөхите, түңәрәге барлыҡҡа килтерә. Ҡунаҡҡа биреп ҡайтарылған тәмле күстәнәс, танһыҡ ризыҡ, әлбиттә, уның йортонда ҡалған балаларына тәғәйенләнә. Тимәк, уны ауыҙ итеп һөйөнгән балаларҙың шатлығынан килгән сауабы ла үҙе ни тора.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ҡунаҡлашыуҙы ихласлыҡ, эскерһеҙлек мәктәбе тип атарға ла булалыр. Ә бит тормош кешеләрҙе, бигерәк тә яҡын туғандарҙы бер-береһен күрә алмаҫтай мөнәсәбәтле хәлдәргә лә ҡуя. Ошондай саҡтарҙа йортоңа Хоҙайҙың илсеһе булып килеп ингән ҡунағың бөтөнләй башҡа күҙлектән ҡарайһың да инде.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Аҙағы. Башы 32-се һанда).**

(Аҙағы. Башы 32-се һанда).

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Быйыл Башҡортостанда беренсе класҡа 44,5 мең уҡыусы бара. Республиканың Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, был һан былтырғыға ҡарағанда бер аҙға юғарыраҡ, үткән йылда 44 435 бала тәүгә мәктәпкә барғайны. Йола буйынса, был көндә республиканың белем биреү учреждениеларында тантаналы линейкалар һәм саралар үтә. РФ Мәғариф һәм фән министрлығы быйыл яҙ мәктәпкә яҙылыу ҡағиҙәләренә бер аҙ үҙгәрештәр индерҙе. Тәү сиратта мәктәпкә беркетелгән территорияла йәшәүсе балалар ҡабул ителә.

✓Өфөлә яҡын арала ике ҡунаҡхана төҙөү планлаштырыла. Уларҙың береһе - Конгресс-холл янында, икенсеһе "Караүанһарай" сауҙа-эш комплексы биләмәһендә урынлашасаҡ. Был ҡунаҡханалар 2015 йылға тиклем төҙөләсәк. Бынан тыш, бөгөн ҡалала ғәмәлдәге ҡунаҡханаларҙы реконструкциялау эштәре алып барыла. Был оҙаҡламай Өфөлә ҙур халыҡ-ара сәйәси һәм спорт сараларын үткәреүгә бәйле.

✓Ағымдағы йылда Башҡортостанда 12 спорт объектын сафҡа индереү планлаштырыла. Уларҙың дүртәүһе республика бюджеты иҫәбенә төҙөлә. Стәрлетамаҡта сафҡа индереләсәк 2500 урынлыҡ Боҙ аренаһы менән Физкультура-спорт комплексы был объекттар араһында иң ҙуры. Һигеҙ физкультура-һауыҡтырыу комплексы йыйылған иғәнә средстволары иҫәбенә финанслана. Бынан тыш, 2013 йылда "Аҡбуҙат" ипподромы алдында "Планета" күп функциялы сауҙа-күңел асыу комплексын төҙөп бөтөү планлаштырыла.

✓Өфөнөң Дим районында ҡалала тәүге Йәмәғәт именлеге үҙәге булдырылды. Ул йәмәғәт именлеген һаҡлауҙа, бәлиғ булмағандар менән эшләүҙә һәм тәҙәүекләндереүҙә ҡалаға һәм үҙҙәренең хеҙмәттәштәренә ярҙам итергә теләгән милиция ветерандарын берләштерә. Тиҙҙән ошондай уҡ үҙәктәр Өфөнөң Орджоникидзе һәм Калинин райондарында асыласаҡ.

✓Башҡортостан бюджеты алдағы йылдарҙа үҙенең социаль йүнәлешен һаҡлап ҡаласаҡ. БР Хөкүмәте ултырышында хәбәр ителеүенсә, 2013 йылда социаль йүнәлештәге сығымдар - 78,8 миллиард һум (дөйөм сығымдар суммаһының 71,6 проценты), 2014 йылда - 85,2 миллиард (73,7 процент), 2015 йылда 88,6 миллиард (75,8 процент) тәшкил итәсәк.

**"Башинформ"дан.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҺӘЙКӘЛ ҠУЙЫЛАСАҠ...

## Зәйнәб Биишеваға, Мостай Кәримгә

**Баш ҡалабыҙ Өфөлә яҡын киләсәктә башҡорт халҡының арҙаҡлы шәхестәре - мәшһүр яҙыусыларыбыҙ Зәйнәб Биишеваға һәм Мостай Кәримгә һәйкәлдәр ҡуйыласаҡ. Был турала Өфө ҡала округы хакимиәтенең архитектура һәм ҡала төҙөлөшө идаралығы начальнигы Илдар Ибраһимов хәбәр итте. М. Кәрим һыны Профсоюздар йорто алдындағы майҙанда, Зәйнәб Биишева һәйкәле Октябрь проспектында урынлаштырыласаҡ. Шулай уҡ Ленин паркында 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан башҡорт яугирҙарына һәйкәл ҡалҡасаҡ. "Әле Өфөлә тағы бер нисә мемориал һәм һәйкәл ҡуйыу мәсьәләһе ҡарала", - тине И. Ибраһимов.**

Баш ҡалала "2007-2015 йылдарҙа төҙөлөп бөткән ҡала биләмәләрен артабан үҫтереү" муниципаль адреслы программа ғәмәлгә ашырыла. Уның сиктәрендә иҫке йорттарҙа йәшәгән граждандарға яңы торлаҡ бүлеү мәсьәләһе хәл ителә. Бөгөн иҫкергән өйҙәр һаны 4810-ға барып еткән. Унда барлығы 70 мең кеше көн күрә. 2007 йылдан алып бөгөнгө көнгә тиклем авария хәлендә булған 135 кенә торлаҡ бушатылған. Эштең әкрен барыуы финанслау етешмәүгә бәйле, ти ҡала етәкселеге.

Программаға ярашлы, ҡаланың тарихи үҙәгендә лә яңы йорттар төҙөү ҡарала. "Иҫке биналарҙың күбеһе тап ҡаланың үҙәгенә тура килә. Уларҙың урынына торлаҡ та, башҡа объекттар ҙа төҙөргә ниәтләйбеҙ. Шул уҡ ваҡытта тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау, уларҙы төҙөкләндереү мәсьәләһе лә ситтә ҡалмаясаҡ", - тине Илдар Фәнис улы. Мәҫәлән, 2015 йылға ҡала үҙәгендә ике ҡунаҡхана төҙөү планлаштырыла. Халыҡтар дуҫлығы йорто эргәһендә ҡалҡасаҡ ҡунаҡхананың нигеҙ ташын һалыу эштәре тамамланған да инде. Икенсеһе Каруанһарай йорто янында буласаҡ, тип көтөлә.

Яҡын арала Әй һәм Чернышевский урамдары оҙонораҡ буласаҡ. Етәкселәр билдәләүенсә, урамдарҙы һүҙыу яңы кварталдар төҙөү, шулай уҡ юл мәсьәләһен дә хәл итеүгә булышлыҡ итәсәк. "Кварталдарҙың майҙаны 10-15 гектар буласаҡ. Торлаҡ йорттары менән бергә балалар баҡсаларын, башҡа социаль объекттарҙы төҙөүҙе маҡсат итеп ҡуйбыҙ", - ти И. Ибраһимов. Шундай кварталдар оҙаҡламай Черниковкала, Йүрүҙән биҫтәһендә төҙөлә башлаясаҡ.

Ҡалала ер аҫты үткәүелдәрен төҙөү эштәре башланды. Әлеге көндә төҙөлөш "Үҫмерҙәр китапханаһы" һәм "Дан бульвары" туҡталыштарында бара. Быйыл унда ер аҫты коммуникацияларҙы сығараласаҡ. Киләһе йылда иһә "Йүрүҙән", "Мир фирмаһы", "Актерҙар йорто" туҡталыштарында төҙөлөш эштәре башланасаҡ.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ҡаланың көньяҡ һәм төньяҡ өлөштәрен тоташтырасаҡ тиҙ йөрөшлө трамвай һыҙатын төҙөү мәсьәләһе ҡарала. Тимәк, киләсәктә Өфөнөң бер осонан икенсе осона тиклем трамвайҙа ла йөрөргә мөмкин буласаҡ.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Үткән аҙнала Стәрлетамаҡ ҡалаһы республика, министрлыҡтар һәм ведомстволар етәкселәрен, уҡыу йорттары ректорҙарын, һөнәри белем биреү учреждениеларының директорҙарын, муниципаль район хакимиәттәре һәм ҡала округтары башлыҡтарын республиканың мәғариф эшмәкәрҙәренең август республика кәңәшмәһенә йыйҙы. Быйыл ул ун алтынсы тапҡыр уҙғарылды һәм "Республикала белем биреү: кеше һәм төбәк киләсәгенә инвестициялар" девизы аҫтында үтте.**

# МӘҒАРИФ ӨЛКӘҺЕ...

## емештәрҙе барланы




Иғтибар итһәгеҙ, былтыр йыл дауамында Рәсәй власы илдә балалар баҡсаларында урындар етешмәү мәсьәләһен хәл итте: яңыларын төҙөнө, иҫкеләрен үҙгәртеп ҡорҙо. Башҡортостанда ла бындай эштәр әүҙем барҙы. Республика Президенты Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, быйыл республикала 50-гә яҡын балалар баҡсаһы сафҡа индереләсәк, 11 меңгә яҡын урын барлыҡҡа киләсәк. 2011 йылда 10 мең өҫтәмә урын булдырылғайны. Яңы балалар баҡсалары заманса итеп төҙөлә, уларҙың күбеһендә бассейндар бар һәм улар өсөн республика 4,5 млрд һум аҡса тотонған. Бынан тыш, Башҡортостанда шәхси балалар баҡсаларын ишәйтеү мәсьәләләре лә ҡараласаҡ, тип белдерҙе Президент. Ошо рәүешле республика властары киләһе ике-өс йыл эсендә балалар баҡсаларына булған сиратларҙы бөтөрөү мөмкинлегенә эйә буласаҡ.

Былтырғы уҡыу йылында башланғыс мәктәпкә Федераль дәүләт белем биреү стандарттары (ФГОС) индерелә башланы. Был стандарттарҙың төп маҡсаты - педагог уҡыусыны уҡырға, һанарға һәм яҙырға ғына түгел, ә һәр баланың һәләттәре асылыуына, үҫеүенә шарттар тыуҙырырға, уларҙы ижади шәхес итеп тәрбиәләргә, һәләттәрен тормошта ҡулланырға өйрәтергә лә тейеш.

Яңы уҡыу йылында урта мәктәп яңы белем биреү стандарттарына күсәсәк. Һуңғы осорҙа халыҡ мәктәпте, уҡытыусыларҙы, тотош белем системаһын ғәйепләргә шул тиклем өйрәнеп китте. Әммә бөгөн Рәсәй мәктәбе эшләргә мәжбүр булған аныҡ шарттарға ҡараһаҡ, беҙҙә мәктәптәр насар түгел, тип фекергә киләһең. Әлбиттә, уны юғары кимәлдәге мәғариф - совет осоро мәктәбе менән сағыштырып булмайҙыр, сөнки совет мәктәбе беҙҙең ил өсөн массалы булып ҡала алған элитар мәктәп, лайыҡлы яулап алынған бренд ул. Ҡыҙғаныска ҡуҙә, яңы Рәсәй мәктәбе белем биреү системаһының сифаты менән ул тиклем маҡтана алмай. Шуға ла яңы федераль стандарттар был йүнәлештә ниндәйҙер яңылыҡ индерер, тип өмөтләнәйек.

Рәсәйҙә һуңғы осорҙа мәктәп социаль системаның иң төбөнә төштө һәм экспертттар бында һуңғы 20 йылдағы социаль-иҡтисади хәлебеҙ ғәйепле тип иҫәпләй. Эш бында хеҙмәт хаҡының күләмендә лә түгел, һүҙ мәктәпкә булған мөнәсәбәт тураһында бара. Бер яҡтан, уҡытыусыларға һәм мәктәпкә булған талаптар артты, хәҙер һәр ата-әсә унда килеп, балаһының хоҡуҡтарын даулауҙы ғәҙәти хәлгә әйләндерҙе. Икенсе яҡтан, йәмғиәттә уҡытыусы һөнәренең бәҫе төштө. Хәҙер яңы стандарттар талабы буйынса, һәр мәктәп үҙенсәлекле, инновацион булырға тейеш. Тимәк, элеккесә белем алған, элеккесә уҡытырға күнеккән уҡытыусы үҙе лә үҙгәрергә бурыслы, әммә был үҙгәреш уның абруйын кире ҡайтара алырмы икән? Әйткәндәй, БР Мәғариф министры Әлфис Ғаязов үҙенең сығышында республикала 129 мәктәптең инновацион белем биреү усағы статусын йөрөтөүе, әммә тикшереүҙәр буйынса, уларҙың барыһы ла ҡуйылған бурыстарҙы аныҡ үтәмәүен белдерҙе.

Республика Президенты Рөстәм Хәмитов юғары белем биреүсе вуздар тураһында һөйләгәндә, Башҡортостандың һаман да ғилми-тикшеренеү университеттары булмаған төбәктәрҙең береһе булып ҡалыуы, республика вуздарының эре Рәсәй программаларына инмәүе һәм бары тик инерция буйынса ғына үҫешеүе тураһында әйтте. Был өлкәлә лә реформалар буласағы һәм республикаға мегауниверситеттар төҙөү кәрәклеге тураһында фекерҙәр яңғыраны.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Белем биреү системаһын модернизациялау, оптималләштереү һаман дауам итә әле. Беҙгә хәҙер яңыса, заманса эшләгән уҡытыу алымдары, мәктәптәр, уҡытыусылар кәрәк. Етәкселәр әйтеүенсә, үҙгәрештәргә ваҡытында һәм сифатлы тәьҫир итә алырлыҡ һығылмалы система төҙөү - бөгөнгө мәғариф алдындағы төп бурыстарҙың береһе шул. Бер һорауға ғына яуап табыуы еңел түгел: береһе үҫешенә икенсеһе ҡаршы килгән реформалар шарттарында киләсәк быуын лайыҡлы белем ала алырмы һуң? Яҡшы белем һәм властарға ышаныс - граждандарҙың йәмғиәттә өсөн нигеҙ шул. Тик был бөгөн дәүләтте артыҡ ҡыҙыҡһындырмай шикелле.**

**Һәм тағы ла. Яңы стандарттарға күсеү сәбәпле, "милли-төбәк компоненты" тигән төшөнсә юҡҡа сыға, бары тик федераль һәм мәктәп компоненты ҡала. Туған телдәр федераль компонентҡа инеү сәбәпле, уларҙы уҡытыу дәүләт тарафынан яҡланасаҡ, әлбиттә. Яңы уҡыу йылына башланғыс бирҙән, борсоған һорауҙарға яуап ала торған мәғариф эшмәкәрҙәренең август кәңәшмәһендә быйыл юғары трибунанан милли мәғариф тураһында, яңы стандарттарҙың дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыуға нисек ҡағыласағы хаҡында бер һүҙ ҙә әйтелмәне, тиер инек... Хәйер, милли мәғариф тигәндә, Әлфис Суфиян улы республикала 55 милли гимназияның уңышлы эшләүе һәм быйыл кәрәкле һәм ҡыҙыҡлы ваҡиға булыуы - Мишкә районында мари милли гимназияһы, шулай уҡ Тәтешле районының бер мәктәбендә удмурт телен һәм әҙәбиәтен тәрәнәйтеп өйрәнеү буйынса экспериментал майҙансыҡ асылыуы тураһында белдерҙе. Уның әйтеүенсә, бындай милли гимназиялар артабан да күбәйәсәк. Милли телдәрҙе өйрәнеүгә ҡағылышлы тағы ла бер хәбәр: "Мәғариф министрлығы яңы уҡыу йылына норматив база әҙерләне, ул мәктәптә тел өйрәнеү проблемаларын аныҡлыраҡ көйләргә ярҙам итәсәк". Мәғариф министрының быны менән нимә әйтергә теләүе тураһында фаразларға ғына ҡала.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2013 йылдың февралендә Өфөлә асыласаҡ VI Ҡышҡы Халыҡ-ара балалар уйындары дирекцияһы беренсе рәсми эш кәңәшмәһе үткәрелде, унда БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов һәм Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡатнашты. Дирекция етәксеһе, Өфөнөң Физкультура һәм спорт буйынса комитеты рәйесе Сергей Степанов белдереүенсә, ярыштарҙа ҡатнашасаҡ спортсыларға саҡырыу ҡағыҙҙары ебәрә башлағандар ҙа инде. Уларҙы донъяның 64 иленән 250 ҡала вәкилдәре аласаҡ. Теркәлеү 30 сентябргә тиклем дауам итә. Уйындар дирекцияһы "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында урынлашҡан.

✓Республикала иген һәм ҡуҙаҡлы иген культуралары 78 процент майҙанда сабылған. Йәмғеһе 1,4 миллион тоннанан ашыу иген һуғып алынған. Көн элгәре яуып үткән ямғырҙар урып йыйыу эштәренең темптарын бер аҙ кәметкән. Уртаса уңыш элекке кимәлдә ҡалған - гектарынан 10,7 центнер. Шул уҡ ваҡытта Стәрлебаш һәм Стәрлетамаҡ райондары игенселәре урып йыйыу эштәрен тамамлаған. Стәрлетамаҡ районы уңыш буйынса ла иң юғары күрһәткестәргә эйә - гектарынан 15,2 центнер.

✓25-26 августа баш ҡаланың Ленин урамында "Сәскә Арбаты" байрамы үткәреләсәк. Шуның менән бәйле был ике көндә лә Пушкин урамынан Киров урамына тиклемге арауыҡта Ленин урамы, транспорт хәрәкәте ябылып, йөйәүлеләр урамына әйләнәсәк. "Ағиҙел" ҡунаҡханаһынан "Родина" кинотеатры араауығында сауҙа- күргәҙмә рәттәре урынлашасаҡ.

✓Ураҙа байрамдары көндәрендә, шәмбелә лә, йәкшәмбелә һәм дүшәмбелә лә барлыҡ почта бүлексәләре лә ғәҙәттәге режимда эшләйәсәк.

✓"Рособрнадзор" үҙенең сайтында 2013 йылға Берҙәм дәүләт имтихандары расписаниеһын баҫтырҙы. Документҡа ярашлы, БДИ тапшырыуҙың төп ваҡыты - 27 майҙан 19 июнгә тиклем, ә өҫтәмә ваҡыт 8 июлдән 15-нә тиклем билдәләнгән. Алдан тапшырыусылар өсөн 20 апрелдән 6 майға тиклемге ваҡыт күрһәтелгән.

✓25-26 августа "Аҡбуҙат" ипподромында "Башҡортостан - Рәсәйҙең баллы төбәге" тигән фестиваль ойоштоола. Фестиваль сиктәрендә умартасыларҙың XII республика конкурсы, йәш умартасыларҙың VI республика конкурсы, шулай уҡ бал йәрминкәһе үтәсәк. Сара 25-дә сәғәт 10-да асыла.

***✓ Бындай һөҙөмтәләр Рәсәй өсөн ҡулай түгел һәм талантлы спортсыларға иғтибар күберәк, ә дәүләт тарафынан ярҙам һиҙелерлек булһа, еңеү баҫҡысындағы урындар ҙа юғарыраҡ булыр ине.***

*СПОРТ*

# БАРҘЫҠ, КҮРҘЕК, ЕҢДЕК -

## егерме дүрт алтынлы булдыҡ




**Бар донъяны көсөргәнештә тотҡан XXX Йәйге Олимпиада тамам. Һау бул, Лондон! Һаумы, Рио-де-Жанейро! Нәҡ Бразилияның баш ҡалаһында дүрт йылдан планетаның иң көслө спортсылары һәм уларҙың көйәрмәндәре XXXI Йәйге Олимпия уйындарына йыйыласаҡ. Ә бөгөн иһә бар донъя Лондондағы Олимпия уйындарына йомғаҡ яһай һәм һығымталар эшләй. Рәсәй ҙә улар иҫәбендә.**

Рәсәй спортсылары Лондондан 82 миҙал алып ҡайтты. Уларҙың 24-е - алтын, 25-е - көмөш һәм 33-ө - бронза. Олимпиаданың тәүге көндәрендә Рәсәй спортсылары барлыҡ һөләттәрен, осталыҡ һәм таһыллыҡтарын күрһәтә алманы һәм 9-сы, 10-сы урындарҙан күтәрелмәне. Ләкин бындай хәл Рәсәй спортсыларының күңелен төшөрмәне, ә, киреһенсә, еңеүгә булған ынтылышты арттырҙы ғына. Һәм, һөҙөмтәлә, Рәсәй Олимпиаданы дүртенсе урында тамамланы. Рәсәйҙең Олимпия комитеты Президенты Александр Жуков белдереүенсә, һөҙөмтәләр күңел ҡайтарырлыҡ булманы һәм Рәсәй спорт системаһы ҡәнәғәтләнерлек хәлдә икәне тағы бер тапҡыр раҫланды. Илдең спорт министры Виталий Мутко ла Лондон Олимпиадаһын бик үк насар булманы, тип билдәләне. Әлбиттә, дүртенсе урын - ул тығыҙынсы йәки унынсы түгел, ләкин Рәсәй элек-электән үҙенең юғары спорт потенциалы менән бар донъяға билдәле. Шуға күрә Олимпия уйындарының тоғро көйәрмәндәре фекеренсә, бындай һөҙөмтәләр Рәсәй өсөн ҡулай түгел һәм талантлы спортсыларға иғтибар күберәк, ә дәүләт тарафынан ярҙам һиҙелерлек булһа, еңеү баҫҡысындағы урындар ҙа юғарыраҡ булыр ине.

Олимпиаданың ун бишенсе көнөндә Рәсәй спортсылары бер юлы 15 миҙал яулап, иң яҡшы һөҙөмтә күрһәтте. 11 август, шулай итеп, Рәсәй өсөн Лондон Олимпиадаһының иң уңышлы көнө буларaҡ иҫтә ҡалды. Спорттың уйын төрө буйынса берҙәнбер миҙалға, Бразилия уйынсыларын еңеп, ир-егеттәрҙең волейбол командаһы лайыҡ булды. Яңы Рәсәй тарихында спорттың уйын төрҙәрендә алтын миҙалды 2000 йылда гандболсылар ғына алыуын иҫләгәндә, волейболсыларҙың еңеүе оло әһәмиәткә эйә. Ә ҡатын-ҡыҙ волейболсылар иһә Лондондан миҙалһыҙ ҡайтты. Пляж волейболында ла беҙҙең спортсыларға уңыш йылмайманы. Ә бына баскетболда Рәсәй спортсылары Олимпия уйындары тарихында беренсе тапҡыр миҙал алыуға өлгәште. Финалда Аргентина командаһын еңеп, Дэвид Блатт етәкләгән баскетболсылар бронза миҙал яуланы. Рәсәйҙең сәнғәт гимнастикаһы буйынса йыйылма командаһы күптән инде үҙенең башҡаларҙан бер башҡа өҫтөн тороуын күрһәтә килде. Лондон Олимпиадаһы ла ҡағиҙәнән ситләшмәне. Спорт гимнастикаһы буйынса Рәсәй йыйылма командаһы иһә Пекин уйындары менән сағыштырғанда Лондонда күпкә уңышлыраҡ сығыш яһаны һәм 7 миҙал яуланы. Батутта һикереү буйынса Дмитрий Ушаков көмөш миҙалға эйә булды. Синхрон йөҙөү буйынса ла беҙҙең команда алдынғылыҡты бирмәне һәм мөмкин булған ике комплект алтын миҙалдың икеүһен дә Рәсәйгә алып ҡайтты. 3 метрлыҡ трамплиндан һыуға һикереү буйынса ла рәсәйлеләр алтын һәм көмөш миҙалды ҡулдарынан ысҡындырманы. Һыу полоһында иһә спортсылар бары тик алтынсы урын менән генә "ҡәнәғәтләнде". Грек-рим һуғышы ярышында Рәсәй спортсылары алдарына ҡуйылған миҙал яулау планын арттырып үтәне һәм һөҙөмтәлә 2 алтын, бер көмөш һәм 2 бронза миҙал яуланы. Ирекле көрәш буйынса иһә ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәргә ҡарағанда уңышлыраҡ сығыш яһаны. Һөҙөмтәлә дөйөм миҙалдар һаны - 6. Теннисҭа иһә Рәсәй спортсылары ике миҙалға: Мария Шарапова - көмөш, ә Мария Кириленко менән Надежда Петрова икеһе бергә бронзаға лайыҡ булды. Ауыр атлетикала Рәсәй миҙалһыҙ ҡалһа, еңел атлетикала иһә 8 алтынға эйә булды. Лондон Олимпиадаһында иң уңышлы сығыш яһаусылар тип дзюдоистар командаһы билдәләнде. Улар алтын миҙал яулау буйынса планды өс тапҡырға арттырып үтәне! Һөҙөмтәлә дзюдоистар 3 алтын, бергә көмөш һәм бронза миҙалдар яуланы. Йөҙөүҙә иһә, киреһенсә, көтөлгән һөҙөмтәләр булманы. Рәсәй спортсылары бары тик дүрт миҙал алыуға өлгәште, тик улар араһында алтын миҙал булмай сыҡты. Велоспортта ла бары тик ике бронза һәм уларҙың хужаһы - Ольга Забелинская. Уҡтан атыусылар бары тик дүртенсе урынға ғына сыҡһа, бадминтон буйынса спортсылар бындай уйындарҙа тәүге тапҡыр уңышҡа өлгәште һәм бронза яуланы. Бокста сығыш яһаусылар Лондондан бер алтын, 2 көмөш һәм 3 бронза миҙал алып ҡайтты. Шулай уҡ байдарка һәм каноэла йөҙөү, тхэквандо, уҡтан атыу һәм фехтование буйынса рәсәйлеләр төрлө кимәлдәге миҙалдар яулауға өлгәшһә, парус спорты, биш төр ярышта, академик ишеүҙә, ат спортында һәм гандболда иһә урынһыҙ ҡалдылар. Ә үләндә хоккей уйнауҙа һәм футболда Рәсәй бөтөнләй ҡатнашманы.

Бына ошондай һөҙөмтәләр. Миҙал яулаусылар үҙ исемдәрен мәңгелеккә Олимпия һәм Рәсәй спорты тарихына индерҙе, ә уңышҡа өлгәшә алмаған һәр спортсы иһә үҙ сығышын тренеры менән ентекле тикшереп, киләһе уйындарға яҡшы физик һәм психологик әҙерлек менән килер, тип ышанайыҡ. Шулай уҡ Рио-де Жанейрола беҙҙең спортсыларҙы уңыш та ситләтеп үтмәһен, тип теләйек, сөнки был да мөһим фактор. Мәҫәлән, Лондон Олимпиадаһында штанга күтәреүҙә ярышташы менән бер үк һөҙөмтәгә өлгәшеп тә, 100 грамға ауырыраҡ булған өсөн генә миҙалһыҙ ҡалған Рәсәй спортсыһына... ана шул Уңыш ғәли йәнәптәре ҡамасауланы ла инде.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# СПОРТ ҺӨЙӨҮСЕ

## Кем ул, ниндәй ул?

**Лондонда XXX Олимпия уйындары Ер шарының миллионлаған-миллионлаған көйәрмәндәрен телевизор экрандарына ҡаҙаҡлап ултыртты. Уларҙың, бигерәк тә йәштәрҙең кеше күңелен аҙҙырыусы башҡа каналдарҙа барған фильмдарҙан, шаушоуҙарҙан айырылып, был уйындарға игтибарын йүнәлтеүе бик яҡшы, әлбиттә. Әммә бөтә спорт һөйөүселәр ҙә ысын спорт һөйөүсеме икән? Бынығы инде бөтөнләй башҡа мәсьәлә.**

Ни өсөн тигәндә, көйәрмәндәрҙең күбеһе көндәр һәм төндәр буйына бер туктауһыҙ, бер шағир әйтмешләй, "экран имеп" спорт ярыштары: футбол, волейбол, хоккей, баскетбол һ.б. ҡарай. Ғәҙәттә, уларҙың күбеһенең ҡулында һыра һәм тәмәке була. Әлбиттә, телевизорҙа барған спорт ярыштарындағы геройҙарға оҡшарға тырышып, үҙҙәре лә спорт менән әүҙем шөғөлләнә башлаусылар ҙа була. Әммә ундайҙар үтә һирәк. Үкенескә ҡаршы, спорт һөйөүселәрҙең был шөғөлгә ҡарата булған мөхәббәте, ана шулай, тамашасы булыуҙан уҙмай. Ундай көйәрмәндәр биш-ун йыл һуҙымында булып үткән матчтарҙа кемдәр менән кемдәр дәғүәләшкән, уйындар ниндәй иҫәп менән тамамланыуына тиклем яҡшы белә белеүгә, әммә бар белгәндәре шунан уҙмай. Спорт һөйөүсе менән ысын спорт һөйөүсе араһында айырма ҙур шул. Шулай түгелме?

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы

## Сәс ҡойолһа



❖ Аш тоҙон еүеш сәстәргә һылап, 10-15 минут ышҡырға. ❖ 1 өлөш коньяк, 2 өлөш һуған һуты, 6 өлөш дегәнәк төнәтмәһен ҡушып, баш тиреһенә һөртергә, 2 сәғәткә таҫтамал менән урап торорға, һуңынан йыуырға. Көн һайын ҡабатларға. ❖ Ҡайын япраҡтары төнәтмәһе лә ярҙам итер. Әгәр ҙә баш тиреһе майлы булһа, ҡауаҡлаһа, сәсте йыуып киптергәндән һуң баш тиреһенә кесерткән япраҡтары төнәтмәһе (1 ҡалаҡ кесерткәнде 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтеп, 1,5 сәғәт торорға, һөҙөргә) һөртөгөҙ. Аҙнаһына бер тапҡыр ҡулланырға. ❖ Ҡылыс үлән (аир) тамыры - 20 грамм, дегәнәк тамыры - 20 грамм, бәйгәмбәр тырнағы (ноготки) - 10 грамм, ҡомалаҡ тубырсыҡтары - 15 грамм. Уларҙы 1 литр һыуҙа төнәтеп, 2 сәғәт торорға, һөҙөргә. Төнгөлөккә баш тиреһенә һөртергә.

## Витилиго

Ала ауырыуы - нервы-эндокрин системаһының ҡаҡшауы һөҙөмтәһендә тәндә пигментһыҙ аҡ таптарҙың барлыҡҡа килеүе.

❖ 100 грамм ирәүән тамырын ит турағыс аша үткәреп, быяла банкаға һалырға һәм 50 грамм һеркә өҫтәргә. 3 көн йылы ҡараңғы урында торорға. Һөҙмәйенсә ауырыу урындарға һөртөргә.

❖ Ҡара боросто ҡыр йыуаһы менән ҡушып һөртөргә, ул тирене таҙарта. ❖ Ваҡланған марена үләне менән һеркәне ҡушып, һалырға. ❖ 60 процентлы натрий гипосульфаты иҙелмәһе менән 6 процентлы тоҙ кислотаһы (дарыуханала һатыла) ла ярҙам итә. Ҡулдарҙы һәм таптар булған урындарҙы йыуып, ҡоророрға. Тәрилкәгә тәүге иҙелмәне ҡойорға, тампон менән таптарға һөртөргә. 3 минуттан тағы ҡабатларға. 30 минут ял эшләргә. Икенсе һауытҡа тоҙ кислотаһы иретмәһе ҡойоп, шулай уҡ тампон менән зарарланған урынға һөртөргә. Бынан һуң тирелә һөт төҫөндәге шыйыҡлыҡ барлыҡҡа килә, бер аҙ әсетәсәк. Паузалар яһап, өс тапҡыр ҡабатларға. Тампонды алыштырып торорға. Бынан һуң тәнде һыу менән йыуырға. Беренсе аҙнала көн һайын, икенсе аҙнала - көн аша, бер аҙнанан һуң таптар бөтәсәк.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

***✓ Ҡыҙҙарҙы ҡалаға ебәрмәй тотоп буламы? Юҡ, әлбиттә. Тимәк, бер генә юл: егеттәрҙе ҡалаға, иң беренсе сиратта Өфөгә ылыҡтырыу тураһында һүҙ алып барырға кәрәк.***



*ШАНДАУ*

# Ә МӨХИТТЕ...

## кем иҫәбенә булдырырға?

**"Киске Өфө"нөң 25-се һанындағы Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай үткәргән әңгәмәне матур ғына итеп уҡып ята инем... Бына һиңә, тағы шул бер үк балыҡ башы! Әхмәр йүнәлешле һорау бирә, йәштәр шул йүнәлештә яуап ҡайтара: йәнәһе лә, башҡорттар һаҡланһын өсөн улар ауылда йәшәргә тейеш! Шул уҡ ваҡытта ҡалала башҡортса һөйләшеү, аралашыу, башҡорт рухлы мөхит булдырыу тураһында һүҙ алып баралар, ә кем иҫәбенә быны эшләргә һуң? Был теге "ҡыҙ ҙа булһын, быуаҙ ҙа булһын" тигән кеүек килеп сыға түгелме?**

Элегерәк шул уҡ Әхмәр дуҫымдың бер поэмаһы баҫылғайны, унда ҡыҙҙарҙың ҡалаға күсеп китеп бөтөүе, ә егеттәрҙең ауылда ҡалып, өйләнә алмай интегеп, эсеп йөрөүҙәре, ә ҡалаға килгән ҡыҙҙарҙың, башҡорт егеттәрен тапмағас, башҡа милләт кешеләренә кейәүгә сығыуы тасуир ителә ине. Ә нишләргә һуң был проблеманы еңеп сығыу өсөн? Ҡыҙҙарҙы ҡалаға ебәрмәй тотоп буламы? Юҡ, әлбиттә. Тимәк, бер генә юл: егеттәрҙе ҡалаға, иң беренсе сиратта Өфөгә ылыҡтырыу тураһында һүҙ алып барырға кәрәк.

Бөгөнгә башҡорт халҡының 56 проценты ауыл ерендә йәшәй. Ауылда эш юҡ, Урал тәбәгендә ауыл хужалығы боронғо хужалыҡ итеү ысулдарына күсеп бөтөп бара. Ә бының өсөн кеше һаны ул тиклем күп булырға тейеш түгел. Борон башҡорт бик дөрөҫ йәшәгән. Ул аҡсаны байлыҡҡа һанамаған, алыпһатарлыҡты абруйлы эш тип иҫәпләмәгән. Заманы өсөн дәп-дөрөҫ. Башҡорт өсөн байлыҡ булып ере, тәбиғәте, мал-тыуары иҫәпләнгән. Әммә заманалар ныҡ үҙгәрҙе. Башҡорттоң бындай донъяуи ҡарашы нигеҙҙә дөрөҫ булып та, бөгөнгө көн ысынбарлығында халыҡтың артта ҡалыуына килтерә. Бик йылдам тормошҡа ашырылған глобалләшеү осоронда ла һаман бер ҡатлы тәбиғәт балалары булып ҡалыу беҙгә донъя халыҡтары араһында тейешле урын биләүгә булышлыҡ итмәйәсәк.

Хәҙерге иҡтисадтың бер үҙенсәлеге бар. Кемдер етештерә, ә кемдер ашай. Был бигерәк тә ауыл хужалығы өлкәһендә асыҡ күренә. Икенселәр бер нәмә етештермәйенсә, типтереп йәшәй, һаман да байый бара. Сөнки бында туҡтауһыҙ ҡатмарлаша барыусы, байлыҡты бүлеүсе технологиялар тураһында һүҙ бара. Был технологияларҙы белмәгән кешеләр, уларҙы иҫәпкә алмаған ҡәүемдәр һаман артта һөйрәлә. Ә ауылда йәшәп кенә был технологияларға эйә булып булмай.

**Ҡадир МӘҒӘФҮРОВ.**

# ХУЖАҺЫ БУЛМАҒАС...

## һаҡлаусыһы ла юҡ

**Халыҡ әйтмешләй, күп белһәң, күп илараһың, бик аҙ көлөрһөң. "Киске Өфө"лә Ғәләм Шәриповтың "Ете мөғжизәбеҙҙең береһе" мәҡәләһен уҡып сыҡтым да, ауыр хистәргә бирелеп, илар сиккә етеп ултырыуым.**

"Шүлгәнташ" мәмерйәһенең боронғо һүрәттәренең аҡтарып алыныуы, мамонт һүрәте аҫтына "Смирнов" тип яҙылыуы, болан һүрәтенең өҫтөнә "Беседин" тип яҙып китеүҙәре һәм башҡа ошондай әҙәпһеҙ ҡылыҡтар, вандализмға тиң күренештәр мәҙәни ҡомартҡыға күпме зыян килтерә. Мөғжизәне күрергә тип киләләр ҙә, иң яуыз, ҡырағай халәтҡә инеп, емереү эштәрен башҡаралар. Яҡлауға, һаҡлауға мохтаж байлығыбыҙҙы нисек ошо хәлгә төшөрөргә мөмкин?

Бөгөн туризм эшҡыуарлығын үҫтереү тураһында күп һөйләйҙәр. Әммә әлегә тәбәккә килем килтерерлек, шул уҡ ваҡытта тәбиғәтте ҡурсыу аҫтына алырлыҡ эштәр һүлпән бара. Хәҙерге туризмдың файҙаһына ҡарағанда, зыяны күберәк, миңә ҡалһа. Ситтән килеүселәр өсөн ҡағиҙәләр булдырыу, тәртип боҙоуҙарҙы иҫкәртеү саралары күрелеп етмәй. Бәлки, "Шүлгәнташ"ты аҡсаһы ла булған, тыуған ер өсөн көйгән, рухлы берәй бай башҡортҡа тапшырырғалыр, тигән фекер ҙә тыумай ҡалмай. Хужа булһа, һаҡлаусыһы ла була бит...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

# АТАЙЫМ ӨЙРӘТТЕ...

## тун бесергә лә, уҡ юнырға ла

**Тормош хаҡында фәлсәфә ҡорһаң, уның ҡанундарына, серҙәренә һис төшөнөп бөтөрлөк түгел. Шуға күрә үҙенә тәғәйен ғүмер йомғағын да төрлөсә тағата әҙәм балаһы. Берәүҙәренеке һикәлтәле, ҡатмарлы юлдарҙа ла һәүетемсә генә тәгәрәп барһа, икенселәренеке иһә тигеҙ ерҙә лә сыбалып, туҡтап ҡала. Үҙ ебеңде дөрөҫ тағатыу өсөн уның осон табып, нисегерәк һүтеп ебәреүең дә мөһимдер, күрәһең. Эйе, һәр кемдең йомғағы үҙ ҡулында, уны нисегерәк һүтеүҙе лә ул үҙе генә хәл итә.**



...Быйылғы һабантуйҙа Сермән ауылы тирмәһе күргәҙмәһенә иғтибар итмәү мөмкин түгел ине. Сағыу ҡул эштәренең хужаһын белешкәс, уның Лариса Иҫәнбаева булыуы һәм ҡул эше оҫтаһының сигеү, бәйләүҙән тыш, пластик һауыттарҙан, ташлап ҡуйған тәгәрмәстәрҙән, хатта макарон изделиеларынан да мөғжизәле әйберҙәр тыуҙырыуы асыҡланды. Байрамдан һуң, яҡынданыраҡ танышыу өсөн, оҫтабикәнең өйөнә юлландыҡ.

Күркәм йорт алдына барып туҡтау менән әллә ҡайҙан уҡ тыныш, егәрле хужалар йәшәүе күҙгә салына. Баҡса ғына түгел, ҡапҡа эсе лә аллы-гөллө сәскәләргә күмелгән. Һәр нәмәнең күңел һалып, ҙур зауыҡ менән эшләнгәне һиҙелә. Сәскәләргә һыу ҡойоу өсөн ултыртылған күнәктәр ҙә, ҡапҡа эсен яҡтыртыуға ҡуйылған лампалар ҙа үҙенсәлекле, үҙенә күрә айырым бер зауыҡ менән уйланылған. Әлбиттә, быларҙың барыһын да булдырыу өсөн, теләктән тыш, ваҡыт таба белеү ҙә ауыл кешеһе өсөн иң мөһимдер, моғайын.

Ауылдағы тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫлек мәшәҡәттәрҙән арынып, күңеленә яҡҡан шөғөл менән булышырға мөмкинлек таба белгән ябай ғына ауыл ҡатыны ысын мәғәнәһендә һоҡланыу уятты. Лариса Насип ҡыҙы тормош иптәше Альберт Хәмитйән улы менән эшҡыуарлыҡ өлкәһендә шөғөлләнә. Уларҙың үҙ пилорамаһы, ҙур баҡсалары бар, күпләп ҡош-ҡорт аҫрайҙар. Быйыл мең төп кәбеҫтә, 20 гектар ергә картуф ултыртҡандар. Егәрле ғаиләнең үҙ эшен асыуы башҡаларға ла файҙа, сөнки өҫтәмә эш урындары барлыҡҡа килгән.



Мәҫәлән, уларҙың пилорамаһында 7 кеше эшләһә, баҡсаларында 6 кеше ярҙам итә. Заманса ҡарашлы татыу ғаилә бер урында ғына тапанмай, бик күп матур хыялдары, ниәттәре бар уларҙың. Әлеге ваҡытта умартасылыҡ менән шөғөлләнеүгә документтар әҙерләйҙәр, эре мал үрсетергә лә иҫәп тоталар. Заман менән бергә атлап йәшәгән ғаиләлә бер малай һәм бер ҡыҙ үҫә, был йәһәттән дә тормоштары түңәрәк Иҫәнбаевтарҙың.

Халыҡта "Әсәнән күргән - тун бескән, атанан күргән - уҡ юнған" тигән мәҡәл бар. Тик был осраҡта бесеү, сигеү, тегеү эштәренә һәләттең уҡ юнырға өйрәтергә тейеш булған атай кешенән килеүе ғәжәпләндерә. Лариса Насип ҡыҙының атаһы Насип Таип улы ла ауылда оҫта тигән даны сыҡҡан алтын ҡуллы ирҙәмандарының береһе була ул. Мейес сығарһыңмы, заказға ағас әйберҙәр, кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙарға семәрле һандыҡтар эшләһенме, барыһы ла килә уның ҡулынан. Ә инде ҡатын-ҡыҙҙар ғына башҡара белгән бәйләү, иләү, тетеү кеүек нескә шөғөлдәр менән булышыуы оҫтаның дәрәжәһен тағы ла нығыраҡ күтәрә. Насип ағай Лариса ҡыҙын һәр саҡта ла эргәһендә йөрөтә. Шул арала белгәндәрен өйрәтеп, ҡыҙ бала күңеленә ныҡышмаллыҡ, тырышлыҡ орлоҡтары һалып, уға сүкеш-балта тотоу, ышыу-бысыу серҙәрен дә өйрәтә. Шуға күрә лә Лариса ирҙәр ҡулы кәрәккән ерҙә лә юғалып ҡалмай, сүкеш-балта тотоп башҡара торған эштәрҙе лә анһат ҡына башҡарып ҡуя.

Лариса Насип ҡыҙының ырғаҡ, энә менән бәйләгән пальто, кофта-ҡулдаҡтәрен, шәлдәрен, балалар кейемен, ҡатын-ҡыҙҙар сумкаһын һ.б. бик яратып, теләп һатып ала ауылдаштары. Һабантуй күргәҙмәһенә ҡуйылған әйберҙәрен һатып алырға теләүселәр ҙә күп була. Әйткәндәй, Лариса Иҫәнбаеваның һабантуйҙағы ҡул эштәре күргәҙмәһе муниципаль район хакимиәте башлығының айырым Маҡтау ҡағыҙына лайыҡ булды.

- Күп ҡул эштәренә интернет, гәзит-журналдар аша уҡып өйрәнәм, башҡаларҙың тәжрибәһенә күҙ һалам. Ташлап ҡуйылған юҡ ҡына нәмәнән дә һоҡландырырлыҡ матур әйберҙәр эшләргә була. Мәҫәлән, баҡса эсендә ултырған ҙур пальма ла ябай ғына ташландыҡ нәмәләрҙән яһалған. Уны эшләүгә 200-гә яҡын ике төрлө пластик шешә китте.





Унайлыраҡ булһа ла, бындай һауыттарҙы урам, йылға буйҙарынан йөрөп йыйып алам. Юл буйында туҙып ятҡан ошо уҡ пластик шешәләрҙең ҡапҡасын да биҙәкләү материалы итеп файҙаланам, - ти Лариса Иҫәнбаева.

Ысынлап та, ваҡыт бөтә кешегә лә тигеҙ бирелә. Әллә күпме асыштар яһаған ғалимдарҙың да, том-том китаптар яҙған яҙыусыларҙың да, йәки башҡа төрлө өлкәлә билдәле кешеләрҙең дә тәүлек эсендәге сәғәттәр иҫәбе нәҡ беҙҙеке кеүек. Шуға күрә, ваҡыт юҡлыҡҡа һылтанмай, уны дөрөҫ файҙалана белеү үҙе үк ҙур оҫталыҡтыр. Ваҡытыңды дөрөҫ файҙалана белмәһәң, һин ваҡытҡа түгел, ваҡыт һиңә хужа буласаҡ, тип бушҡа ғына әйтмәйҙәрҙер. Был осраҡта гөрләтеп донъя көтөргә лә, балалар тәрбиәләргә һәм яратҡан шөғөлө менән булышырға ла өлгөргән мәҡәләбеҙ геройы Лариса Иҫәнбаева күптәргә өлгө булып тора.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**
**Белорет районы.**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

**Һуңғы йылдарҙа генетиктар хәҙерге халыҡтарҙың килеп сығышына ҡағылышлы бер нисә асыш яһаны. Ғалимдар бөгөнгө башҡорттарҙа Көнбайыш Европаның ҡайһы бер халыҡтары - инглиздәр, ирландтар, француздарға хас генетик маркерҙарҙың юғары тупланышын тапты. Шул уҡ ваҡытта Франция һәм Көньяҡ Урал территорияһында ғына боронғо кешенең мәмерйәгә төшөргән һүрәттәре табыла. Ошо ике факт үҙ-ара нисек бәйләнгән, уларҙың башҡорттарҙың этногенезын билдәләүгә ниндәй ҡатнашлығы бар? Ошо һорауҙарға асыҡлыҡ индереү маҡсатында тарихсы Салауат ХӘМИҘУЛЛИНға мөрәжәғәт иттек.**

# МИЛЛӘТЕБЕҘ...

## генетиканы ла, "Урал батыр"ҙы ла һаҡлаған

-1959 йылда "Башҡортостан" ҡурсаулығы хеҙмәткәре Александр Рюмин Шүлгәнташ мәмерйәһендә боронғо һүрәттәргә юлыға, - тип һөйләп китте С. Хәмиҙуллин.- Был асыш Көнбайыш Европала ғына түгел, Көньяҡ Уралда ла боронғо мәҙәниәт барлығын раҫлаусы донъяуи сенсация була. Рюминдың табышы ғалимдар алдына кешелектең мәҙәниәтенә һәм этногенезына ҡағылған бик күп һорауҙарҙы ҡуя.

Шүлгәнташтың ҡаяташтағы һүрәттәрен асыуға тиклем палеолит эпохаһындағы боронғо кешенең сәнғәте, нигеҙҙә, Францияның көньяғында, Испанияның төньяғында урынлашҡан Пиреней-Кантабрийск төбәге һүрәттәре аша билдәле була. Шуға күрә Көнбайыш Европала ғына боронғо мәҙәниәт йәшәгән, тигән күҙаллау булған. 1879 йылда асылған Испаниялағы Альтамира мәмерйәһен юҡҡа ғына "Таш быуаттың Сикстин капеллаһы" тип атамайҙар. Икенсе билдәле мәмерйәне - Ласконы 1940 йылда Францияның көньяғында табалар. Тикшеренеүселәрҙең береһе уның тураһында былай ти: "Әгәр Альтамира - мәмерйә сәнғәтенең баш ҡалаһы булһа, Ласко - уның Версале".

1959 йылда Шүлгәнташта асылған мәмерйә сәнғәте кешелек цивилизацияһының үҫеше, мәҙәниәте һәм этногенезының ғәҙәти күҙаллауҙарын боҙа. Быуаттар төпкөлөндә бер үк ваҡытта тиерлек Европаның ике осонда кешелек интеллектының усағы ҡабына. Рюминдың табыштарын ҡабаттан тикшереү өсөн Башҡортостанға Отто Бодер экспедицияһы ебәрелә. Ул 1960 йылда Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәр һуңғы палеолитҡа ҡарай, тип белдерә.

Шүлгәнташты өйрәнеүҙә артабанғы этап булып Ленинград археологы Вячеслав Щелинскийҙың тикшеренеүҙәре тора. Ул һүрәттәргә түгел, мәмерйәнең еренә, тупрағына нығыраҡ иғтибар итә. 1994 йылда иң һуңғы һәм донъяуи сенсация булып исемһеҙ мәмерйәлә табылған яңы һүрәттәр тора. Был мәмерйәне уны табыусы Шова исеме менән атай башлайҙар. Шова һүрәттәре үҙҙәренең камиллығы менән һоҡландыра. Рәссам төрлө техника һәм алымдар ҡуллана, төрлө төҫлө һүрәттәр яһай. Ҡайһы бер хайуандар профилдә түгел, ә ғәҙәттәгесә, тамашасыға башы менән бороп яһалған. Боронғо оҫта перспектива ҡағиҙәләрен аңлап эш иткән. Мәҫәлән, күмәк сәхнәне һүрәтләүсе хайуан силуэтының ҡайһы бер деталдәрен бер нисә тапҡыр ҡабатлаған. Тәүҙә ғалимдар хатта һүрәттәрҙең төп нөсхә икәнлегендә шикләнә, уларҙы беҙҙең заманда яһағандар, тип уйлай, сөнки хайуандарҙың һүрәте шул тиклем камил була. Артабан бындай һүрәтләү ысулы яҡынса 10 мең йылдан ашыу ваҡыт үткәс кенә Боронғо Мысырҙа ҡабатлана!



**➔ Европаның төрлө өлөштәрендә - көнбайышта, йәғни Францияла, Испанияла һәм көнсығышта, йәғни Көньяҡ Уралда йәшәүсе кешенең интеллектуаллеге һәм ижади фекерләүе бер үк ваҡытта уяныуын нисек аңлатырға?**

- Мәмерйә сәнғәте донъяның атап үтелгән мөйөштәрендә үҙ алдына һәм бер-береһенән айырым барлыҡҡа килгәненә ышаныу ҡыйын. Ул ваҡытта кешеләр күп булмай: Европала йәшәгән популяциялар ни бары бер нисә йөҙ мең кеше иҫәпләнә. Ерҙә халыҡтарҙың аҙ булыуын, шулай уҡ боронғо халыҡтарҙың боронғо ҡырағай хайуандар артынан тиҙ күсенеүен иҫәпкә алып, Шүлгәнташ, Альтамира һүрәттәре авторҙары нисектер генетик яҡтан бәйләнешле булған, тигән һығымта үҙенән-үҙе тыуа. Бары тик мәсьәлә шунда ғына: рәсем мәҙәниәте ҡайһы яҡтан килгән - Көньяҡ Уралдан Пиреней төбәгенәме, әллә киреһенсәме?

Шулай итеп, Альтамира һәм Шүлгәнташтағы палеолит сәнғәтенең авторҙары көнбайыштан көнсығышҡа табан хәрәкәт иткән һәм үҙе менән боронғо сәнғәт ғәҙәттәрен алып барған тәүтормош кешеләренең бер үк төркөмө булған. Ҡайһы бер генетиктарҙың фекеренсә, Европаның боронғо халҡы *R1b* гаплотөркөмөн йөрөтөүселәр булып иҫәпләнә.

*Гаплотөркөм - оҡшаш генотиптарҙың берлеге. Британия генетиктары Брайан Сайкс менән Стивен Оппенгеймер ирҙәр яғынан тапшырылған Y-хромосомалы R1b гаплотөркөмө Көнбайыш Европаның палеолит (һинд-европа төркөмөнә тиклемге) халҡынан барлыҡҡа килгән, тип раҫлай.*

*R1b* гаплотөркөмө бынан 20 мең йыл элек Көнбайыш Азияла барлыҡҡа килә һәм һуңынан Европа территорияһы буйынса тарала башлай. Ҡайһы бер мәҡәләләргә ярашлы, Англияның, Шотландияның, Ирландияның, Төньяҡ Францияның 70-тән алып 90 процентҡа тиклем халҡы ошо генотипты йөрөтөүселәр тип иҫәпләнә. Был гаплотөркөмдөң билдәле тупланмаһы башҡорттарҙа ла булыуы асыҡланғас, генетиктарҙың аптырауының сиге булмай.

Башҡорт халҡының төрлө төркөмдәренең *Y*-хромосомалы *R1b* гаплотөркөмө йышлығы төрлөсә: бер төркөмдә - бик юғары, икенселәрендә - түбән. Әммә уртаса алған һандар ҙа хәҙерге башҡорттарҙың һиҙелерлек өлөшөндә Көнбайыш Европа гендары булыуы тураһында һөйләй. Тимәк, генетика археологтарҙың Көньяҡ Урал менән Францияның палеолит мәҙәниәте бәйләнеше тураһындағы фекерен раҫлай.

*R1b* гаплотөркөмөнөң иң юғары тирбәлеше - 81-ҙән 84 процентҡа тиклем - Пермь крайы һәм Баймаҡ районы башҡорттарында, иң түбәне - 0,7 процент - Әбйәлил районында. Был башҡорт халҡының күп компонентлы булыуын раҫлаусы тағы бер дәлил. Уртаса алғанда был һан 35 процент тәшкил итә. "Көньяҡ Урал популяцияһында атай яғынан юғары тирбәлеш көтөлмәгән асыш булып тора, сөнки ошо гаплотөркөм уның менән сиктәш бер генә территория өсөн дә (Үҙәк Азия, Көнбайыш Европа һәм Себер) хас түгел", - тип яҙыла генетика буйынса тикшеренеүҙәрҙең береһендә.

Башҡорттарҙың генофондында икенсе урында *R1a* гаплотөркөмө тора.

*R1a гаплотөркөмө. Һинд- европа халыҡтары популяцияһы араһында киң таралған. Иң юғары тирбәлеше - 50-нән 70 процентҡа тиклем - славяндарҙа (рустарҙа, украиндарҙа, поляктарҙа, белорустарҙа, чехтарҙа), шулай уҡ һинд-ирандарҙа - тажиктарҙа, пуштундарҙа, белуджиҙарҙа, пенджабтарҙа билдәләнә. Уртаса тирбәлеш татарҙарҙа (33 процент) һәм башҡорттарҙа (26 процент) билдәләнә.*

*R1a* гаплотөркөмө бынан 15 мең йыл элек Азияла барлыҡҡа килә. Уның Көньяҡ Уралда барлыҡҡа килеүе үҙҙәренән һуң Һынтыш, Арҡайым һәм "ҡалалар иле"нең башҡа объекттарын ҡалдырған боронғо арийҙарҙың миграцияһы менән бәйле. Боронғолоғо һәм Европала барлыҡҡа килеү ваҡыты менән ул *R1b* гаплотөркөмөнән ҡалыша.

Ниһайәт, өсөнсө гаплотөркөм булып *N-Tat* - "Сыңғыҙхан гены" тора һәм ул 19 процент башҡортта осрай. Үҙенең атамаһына ҡарамаҫтан, ул Көнсығыш Европаға монголдар килеүенә түгел, ә Себерҙән килгән боронғораҡ миграцияларға, тәү сиратта, уғыр халыҡтарына бәйле.

Ир-ат яғынан күскән өс күрһәткес тә бик боронғо, бынан 15-20 мең йыл элек барлыҡҡа килгәндәр: *R1b* гаплотөркөмө Евразияның һинд-европаға тиклемге (палеолит) халҡына, *R1a* - хәҙерге һинд-европа халҡының ата-олаталарына, *N-Tat* Себерҙең боронғо уғырҙарына ҡарай.

Был хәҙерге башҡорттарҙың ир-ат яғынан бирелгән *Y*-хромосомаһына ҡағыла. Әммә хәҙерге генетика бары тик әсә яғынан ғына бирелгән митохондриаль ДНК-ны өйрәнеү ҡорамалына ла эйә. Бында инде башҡорттарҙың этногенезы икенсе төрлөрәк күҙаллана.

Сағыштырмаса анализдан һуң шундай төп һығымта яһарға мөмкин: ир-ат яғы ҡатын-ҡыҙ яғына ҡарағанда күберәк Европа гендарын йөрөтә. Ҡатын-ҡыҙ яғы буйынса башҡорттар - 40 процентҡа, ир-ат яғынан ни бары 15 процент ҡына азиат булып тора.

Бындай диспропорция Көньяҡ Урал территорияһының борондан ир-ат коллективтарының - европалы һунарсылар, хәрбиҙәр, баҫып алыусыларҙың баҫҡынсылығына дусар булыуын аңлата. Улар урындағы ҡатын-ҡыҙ менән никахҡа инеп, автохтон халыҡтың генофондында үҙ эҙен ҡалдыра.

**➔ Ҡабат мәмерйәләге һүрәт төшөрөү сәнғәтенә урап ҡайтайыҡ. Боронғо кешенең сәнғәте башҡорттарҙың этногенезының ниндәй серҙәрен аса? Һәм ул генетика мәғлүмәттәре менән ниндәй бәйләнештә?**

- Шүлгәнташта табылған һүрәттәр Көньяҡ Уралда берҙән-бер түгел. Рәсемдәр шулай уҡ Башҡортостандың төрлө өлөштәрендә урынлашҡан Игнатьев (Ямаҙыташ), Мораҙым мәмерйәләрендә табыла. Һуңғыһында уларҙың йәше 8 мең йыллыҡ боронғолоҡ менән билдәләнә. Археолог, тарих фәндәре кандидаты Вячеслав Котов хатта һүрәт төшөрөүҙең традицияларына 10 мең йыл булыуын билдәләй. Уйлап ҡарағыҙ - 10 мең йыл өҙлөкһөҙ мәҙәни традиция! Ә шул уҡ ваҡытта Европалағы күпселек халыҡтарҙың тарихы 1,5 мең йылдан да оҙайлыраҡ түгел.

"Күсәр ваҡыт"ында мифологик аңдан рациональ-философия аңына сифатлы күсеү булған кеүек, һуңғы палеолит осоронда ла боронғо халыҡтар тәүтормош аңынан мифологик аңға күскән. Ласко мәмерйәһенең залдарының береһендә серле күренеш бар: бизон эргәһендә ҡолап барған кеше һүрәтләнә. Кешенең башы ҡоштоҡо, ә бизон ҡыҫҡа һаплы һөңгө менән зыянланған. Ғалимдар, был күренеш боронғо мифологиянан килә, әммә уның мәғәнәһен бер нисек тә тергеҙеп булмай, ти. Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәрҙе тикшереүсе ҡайһы бер ғалимдар шулай уҡ унда хайуандарҙың һәм ниндәйҙер геометрик фигураларҙың ябай һүрәте түгел, ә айырым сюжеттарҙың иллюстрацияһы төшөрөлгән, тип иҫәпләй.

Әлеге ваҡытта Шүлгәнташта 170-тән ашыу һүрәт бар. Альтамира, Ласко һәм Шова һүрәттәренән айырмалы, улар сағыу түгел, ләкин сюжет линияһы булған картинаны тәшкил итеүе менән бик ҡиммәт. Боронғо кешенең донъяға ҡарашы архетиптары мифтарҙа ла сағылыш тапҡан. Миф - йәшәүгә һәләтле һәм даими субстанция. Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәр менән "Урал батыр" һәм "Аҡбуҙат" эпостары араһында параллелдәр бар. "Аҡбуҙат" эпосында Шүлгән батшаның ҡыҙы Һәүбәнгә күл төпкөлөнән һанһыҙ күп ат өйөрө, ҡуй көтөүе, һыйыр һәм иң мөһиме, ҡанатлы ат - Аҡбуҙатты сығара. Әммә герой, вәғәҙәһен боҙоп, боролоп ҡарай һәм бар көтөү кире һыуға инеп юғала. Археолог Вячеслав Котов фекеренсә, был миф Шүлгәнташ мәмерйәһендәге панноларҙың береһендә сағылыш тапҡан. Шүлгәнташ мәмерйәһе һәм "Урал батыр" эпосы рухи һәм матди мәҙәниәттең берҙәм комплексын тәшкил итә. Шуға күрә был ике һәйкәл дә донъя цивилизацияһының бер тиң һәйкәле булып тора.

Атап үтелгән мифтар хәҙерге башҡорттарҙың Шүлгәнташ мәмерйәһендә рәсем сәнғәтен тыуҙырыусылар менән рухи күсәгилешлеге тураһында һөйләй. Генетика мәғлүмәттәре, данлыҡлы *R1b* гаплотөркөмө һәм митохондриаль ДНК-һы башҡорт этносын франко-пиреней төбәгенең һәм Көньяҡ Уралдың палеолит мәҙәниәте менән бәйләй.

Теләһә ниндәй халыҡтың этногенезы ҡатмарлы һәм оҙайлы процесс. Был мөнәсәбәттә башҡорттар ташлама түгел, ә сағыу миҫалдарҙың береһе. Археологтар, генетиктар, мифологтар һәр ҡайһыһы айырым-айырым, әммә бер төрлө һығымтаға килә: башҡорттар Көньяҡ Уралдың боронғо халҡының вариҫтары булып тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һөйләнгәндәр, әлбиттә, Көньяҡ Уралдың палеолит халҡы төрки телендә һөйләшкән һәм үҙен башҡорт тип атаған тигәнде аңлатмай. Һүҙ хәҙерге башҡорттарҙың таш быуаттан алып урындағы популяцияға ҡушылған барлыҡ этник компоненттарҙы үҙ эсенә алыуы тураһында һөйләй. Ә унда Көнбайыш Европаның *R1b* гаплотөркөмөн йөрөтөүселәр ҙә, Арҡайым арийҙары ла, азиат генын йөрөтөүсе уғырҙар ҙа була. Бары тик этногенездың һуңғы этабында ғына - бынан 1500 йыл элек урындағы халыҡ төркиләшә башлай. Хәҙер башҡорт булараҡ билдәле халыҡ ошо генетиканы ғына түгел, ә Шүлгәнташ мәмерйәһе стеналарында һүрәтләнгән һәм "Урал батыр" эпосында яҙылған боронғо космогоник мифтарҙы ла һаҡлап ҡалған.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

✓ *Башҡорт рәссамдарының төп өҫтөнлөгө - милли тарихыбыҙҙың, мәҙәниәтебеҙҙең, сәнғәтебеҙҙең бай булыуында. 90-сы йылдарҙа беҙҙең барлыҡ эштәребеҙ тыуған яҡ, атайсал темаһына бағышланды.*



(Башы 1-се биттә).

**Беҙ юғары рух күтәренкелеге менән дәртләнеп йөрөгән үткән быуаттың 90-сы йылдары тарихта тороп ҡалды. Ул саҡтарҙа беҙ, әҙәбиәт өлкәһендә эшләүсе йәштәр, милли рух, ватансылыҡ тойғоһо хаҡында юғары пафослы шиғырҙар ижад иттек, мәҡәләләр яҙҙыҡ, ә һеҙ иһә ҡапылғарай бигүк аңлап та булмаған авангард стилендә һүрәттәр ижад иттегеҙ. Хәҙер ул замандағы рухи күтәренкелек һүрелде, донъяға доллар аша ҡарарға мәжбүр итеүсе заман һәр ҡайһыбыҙҙы үҙ йортона бикләй. Хәҙер яҙыусылар менән рәссамдар бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөшмәй ҙә тиерлек. Һеҙ ошо ваҡыт арауығына ниндәй баһа бирәһегеҙ? Ғөмүмән, һуңғы егерме йыл эсендә башҡорт һынлы сәнғәте ниндәй үҫеш этабы үтте, тип уйлайһығыҙ?**

**Ә. Мәзитов:** Беҙ баштан уҡ үҙебеҙҙең алға юғары маҡсаттар ҡуйып эш иттек һәм ул маҡсаттарға тулыһынса барып етмәһәк тә, нимәлер эшләй алдыҡ, тип уйлайым. Оноре де Бальзак, ниндәйҙер маҡсатҡа өлгәшкең килһә, үҙеңдең алдыңа көс етмәҫлек маҡсат ҡуйырға кәрәк, шул ваҡытта ғына хыялыңа яҡынырыраҡ килә алырһың, тип әйткән. Әхмәт ағай Лотфуллин беҙҙең оҫтаханаға килеп инә лә: "Ҡайҙан килеп сыҡтығыҙ әле һеҙ икәү?" - тип һоҡланыуын белдерә торғайны. Ул беҙҙең үҙҙәренә оҡшарға тырышмауыбыҙҙы оҡшатты. Ысынлап та, беҙ үҙ эштәребеҙҙә Лотфуллинға, Пантелеевҡа, Домашниковҡа оҡшарға тырышһаҡ, плагиат һаналыр инек. Әхмәт ағайға оҡшарға тырышманыҡ, бар ынтылышыбыҙ - уның юлын ҡабатламаҫҡа тырышыу булды. Әгәр ҙә беҙ эштәребеҙҙе уныҡына оҡшатып эшләһәк, шунда уҡ юҡҡа сығыр инек. Күптәр шулай башҡаларҙы ҡабатлап, үҙ йөҙөн таба алмайынса, юғалып, теге быуатта тороп ҡалды.

**Й. Сөләймәнов:** Беҙ хәҙер үҙебеҙҙең юлыбыҙҙы таптыҡ тип иҫәпләйбеҙ. Композицион яҡтан төрлөлөктән дә ҡурҡмайбыҙ. Беҙҙең эштәрҙең дөрөҫ төҙөлгән композицияһын ҡарап, башҡорт тематикаһын бөтөнләй белмәгән сит ил сәнғәт белгестәре лә уларҙың сюжеты, нимә хаҡында һүҙ барыуы тураһында һөйләп бирә ала. Бында улар төҫтәргә лә иғтибар итә. Хәҙер беҙҙең эш-

**Ә. Мәзитов:** Яланғас риторика, ҡоро декларативлыҡ беҙҙә лә булды. Әхмәт ағай беҙҙең был сифатты ҡыйыулыҡ тип баһаланы. Торараҡ беҙ ул яланғаслыҡтан ҡотолоп, философик уйланыуҙарға күстек. Ер шарында бер бәләкәй генә утрауҙы, нөктәне хәтерләтә беҙҙең Башҡортостан. Нисек итеп беҙ шул урынды ташлап, башҡа темаларға тотона алыр инек инде? Беҙҙең башҡа таяныр нөктәбеҙ юҡ бит. Әхмәт ағай беҙҙе бик ҡаты тотто, талаптары ла ҡаты булды. Ул беҙҙе үҙебеҙҙең әһәмиәтте аңлатыр һүҙҙәр таба алмайынса, әрләргә тотоноп китер ине хатта. "Минең һүрәттәрем хәҙер инде үткән заман, бына һеҙ, егеттәр, милләтебеҙ һынлы сәнғәтенең

**жинизм менән Есенин яфаланған. Улар һәр ҡайһыһы үҙ "изм"ы менән килгән дә, һуңынан, реализмға күскән ваҡытта ҡасандыр яфаланған "изм"дары әҫәрҙәренә үҙенсәлекле төҫ биргән. Бына һеҙҙең 90-сы йылдар авангардизмы хәҙерге башҡорт һынлы сәнғәтендә нисек сағылыш таба?**

**Й. Сөләймәнов:** Һынлы сәнғәт йәшәй икән, беҙ ул "изм"-дарҙан бер ваҡытта ла ҡотола алмаҫбыҙ ул. Сөнки ниндәй генә һүрәт эшләмәһәк тә, сәнғәт белгесе килә лә: "Был - экспрессионизм, был - наивизм, был - примитивизм", - тип беҙҙең эштәргә "изм" ҡойроҡтары таға башлай. Мин бит һүрәт төшөргәндә был хаҡта бөтөнләй уйламайым.

# Йәнебеҙҙең

## милләтебеҙҙе күтәреүгә



**Й. Сөләймәнов:** Беҙ Әмир менән нәҡ шул 90-сы йылдарҙың башында ижадҡа килдек тә инде. Әйтергә кәрәк, ул замандар илебеҙ халҡы өсөн иң ауыры булғандыр. Рәссамдарҙың ул заманда оҫтаханалары ла, йәшәгән урындары ла бер бүлмәлә булды. Ул бүлмәләргә үҙебеҙ һымаҡ йәш шағирҙар һәм яҙыусылар килеп йөрөнө. Төндәр буйына һөйләшеп-бәхәсләшеп, һүҙҙәр бөтмәй торғайны. Бер нәмәбеҙ ҙә булмаһа ла, ул саҡта рухыбыҙ күтәренке булды, шул рух беҙгә ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға ярҙам итте. Хәҙер килеп ул саҡта эшләгән һүрәттәребеҙҙе ҡараһаҡ, бер ҡатлы булыуыбыҙ ҙа һиҙелә. Әммә нисек кенә булмаһын, беҙ ул осорҙағы ижадыбыҙҙан баш тарта алмайбыҙ, сөнки тап шул саҡта беҙҙең хәҙерге кимәлебеҙҙең нигеҙе һалынған. Беҙ, йәш рәссамдар, ул саҡта бер хәлгә аптырай инек: ниндәй генә һүрәт эшләһәк тә, башҡорт темаһы килә лә сыға. Әгәр ҙә шул темаға бәйле рухи күтәренкелегебеҙ булмаһа, рәссам да булып китә алмаҫ инек. Күп кенә шағирҙар шиғыр яҙа алмаған кеүек. Беҙҙе ул заманда ижад кешеләре менән тығыҙ аралашыу ҙа ҡотҡарҙы. Шағирҙар, артистар, композиторҙар ул заманда, нисектер, аралашып, фекер бүлешеп йәшәй инек.

тәр араһында "Эш юҡта эшләнгән" тигән һымаҡ осраҡлылары юҡ.

**Үҙгәртеп ҡороу осорондағы киң билдәлелек әҙәбиәттә декларативлыҡты, яланғас риториканы алға сығарҙы. Ул ваҡытта гәзиттәрҙә донъя күргән шиғырҙарҙың күбеһе шундай характерҙа булды. Һеҙ ул замандың был шауҡымын нисек тойҙоғоҙ һәм ул һеҙҙең эштәрегеҙҙә нисек сағылыш тапты?**



**Ә. Мәзитов:** Беҙ ул ваҡытта үҙебеҙҙең эштәр менән башҡа республикалар, башҡа милләт рәссамдары эштәрен сағыштырып ҡарай торғайныҡ. Улар, тура киләме-юҡмы, барлыҡ "изм"дарҙы бер рәсемгә тыңҡыслап тултыра инеләр. Шул саҡта барыһы ла беҙҙең милли ерлек, рухыбыҙ ярылып ятҡан эштәргә һоҡлана торғайны.

**Й.Сөләймәнов:** Башҡорт рәссамдарының

киләсәген билдәләргә тейешһегеҙ", тип әйтер ине ул беҙгә.

**Й. Сөләймәнов:** Әхмәт ағайҙы соцреализмда күпме тәнҡитләнеләр, әммә уның был йүнәлеш менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы булманы. Ул үҙе йәшәгән замандағы халҡыбыҙҙың рухын күрһәтә алды.

**Тормоштоң һәр өлкәһе, ижтимағи ҡоролош формаһы булһынмы, кешелектең, айырым кешеләрҙең халәте, үҙ-ара мөнәсәбәт булһынмы, әҙәбиәт, мәҙәниәт, сәнғәт торошо булһынмы, һәр күренеш "изм"дарҙан тора. Әйтәйек, капитализм, социализм, коммунизм, индивидуализм, коллективизм, пофигизм, фашизм, абстракционизм, авангардизм, символизм, акмеизм, футуризм һ.б. Тағы ла шуныһы: "изм"дар һәр ваҡыт замандың һынылышлы осоронда барлыҡҡа килә. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында, мәҫәлән, башҡорт һынлы сәнғәтендә авангардизм, символизм, примитивизм, наивизм күренештәре өҫтөнлөк итте. Революциянан һуң футуризм менән Маяковскийҙың башы ҡатҡан, символизм менән Блок ауырыған, има-**

Шулай ҙа йәшерәк саҡтағы төрлө "изм"дарға бәйле табыштарымды хәҙерге эштәремдә лә файҙаланам. Оҫтаханам ҙур саҡта мин параллель рәүештә 5-6 картинаны яҙа инем. Хәҙер оҫтаханам бәләкәйерәк булғас, бер эшкә тотонһам, шуны аҙаҡҡаса еткерергә тырышам. Беҙҙең фекерләүебеҙ элеккегә ҡарағанда үҙгәрҙе, әммә темаларыбыҙ шул уҡ булып ҡалды. Әммә беҙ һуңғы ваҡытта уҡытыу эше менән булғас, күберәк һөйләргә тура килә. Ә рәссам һөйләргә тейеш түгел, һүҙен эшендә, һүрәтендә сағылдырырға тейеш.

**Ә. Мәзитов:** 90-сы йылдарҙағы эштәребеҙ менән хәҙергеләре ныҡ айырыла. Көн һайын әллә күпме яңылыҡ, мәғлүмәт ҡабул итәбеҙ, шуға күрә улар фекерләүебеҙгә тәьҫир итмәй ҡалмай. Бары тик ниндәй йылғаның һыуын эсеүебеҙ, ниндәй тауҙарҙың һауаһын һулауыбыҙ ғына үҙгәрешһеҙ ҡала. "Рәссам - үҙ халҡының йөрәге, ҡолағы һәм күҙе, үҙ иленең тойғоһо һәм тауышы" тип әйткән бер аҡыл эйәһе. Икенсе бер аҡыл эйәһе рәссамдарҙы урман араһында дауыл-елдәрҙе иң беренсе булып үҙенә ҡабул итеүсе иң бейек ағас менән сағыштырған.

Ә "изм"дарға килгәндә, һәр сәнғәттең нигеҙе, әлбиттә, реализмда, әммә беҙ барыбыҙ ҙа, барлыҡ "изм"дарыбыҙ менән бергә модернизм һандығы эсендә, буғай. Беҙ иһә, үҙебеҙҙең милли тамырҙарыбыҙға таянып, барлыҡ "изм"дарҙың синтезын яһайбыҙ. Беҙҙән һуң эштәребеҙҙе ниндәй "изм"дарға индерерҙәр, беҙ ул хаҡта уйламайбыҙ, был - "16-сы ғәмәл". Беҙҙең төп маҡсат - йәнебеҙҙең һәр миҡдарын файҙаланып, милләтебеҙҙе күтәреү. Беҙҙе ҡала йәштәре бик үк аңлап та етмәй әле ул. Бер эшемдә салғыны файҙалан-

*"Рәссам - үҙ халҡының йөрәге, ҡолағы һәм күҙе, үҙ иленең тойғоһо һәм тауышы" тип әйткән бер аҡыл эйәһе. Икенсе бер аҡыл эйәһе рәссамдарҙы урман араһында дауыл-елдәрҙе иң беренсе булып үҙенә ҡабул итеүсе иң бейек ағас менән сағыштырған. Ә "изм"дарға килгәндә, һәр сәнғәттең нигеҙе, әлбиттә, реализмда, әммә беҙ барыбыҙ ҙа, барлыҡ "изм"дарыбыҙ менән бергә модернизм һандығы эсендә, буғай. Беҙ иһә, үҙебеҙҙең милли тамырҙарыбыҙға таянып, барлыҡ "изм"дарҙың синтезын яһайбыҙ. Беҙҙән һуң, эштәребеҙҙе ниндәй "изм"дарға индерерҙәр, беҙ ул хаҡта уйламайбыҙ, был - "16-сы ғәмәл". Беҙҙең төп маҡсат - йәнебеҙҙең һәр миҡдарын файҙаланып, милләтебеҙҙе күтәреү. Беҙҙе ҡала йәштәре бик үк аңлап та етмәй әле ул. Бер эшемдә салғыны*
*файҙаланғайным, баҡтиһәң, ҡала йәштәре араһында салғының нимә икәнен дә белмәүселәр бар икән. Миңә, мәҫәлән, йыһан һыйыр рәүешендә күренә һәм бер эшемдә ике башҡорт бабайы ул һыйырҙы һауып ултыра, һөт урынына күнәккә йондоҙҙар төшә. Әхмәт ағай был эшемде ҡарап, оло тетрәнеү тойғоһо кисергәне хәтерҙә.*

ағай Лотфуллинды мин һәр бер интервьюла "Беҙҙең Микеланджело менән Рембрандт" тип атайым. Был юғары эпитеттар ғына түгел, ул, ысынлап та, шундай рәссамыбыҙ беҙҙең. Әхмәт ағайға үҙ өҫтөбөҙҙә ныҡышмалы эшләүебеҙ, туҡтауһыҙ белем туплауыбыҙ оҡшай ине. Беҙ Әхмәт

төп өҫтөнлөгө - милли тарихыбыҙҙың, мәҙәниәтебеҙҙең, сәнғәтебеҙҙең бай булыуында. 90-сы йылдарҙа беҙҙең барлыҡ эштәребеҙ тыуған яҡ, атайсал темаһына бағышланды. Тамырҙарыбыҙ ныҡлы һәм тәрәндә булғас, тема, идея табыу беҙҙең өсөн проблема булманы.

**✓ *Беҙҙең милләттә рәссамдар күп түгел, шуға күрә беҙ күкрәкте йыртып сублиматизмға китә алмайбыҙ. Сөнки беҙҙең идеялар һәм темалар шул тиклем күп, беҙ уларҙы асып, сағылдырып, халҡыбыҙҙың рухын күтәрергә бурыслыбыҙ.***

# ҺӘР МИҠДАРЫ... сарыф ителә

ғайным, баҡтиһәң, ҡала йәштәре араһында салғының нимә икәнен дә белмәүселәр бар икән. Миңә, мәҫәлән, йыһан һыйыр рәүешендә күренә һәм бер эшемдә ике башҡорт бабайы ул һыйырҙы һауып ултыра, һөт урынына күнәккә йондоҙҙар төшә. Әхмәт ағай был эшемде ҡарап, оло тетрәнеү тойғоһо кисергәне хәтерҙә.

**▶ Реализм иң ауырылыр тип тә уйланыла, сөнки унда "изм"дарға урын юҡ. Шулай түгелме?**

**Ә. Мәзитов:** Бер рәссам оҙаҡ йылдар буйына әтәстәр, тауыҡтар төшөргән. Уның янына бер кеше килгән дә: "Ниңә һин гел әтәстәрҙе, тауыҡтарҙы төшөрәһең, ниңә Аллаһы Тәғәләне, фәрештәләрҙе эшләмәйһең?" - тип һораған. "Ә һеҙ Аллаһы Тәғәләне, фәрештәләрҙе күргәнегеҙ бармы?" тип һораған унан рәссам. Кеше "Юҡ" тип баш һелккән. "Шулай булғас, үҙең уйла инде: әгәр ҙә мин әтәстең йә тауыҡтың бер генә ерен дөрөҫ итеп эшләмәһәм, хатта бәләкәй генә малай ҙа миңә үҙ дәғүәһен белдерәсәк, шуға ла был ҡошҡорттоң һүрәтен эшләүе иң ауыры", тигән уға рәссам. Тап шулай, реалистик юлда барыуы иң ауыры. Етмәһә, ысынбарлыҡты бермә-бер сағылдырған эштәргә фекер, идея һалыу тағы ла ауырыраҡ. Улай ғына ла түгел, бөтөнләй мөмкин булмаған эш. Тимәк, Әхмәт ағайға беҙгә ҡарағанда күпкә ауырыраҡ булған. Әммә ләкин беҙ бөтөнләй икенсе дәүерҙә йәшәйбеҙ һәм шуның менән бәхетлебеҙ ҙә. Беҙҙе шул дәүер рәссам итте.

**Й. Сөләймәнов:** "Рәссамдар улар һыйыр һымаҡ, бөтә нәмәне аңлайҙар, әйтә генә алмайҙар", тигәйне бер мәл Әхмәт ағай Лотфуллин. Беҙҙең эштәрҙе аңлатырлыҡ сәнғәт белгестәре етешмәй әлегә.

**▶ Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәрҙең сюжеты беҙҙең эпостарға бәйле төшөрөлгән. Был бәйлелек осраҡлы түгел һәм һүрәттәр 14 мең йыл элек төшөрөлгән икән, был халҡыбыҙҙың барлыҡҡа килеү ваҡытына ла ишара. Һынлы сәнғәттә сюжет мәсьәләһе нисек тора?**

**Й. Сөләймәнов:** Бик төплө һорау, сөнки был проблема рәссамдар араһында иң актуаль. Был йәһәттән рәссамдар ике төркөмгә бүленә. Тәүгеләре сюжеттың зарурлығын билдәләһә, икенселәре уның булыу-булмауына бөтөнләй иғтибар бирмәй. Беҙҙең башҡорт һынлы сәнғәтендә сюжет һәм идея беренсе урында тора. Әгәр ҙә ошо ике әйбер булмаһа, ижад та булмай.

**Ә. Мәзитов:** Беҙҙең милләттә рәссамдар күп түгел, шуға күрә беҙ күкрәкте йыртып сублиматизмға китә алмайбыҙ. Сөнки беҙҙең идеялар һәм темалар шул тиклем күп, беҙ уларҙы асып, сағылдырып, халҡыбыҙҙың рухын күтәрергә бурыслыбыҙ.

**Й. Сөләймәнов:** Килешәм, беҙҙең матурлыҡ тыуҙырыр өсөн генә интерьер, натюрморт төшөрөп ултырырға ваҡытыбыҙ юҡ. Яңыраҡ Фәрит Ерғәлиевтың күргәҙмәһе ҙур уңыш менән үтте. Уның эштәре, асылда, башҡорт орнаменттары нигеҙендә, әммә орнаменттар араһындағы киңлеккә әллә күпме идея һәм сюжет һыя. Һынлы сәнғәттә иң мөһиме киңлек проблемаһы. Киңлекте тойоу ижадҡа ла йоғонто яһай. Хәҙер беҙгә Өфөлә ижад итеүе бик ауыр. Оҫтаханаға барһаң, үҙеңдән-үҙең башҡа кәрәкмәгән эштәр менән шөғөлләнә башлайһың, сөнки идея, тема менән ҡалаға һыйып булмай. Мин хәҙер Өфөлә таң һарыһынан сәғәт иртәнге 9-ға тиклем генә эшләй алам.

**Ә. Мәзитов:** Беҙҙең башҡорт рәссамдарына идея, сюжет проблема түгел. Мин йәшерәк саҡта өләсәйемдең балаҫының бер өлөшөн генә алдым да, шуның бер яҡ ситенә ай һүрәте төшөрҙөм. Әйтергә кәрәк, Мәскәүҙәге күргәҙмәлә ул иғтибар үҙәгендә булды.

**▶ Башҡорт орнаменттарының мәғәнәүи әһәмиәте тураһында уйланғанығыҙ бармы, егеттәр? Бына мин, мәҫәлән, орнаменттың бер өлөшө булған бауырһаҡ менән ҡусҡарҙың мәғәнәләрен үҙемсә аңлата алам: элек уларҙы сабый ятҡан сәңгелдәктең ҡорғанына сигеп, тәрбиәүи маҡсатта файҙаланғандар. Үкенескә ҡаршы, беҙ был тәжрибәбеҙҙе юғалтҡанбыҙ. Әйтәйек, ҡыҙҙар һымаҡ егеттәр, егет һымаҡ ҡыҙҙар ҡайҙан барлыҡҡа килә? Сөнки бындай балалар тәрбиәләнгән йорттоң стенаһында бер ниндәй ҙә мәғәнә аңлатмаған сиғандарҙан арзан хаҡҡа һатып алынған келәм эленеп тора. Ә ул келәмдәргә төшөрөлгән һүрәттәр, билдәләр кешене, бигерәк тә балаларҙы психик яҡтан ауырыу яһай...**

**Й. Сөләймәнов:** Орнаменттар, һис шикһеҙ, беҙҙең өсөн оло сер булып ҡала килә. Тәүге осорҙа, әлбиттә, уларҙың магик әһәмиәте булған, һуңынан ғына матурлыҡ, биҙәк өсөн өсөн ҡулланыла башлаған.

**Ә. Мәзитов:** Шул уҡ ҡусҡар, мәҫәлән, күп кенә халыҡтарҙа, күп кенә мәҙәниәттәрҙә мәңгелекте аңлатҡан символ. Инк халҡында, мәҫәлән, ул ҡатын-ҡыҙ символы, тағы бер халыҡта йыһан символы. Үкенескә күрә, беҙҙә орнаменттар өҫтөндә эшләгән ғалимдар юҡ тиерлек. Фәрит ағай Ерғәлиев орнаменттар менән һүрәттәр төшөрә, әммә ул бындай эштәрен аңлап түгел, аҫҡы аңы кимәлендә эшләй.

**▶ Минеңсә, һәр бер рәссам үҙенең аҫҡы аңында ятҡан мәғлүмәтте һүрәт, образ итеп ҡағыҙға төшөрә бит. Шулай түгелме? Мин, мәҫәлән, матур итеп төшөрөлгән алманың фәлсәфәһен күрмәйем...**

**Й. Сөләймәнов:** Беҙ үҙебеҙҙең аҫҡы анда ятҡанды йөрәк, күңел аша үткәреп, ҡағыҙға төшөрәбеҙ. Ниндәйҙер һүрәт эшләү хаҡындағы ниәт тәүҙә уй-фекер булараҡ башта ярала.

**▶ Япондар хәҙерге ваҡытта кешенең аҫҡы аңында ятҡан мәғлүмәтте аңлайышһыҙ сатай-ботай һыҙыҡтар, билдәләр рәүешендә мониторҙа сағылдырыуға өлгәште. Үҙҙәре әйтеүенсә, тағы ла 15 йылдан улар мониторҙағы аңлайышһыҙ билдәләрҙе, һыҙыҡтарҙы уҡырға аҫҡыс табасаҡ. Тимәк, яҡшығамы-насарғамы, быға тиклем Хоҙайға ғына билдәле булған сер һандыҡтары асыласаҡ. Закон һағында тороусыларға тәртип боҙоусының ғәйебен иҫбатлап тороу ҙа кәрәк булмаясаҡ. Әйткәндәй, милли асылынан ситтә аҙашып йөрөүселәр ҙә үҙ милләтен таныясаҡ.**

**Ә нимә һуң ул аҫҡы аң? Ул кешенең меңәрләгән-меңәрләгән йылдарға һуҙылған генетик коды, йән хәтере. Мин һеҙҙең аңлайышһыҙ һыҙыҡтарҙы, тамғаларҙы һынландырған, тәү ҡарашҡа аңлайышһыҙ булып тойолған эштәрегеҙҙе ҡарайым да, һеҙ ҙә аҫҡы аңығыҙҙа ятҡан халҡыбыҙҙың генетик кодын һүрәт итеп эшләйһегеҙҙер тип уйлайым. Фәрит ағай Ерғәлиев та тап шулай эшләй.**

**Ә. Мәзитов:** Дөрөҫ. Мин ҡайһы бер эштәремде башҡарғанда нимә яҙғанымды үҙем дә аңлап бөтмәйем. Аңлата ла алмайым. "Артыҡ күп белеү һағышты тәрәнәйтә" тип әйтелә Тәүратта.

**Й. Сөләймәнов:** Академик Вернадский ноосфера менән биосфера мөнәсәбәтен тикшереп, ижадсының нимәгә һәләтле булыуын билдәләгән. Әхмәр ағай, һин беҙҙең эштәрҙе аҫҡы аң менән сағыштырып, бик ҡыҙыҡлы дәлил килтерҙең. Әммә шуныһы: беҙҙең эштәрҙе күптәр ошо рәүешле итеп аңлай һәм аңлата алмай шул. Бына бәлә нимәлә.

**Ә. Мәзитов:** Ә мин шуға ышанам: беҙҙең эштәрҙе киләсәктә, беҙҙән һуңмы - барыбер аңлаясаҡтар. Әхмәт ағай беҙгә: "Егеттәр, һеҙ йәш кенә булһағыҙ ҙа, үҙегеҙҙең миссияғыҙҙы үтәнегеҙ, бынан һуң бер һүрәт эшләмәһәгеҙ ҙә",- тип тә әйткәйне.

**▶ Әле премияға тәҡдим ителгән циклға ингән эштәрегеҙ хаҡында нимә әйтерһегеҙ?**

**Й. Сөләймәнов:** Был цикл өҫтөндә беҙ бик оҙаҡ эшләйбеҙ. 90-сы йылдарҙың аҙағында был цикл тураһында һөйләшеп йөрөгәйнек. Әмирҙең эштәрендә үҙәк урында гел ике малай йөрөгән һымаҡ, бындай ижади берҙәмлек беҙҙең тандем булды. Циклдың исеме - "Атайсал", унда икебеҙҙең яҡынса егермеләп эшебеҙ инә. Улар барыһы ла гармониялы рәүештә бер мәғәнәгә ҡоролған.





**Ә. Мәзитов:** Һәр бер күргәҙмәбеҙҙә был эштәр үҙәк урынды биләй. Циклға ингән эштәр Мәскәүҙә, Түбәнге Новгородта, Санкт-Петербургта һәм башҡа урындарҙа үткән төрлө күргәҙмәләргә ҡуйылып, ваҡыт һынауын үтте. Был эштәрҙе башҡарыр өсөн нисә тонна буяу киткәнен үҙебеҙ генә беләбеҙ.

**Й. Сөләймәнов:** Ижад бик ҡыҙыҡ нәмә. Ни өсөн тигәндә, бер һүрәт эшләйһең дә, уның тулы һөҙөмтәһен белеп булмай. Ҡайҙан беләһең, бәлки, ул эшеңә йөҙ йылдан һуң ғына хаҡ-баһа бирелер. Яҙыусыларға, артистарға еңелерәк: роман баҫылып сыға, шул йылда уҡ баһа бирелә. Артист сәхнәлә йырлап сыға, бейеүсе бейеүен башҡара, шундуҡ сәпәкәй итәләр. Үкенескә күрәме, бәхеткә ҡаршымы, беҙҙең эштәргә сәпәкәй сапмайҙар шул.

*Рәссамдарҙың ул заманда оҫтаханалары ла, йәшәгән урындары ла бер бүлмәлә булды. Ул бүлмәләргә үҙебеҙ һымаҡ йәш шағирҙар һәм яҙыусылар килеп йөрөнө. Төндәр буйына һөйләшеп-бәхәсләшеп, һүҙҙәр бөтмәй торғайны. Бер нәмәбеҙ ҙә булмаһа ла, ул саҡта рухыбыҙ күтәренке булды, шул рух беҙгә ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға ярҙам итте. Хәҙер килеп ул саҡта эшләгән һүрәттәребеҙҙе ҡараһаҡ, бер ҡатлы булыуыбыҙ ҙа һиҙелә. Әммә нисек кенә булмаһын, беҙ ул осорҙағы ижадыбыҙҙан баш тарта алмайбыҙ, сөнки тап шул саҡта беҙҙең хәҙерге кимәлебеҙҙең нигеҙе һалынған. Беҙ, йәш рәссамдар, ул саҡта бер хәлгә аптырай инек: ниндәй генә һүрәт эшләһәк тә, башҡорт темаһы килә лә сыға. Әгәр ҙә шул темаға бәйле рухи күтәренкелегебеҙ булмаһа, рәссам да булып китә алмаҫ инек. Күп кенә шағирҙар шиғыр яҙа алмаған кеүек. Беҙҙе ул заманда ижад кешеләре менән тығыҙ аралашыу ҙа ҡотҡарҙы. Шағирҙар, артистар, композиторҙар ул заманда, нисектер, аралашып, фекер бүлешеп йәшәй инек.*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәссамдың һүрәтенә тамаша ҡылып, сәпәкәй сапмаһалар ҙа, Йәлил менән Әмирҙең һүрәттәрен ҡарап, "Афарин!", "Мәрҙәс!", "Эх, үҙебеҙҙең егеттәр, ни һынлы һынлы сәнғәт тыуҙырғандар!" тип әйтке килә. Беҙ уларҙың эштәре, һис шикһеҙ, халҡыбыҙ ҡаһарманы Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡлы тип ышанабыҙ!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ - Көрәк тә булғас... Унан килеп, һин яңғыҙ түгел, хәҙер беҙ икәү. Һиңә ул нигеҙҙе күптән соҡорға кәрәк ине. Мине көтөп ултырҙыңмы? - Рәүфә йәнә көлдө. - Тупрағын ситкә алып булһа ла торормон.***



Әмир ӘМИНЕВ

# ЙОНДОҘ СӘСКӘ

## Повесть

–Йә, Рәүеф ағай, булмаһа, өй йыйыштырып алайыҡ. Һинең, күпме йәшәп, бер нәмә лә эшләмәгәнең күренеп тора. Иҙән бысраҡ, бөтә ерҙә саң.

Рәүефкә уңайһыҙ булып китте. Әлбиттә, бер-ике тапҡыр һеперепсығарҙы иҙәнде, әммә йыуманы, һыуҙы сарыф иткеһе килмәне, санды ла һөрткөләне, йыйыштырған да булғайны. Былай ул тиклем дә эт ояһы keүек түгел дә, ярай инде, теләгәс, әйҙә...

- Иң беренсе нимә кәрәк? - Рәүфә тирә-яғын байҡаны. - Һыу, тас, сепрәк. Бармы? Һыу ҡайҙа?

- Бидонда.

- Бидонда. Аңлашылды. Әйҙәгеҙ, Рәүеф ағай, һеҙ карауат, өҫтәл, ултырғыстарҙы күсереп тороғоҙ, мин йәһәт кенә иҙәнде йыуып сығарайым. Шунан урындарына кире ултырта барырһығыҙ. Шулай тиҙерәк булыр.

- Һин ифрат егәрле икәнһең дә! Әллә шулай ҡыланаһың ғынамы? Әйтерһең, төрмәгә килмәгәнһең, ә өйөңдә ҡунаҡ ҡаршыларға әҙерләнәһең. Бында әллә бер көн, әллә ике көн тоталар. Һин килгәс, эштәре тиҙерәк тә китер, тип уйлайым - ҡатын-ҡыҙҙы оҙаҡлатмаҫтар бит инде.

- Ҡылансыҡҡа оҡшағанмынмы әллә? - Шыңғырҙатып көлдө ҡатын. - Ҡасып китһәң дә сәсеп кит, ти. Саң-туҙан эсендә ултырайыҡмы ни? Давай, давай!

Бәхәсләшеп тороуҙан мәғәнә юҡ ине. Рәүеф ҡалҡынды ла, ҡатын әйткәнсә, өҫтәл-ултырғыстарҙы, карауатты, диванды иҙән уртаһына күсерҙе. Рәүфә бер ыңғайҙан тәҙрә төптәрен, өҫтәл-ултырғыстарҙы, шкафты һөрттө, унан электр сәйнүгендә һыу ҡайнатты ла кухнялағы ҡашығаяҡты йыуыуға тотоноп китте.

Бер килке Рәүеф, онотолоп китеп, үҙен өйөндә һымаҡ һиҙә башлай, аңына килгәс, Рәүфәне Сәғиҙәһе менән сағыштыра. Ләкин был оҙаҡҡа бармай, ҡатынын һағыныу һағышы йөрәген бороп ала, йөрөй торғас, теге хыянатсыл шиге йәнә килеп йәбешә: инеү менән тигәндәй дәртләнеп эшкә тотонғас, - уның эс-бауырына инеп ышанысын яуларға кәрәк тәһә - был сибәркәй, ысынлап та, уның янына махсус индерелгән шымсылыр. Бында килеп эләккән кеше башын юғалтып ҡайғырыр ине, ә был, өй йыуырға өмәгә килгән күрше кеүек, һеперелеп эшләп алды ла китте.

- Бына, исмаһам, кеше йәшәгән өйгә оҡшап ҡалды. Бысраҡты, саң-туҙанды яратмайым. Өйҙә тәртип, таҙалыҡ булырға тейеш. Саҡ ҡына ял итәйек тә ашау яғын хәстәрләрбеҙ. Һеҙ нисектер, Рәүеф ағай, мин асыҡтым - кисә кистән бирле бер нәмә ҡапмағанмын.

- Минең дә йүнләп ашағаным юҡ инде. Тамаҡ ҡайғыһымы?! Ҡоро-һары менән мөрхәтһенәм шунда.

Рәүфә дөгө бутҡаһы ҡуйҙы, сәй ҡайнатты. Һөтһөҙ генә сәйләп, ҡапҡылап алдылар.

Оҙон-оҙаҡҡа һуҙылып кис етте. Ҡояш теләр-теләмәҫ кенә алыҫтағы ҡара урман аҫтына сумды. Гөжләп ике "ЗИЛ" уҙҙы, әммә туҡтаманылар - уларҙың икәүһен генә ҡалдырырға булдылар, ахыры; ҡайҙалыр олоп-олоп эт өрҙө, кеше тауышы ишетелеп ҡалды, мылтыҡ гөрһөлдәне, күктә бер-бер артлы йондоҙҙар атылды. Берауыҡ һүҙ-хәбәр тынып ҡалған арала Рәүеф тәҙрә аша тышҡа текләп торҙо, "ҡара ҡарға"ның, һәр көндәгесә, дөрөҫөрәге, кистәгесә, өйҙө уратып ҡабаланмай ғына йөрөүен күҙәтте. Ул һәр ваҡыттағыса уҡлауҙай төҙ, теүәл, бер артыҡ хәрәкәт яһамаҫ һәм, әлбиттә, гел уяу. Рәүеф йәнә өйөнә шылтыратып ҡараны, йәнә теге ҡалын тауыш "Мин иҫкәрттем бит, башҡа шылтыратма, юҡһа, телефоныңды тартып алырға мәжбүр буласаҡмын" тип бәйләнеште өҙҙө.

Ошо мәлдә Сәғиҙәһе нишләй икән? Көтөүҙән мал-тыуарҙы ҡаршылайҙыр йәки һыйырын һауып ултыралыр, һауыр ҙа башмаҡты эҙләп сығыр. Табып алып ҡайтҡас, балалары менән киске аш ашар, шунан уларҙы йоҡларға әҙерләр. Улары, атай ниңә һаман ҡайтмай, тип ныҡышыр. Бигерәк тә малайы күңелһеҙләнәләр. Сәғиҙәһе тынысландырған, ҡайта, оҙаҡламай ҡайта, күстәнәс йә берәй бүләк алып ҡайта, тип алдаған булалыр. Ай, эт талағырҙары, ҡайҙан ғына килеп ҡапты ҡулдарына? Алданыраҡ һиҙгән булһа, сит ауылдағы берәй туған-тыумасаһына йә дуҫ-ишенә барып ятыр ине. Йығылырымды белһәм, һалам түшәп ҡуйыр инем, тигән һымаҡ, ҡайҙан ғына беләһең инде "ҡара ҡарға"ларҙың төнөн килеп баҫырын? Хәйер, ул төн тапмаһалар, иртәгәһенә, иртәнән һуңына барыбер эләктерерҙәр ине - гел генә йәшенеп йәки ҡасып йөрөп булмай. Кеше энә түгел, ҡара исемлектәренә теркәлгәнһең икән, ер аҫтына инһәң дә соҡоп сығарасаҡтар.

Утты тоҡандырҙылар. Рәүеф шкафтан түшәк, одеал, мендәр сығарҙы. Ҡарай-һайлай торғас, тотонолған, ярайһы уҡ керләнгән түшәк кәрәк-ябраҡтары араһынан сағыштырмаса таҙаларын табып, ҡатын быға тиклем Рәүеф йоҡлап йөрөгән сеткалы тимер карауатҡа - үҙенә, Рәүефкә диванға урын йәйҙе, керләнгәндәрен, йыуырға тип, ситкә өйөп ҡуйҙы.

- Рәүеф ағай, телевизор бар, радио көләпәһе, ҡарайһыңмы, тыңлайһыңмы һуң?

- Маташтырып ҡараным, икеһе лә эшләмәй.

- Тимәк, насар маташтырғанһың, - тине ҡатын, - бына иртәгә ныҡлабыраҡ маташтыр, бында ятыу оҙаҡҡа китһә, телевизор ҡарамай, радио тыңламай ултырайыҡмы ни? Донъянан артта ҡалып, тамам ҡырағайға әйләнәбеҙ ҙә баһа.

Рәүеф, ысынлап та, иртәгә ныҡлап ҡарарға кәрәк, тигән уйға килде. Был бисәне ниңә элегерәк килтермәнеләр икән, тигән уй ҙа төштө башына, ҡара, килеп керҙе лә донъя көтөп алды ла киттесе. Ай, үткер үҙе, үткер. Шунан күңелен йәнә баяғы шикле уй ҡаға: ысынлап шпион булһа? Унан һурған бар мәғлүмәтте, ни ҡыланғанын, һөйләшкән бар хәбәрҙе "ҡара ҡарға"ларға ошаҡлап-еткереп торасаҡ. Ошаҡлай-ошаҡлай ҙа, ҡотола алмаҫлыҡ итеп Рәүефте муйынынан батырып, үҙе сығып китә...

Көнө буйы машинала һелкенеп килеп, етмәһә иҙән, ҡашығаяҡ йыуып, өйҙө йыйыштырып, саң һөртөп тамам арыған Рәүфә, ятайым әле, Рәүеф ағай, тине, кис ныҡлап төшөп тә өлгөрмәгән бер мәлдә. Бәй, ят, тип яуапланы Рәүеф, ҡатынды йәлләп. Теге аяғын, өҫтөн сисеп, төнгө кейемен кейҙе лә юрған аҫтына сумды. Һәммәһе лә ябай, ҡәҙимге килеп сыҡты, әйтерһең, үҙ өйөндә. Ә Рәүеф оҙаҡ йоҡлай алмай этләнде, уйланып тик ятты. Бер нисә мәртәбә тороп, ҡыҙыл сәскәгә ҡарап торҙо - ул баҙлауыҡ кеүек яна ине. Арып серемгә киткәндә таң һыҙыла башлағайны.

* * *

Бер көндө улар араһында ошондай етди һөйләшеү булды. Ул турала хәбәр көн дә, хатта көндәр буйы бара, әммә нисектер өҙөк-йыртыҡ, өҙөлөп-ялғанып тигәндәй. Ә был юлы...

- Рәүеф ағай, былайтып күпме ятырбыҙ икән?

- Беҙҙең ғәйепте, йәнәһе, иҫбат итеп бөтөнләйгә япҡансы, иҫбат итә алмаһалар, сығарғансы инде.

- Улайһа, ниңә килмәйҙәр йә саҡырмайҙар һуң? Минең килеүгә лә әллә нисә көн үтте.

- Кем белә инде? Закон үҙҙәренең ҡулында, нимә теләйҙәр, шуны эшләйҙәр. Мин һаҡсыға әллә күпме әйтеп ҡараным, талаптарымды яҙып та бирҙем. Яуап һаман юҡ.

- Бәй, нимәлер ҡылырға кәрәк тә инде. Нисек өнһөҙ-тауышһыҙ ултырабыҙ?

- Кәрәк тә бит, тик нимә? Ишек ике йоҙаҡҡа бикле, тәҙрәләрҙә - рәшәткә, стеналарҙы емерерлек, түбәне алырлыҡ түгел. Етмәһә, ҡулда бер ҡорал юҡ.

- Ә баҙ?

Рәүеф телһеҙ ҡалды. Был турала уйламағайны түгел, ҡат-ҡат уйлағайны, тик ғәмәлгә ашыра алмаҫлыҡ әмәл тип ҡарағайны. Телһеҙ ҡалыуы шунан - фекерҙәренең тап килеүе. Ҡара һин уны, барыбер ҙә уйлап йөрөгән!

- Һабы һыныҡ көрәк менән бер үҙем нисек ҡаҙа алырмын икән?

- Көрәк тә бармы ни?

- Әйтәм бит, һыныҡ көрәк. Баҙҙа ята.

- Төшөп ҡараныңмы?

- Ҡараным.

- Көрәк тә булғас... Унан килеп, һин яңғыҙ түгел, хәҙер беҙ икәү. Һиңә ул нигеҙҙе күптән соҡорға кәрәк ине. Мине көтөп ултырҙыңмы? - Рәүфә йәнә көлдө. - Тупрағын ситкә алып булһа ла торормон.

- Башларбыҙ ҙа, тотоп та сығарырҙар.

- Сығарһалар, сығырбыҙ. Рәүеф ағай, һеҙ хәс тә теге әкиәттәге һымаҡ һөйләйһегеҙ. Ҡартайған ата-әсәһе, балаларына, сәсеү етте, әйҙәгеҙ, ашлыҡ сәсәйек, тигәс, оло ҡыҙы көҙгә кейәүгә сығасағы, малайы армияға алынасағы, кесе ҡыҙы уҡырға китәсәге тураһында белдергән. Йәнәһе, уларға кәрәкмәй, көҙгә береһе лә өйҙә ҡалмай. Әммә оло ҡыҙ кейәүгә сыға алмаған, малайҙы армияға саҡырмағандар, кесе ҡыҙ уҡырға инмәгән, һөҙөмтәлә өсөһө лә өйҙә ҡалған, ти... Шул әкиәтте уҡығанығыҙ бармы?

Нишләп белмәһен, белә ул әкиәтте Рәүеф. Һүҙ ҙә юҡ, был юлы Рәүфә хаҡлы: ҡул ҡаушырып, ишекте асыуҙарын көтөп ултырыуҙан фәтүә юҡ, нимәлер ҡылырға кәрәк.

- Үҙең әйтмешләй, "ҡара ҡарға"лар кергәндә ишек асыла бит, бәҙрәфкә лә, һауа һуларға ла сығаралар - ҡаса алыр инең инде...

- Юҡ.

- Нишләп?

- Һаҡсылар беҙҙең һымаҡ түгел, икенсе тоҡом кешеләре. Үҙең иғтибарлап ҡара: оҙондар, көслөләр, йөҙҙәрендә тамсы нур юҡ. Эргәләге һаҡсынан берәй төрлө күҙ яҙҙырған хәлдә лә, улар күҙәтеү вышкаһынан күрәсәк тә арттан төшәсәк. Ә мин уларҙың нисек шәп йүгергәнен беләм. Вышканан башҡа ла беҙ белмәгән берәй төрлө дозорҙары барҙыр әле. Кеҫә телефонын тыңлағас, үҙең аңла инде. Килтергәндә бер егет ҡасты - тоттолар, ошонда керер алдынан мин дә ҡасып ҡараным - килеп сыҡманы.

Рәүеф ике ваҡиғаны ла ентекләп һөйләп бирҙе.

- Нисек ҡыйыулығың етте улай, Рәүеф ағай? - тип ғәжәпләнде, хатта һоҡланғандай итте уның ҡылығына Рәүфә.

- Бикләнге килмәгәндән инде. Ысҡына алырмын, тип уйлағайным да, булманы. Бәлки, яҡшығалыр ҙа: ҡасырһың, өйөңә ҡайтып етә алмай ҡара урманда аҙашып үлерһең. Бәлки, һине осратыуға булғандыр...

* * *

"Рубин" - илдең тәүге төҫлө телевизоры. Артҡы ҡапҡасын асып тотҡолап, һелкеткеләп, тикшереп ҡарағайны, бер сымы ысҡынған булып сыҡты. Тоташтырһа - эшләй, әммә төҫһөҙ һәм һикертеп-һикертеп күрһәтә. Борғослауҙан фәтүә булманы. Рәүфә, ярай, артабан булаштырма, юҡһа, сәпсим боҙоп ҡуйырһың, тигәс, туҡтаны - кистәрен шуға булһа ла текәлеп ултырырҙар. Ике тәҙрә араһында элеүле торған радионы алғайны, өнһөҙ - динамигын аҡтарып алғандар. Берәй ергә ырғытып ҡуймағандармы тип, эҙләргә тотондо. Йөрөй торғас, шкаф артына тығылған ҙур бер плакатҡа юлыҡты. Унда рәссам йыһанды гиҙгән кешене төшөрөп ҡуйған. Йәнәһе, совет кешеһе күккә оса, йыһанды үҙләштерә. Бәхетле йылмайған һындың тирә-яғында йондоҙҙар, ҡояш, зәңгәрһыу-аҡ болоттар йөҙә, ракеталар оса. Әйтергә лә түгел - ирек, хөрриәт. Плакатҡа "Вперед - к коммунизму!" тип яҙып ҡуйылған. Был йортта кешеләр ирекле йәшәгәндә, ошо плакаттың стенала эленеп тороуы тәбиғи ҙә булғандыр, өйҙө зинданға әйләндергәс, көлкөнө килтерә, хатта күңелдә нәфрәт ҡуҙғата. Шуға ла берәйһе алып, шкаф артына тығып ҡуйғандыр ҙа.

Бында төртөлөп, тегендә төртөлөп, нимә эҙләгәнен үҙе лә белмәй бер килке йөрөгәс, тәҙрә янына барып баҫты. Тәҙрә - уларҙы тере донъя менән тоташтырыусы, тышҡа ҡарап үҙҙәренең әлегә иҫән икәнен дәлилләүсе берҙән-бер ҡаралты. Шул ваҡыт тәҙрә быялаһына ҡайҙандыр ҙур ҡара себен - быға тиклем күренмәгәйнесе - килеп бәрелде, шаҡ итеп ҡалды, әйтерһең, таш бәрҙеләр. Бәрелде лә, шаңҡыптыр, тупһаға әйләнеп төшөп ятты. Бер аҙ хәл йыйғас, ҡыймылдап, яңынан өҫкә атылды ла тәртипһеҙ рәүештә осорға тотондо. Юҡ инде, килеп ҡаптың минең ише, ярыҡ-фәлән юҡ тәҙрәлә ирекҡә сығырға, һуңғы көндәреңә тиклем шулай эҙләнергә тура киләсәк. Хәйер, һиңә бында еңелерәктер ҙә, сөнки тышта көҙ, оҙаҡламай һыуыҡтар бәрәсәк, ҡар яуасаҡ.

Себен бер тәҙрәнән икенсеһенә осто, әйтерһең дә, унда ҡотолоу тишеге әҙерләп ҡуйғандар. Әммә алданды мәхлүк: унда ла һис ниндәй ярыҡ юҡ. Тәҙрә рамдары яңаҡҡа лыпын индереп ҡуйылған, быяла ла рамға һауа ла кермәҫлек итеп йымлап ултыртылған. Элек, үҙ өйөндә, оялмай-нитмәй аш өҫтәленә, ризыҡ-тәғәмгә ҡунып йонсотҡан себен, әле килеп, Рәүефкә нисектер йәл тойолдо. Үҙе тотҡонлоҡта ултырғанға шулайҙыр - ул да системаның хоҡуҡтары ныҡ сикләнгән меҫкен себене бит...

* * *

...Бер төндө шөкәтһеҙ дөбөрләтеүгә уянды Рәүеф. Өйҙәрен, әйтерһең, ҡайҙалыр һөйрәтә башланылар. Ҡурҡып ҡына күҙен асты ла, башын ҡалҡытып, сәйер тауышҡа ҡолаҡ һалды. Дөйөм гөү араһында кеше һөйләшкәне, ат бышҡырғаны, бер-береһенә бәрелгән тимер сыңлауы, "ҡара ҡарға"ларҙыҡы ише ҡырҡа бойороҡтар ишетелгәндәй. Был һис малай-шалай йөрөүе түгел, шау-гөү алыҫтан, урман эсенән килә һәм яҡынайған һайын көсәйә бара. "Нимә был?" тип баш ватты Рәүеф, тауыштың ай-

*✓ Егерме йыл әүәл әйткән һүҙҙе*
*Тура бәреп әйтә алмайбыҙ.*
*Тормошто беҙ йәнә бай-бетсәгә,*
*Түрәләргә генә яйлайбыҙ.*
*Үҙ бәхетебеҙ үҙебеҙ ялмайбыҙ.*
*Ҡаршы бер ни әйтә алмайбыҙ.*



ышына һис төшөнә алмай, шунан түҙмәне, тороп, урам яғы тәҙрәһенә барҙы. Йорттарынан ике йөҙ - өс йөҙ метрҙағы урман ауыҙынан колонна-колонна булып теҙелешеп-эйәртенешеп халыҡ ташҡыны үтеп бара! Ҡараңғы булғас, уларҙың кем икәнен һис танырлыҡ түгел, шулай ҙа ай яҡтыһында йәйәүле ғәскәр атлағанын самаларға була. Штыктар ялтлап китә, аксельбанттар, погондар шәйләнә, бейек фуражкалар күренә. Был ни ғәләмәт, тип иҫе китте Рәүефтең, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай. Форма-амуницияларына ҡарағанда, 1812 йылғы ғәскәр бит! Кино төшөрәләрме, әллә берәй төрлө учение барамы? Әллә күпме пехота үткәс, ауыр пушкалар тартҡан мисәүле аттар, улар артынанябыҡ повозкалар, ҙур-ҙур төйөнсөктәр, тоҡтар, һандыҡ һымаҡ нәмәләр тейәлгән арбалар үтте. Юҡ, кино төшөрөү түгел был, учениеға ла оҡшамаған, ысын һуғыш бара - дошман шәйләмәһен өсөн төнөн хәрәкәт итеүҙәре йәки позиция алыштырыуҙары. Регуляр ғәскәр артынан, саҡ ҡына ҡалыбыраҡ, арҡаларына уҡ-һаҙаҡ аҫҡан, һөңгө тотҡан, баштарына ҡолаҡсын бүректәр кейгән кешеләр төркөмө ағыла башланы. Эйе, былар - беҙҙекеләр. Ҡана, тәҙрәне ҡағайым, һөрәнләйем, бәлки, ишетерҙәр ҙә килерҙәр, ишекте асырҙар, мин дә улар менән китер инем, тип өмөтләнде, әммә барыбер ишетмәйәсәктәрен, ишеткән хәлдә лә ғәскәр сафынан айырылып сыға алмаясаҡтарын самалап (унан Рәүфә лә йоҡлай), был ярһыу ниәтен көскә ауыҙлыҡланы... Әллә күҙенә күренәме милләттәштәре, әллә Ер шары кирегә әйләнеп, ваҡыт бөгөнгөнән үткәнгә боролдомо?

Оҙаҡламай ғәскәр урман эсенә инеп бөттө, әйтерһең дә, ғибрәт дәү йылан ер ярығына төшөп юғалды. Рәүеф, кино кадрҙары һымаҡ күҙ алдынан үткән күренештән һис тыныслана алмай, оҙаҡ баҫып торҙо ҡараңғылыҡҡа текәлеп. Яҡтыра башланы, күҙенә йоҡо эленмәһә лә, урынына барып ятырға мәжбүр булды.

- Төнөн урман ауыҙынан ҙур ғәскәр үтеп китте. - Иртәнге сәй эскәндәрендә Рәүеф шулай тине, тулҡынланып. Әйтергәме-юҡмы, тип байтаҡ икеләнде әле өндәшер алдынан. Шуға ла хәбәрен сәйгә тиклем һуҙҙы.

- Ғәскәр, ти? Ниндәй ғәскәр? - Рәүфә аптырап уға текәлде. - Кешеләрме ни?

- Ғәскәр булғас, кешеләр инде. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыусылар. Башҡорттар ҙа бар ине.

- Рәүеф ағай, һин нимә? - Ҡатын сәй эсеүенән туҡтаны ла сынаяғын өҫтәлгә ултыртты. - 1812 йылғы ғәскәр икәнен ҡайҙан белдең?

- Кейемдәренән, ҡоралдарынан.

- Ул саҡтағы ғәскәр әле нисек йөрөһөн, ти, ул? 200 йыл ваҡыт үткән. Төшөңә кергәндер.

- Мин төш менән өндө айырмайыммы ни? Аҡылым теүәл әле. - Рәүеф үпкәләгәндәй итте.

- Һин нимәнелер бутайһың, Рәүеф ағай, барыбер. Ултыра торғас, аҡылыңа зыян килмәнеме? Алла һаҡлаһын.

**(Дауамы бар).**

ЗАУЫҠ

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘМӘНЕМ...

**Ошо көндәрҙә алтын алтмышын билдәләүсе шағир Рәмил Йәнбәккә өс һорау менән мөрәжәғәт иттек:**



**➔ Бар нәмә аҡсаға ҡоролған прагматик заманда шағир, өҫтәүенә, мөхәббәт шағиры булыуы ауыр түгелме?**

-Шағирға, әлбиттә, ысын шағирға бөтә заманда ла, һәр дәүерҙә лә еңел булмаған. Мин яңылыҡ әйтмәйем: еңел йәшәр өсөн һарай шағиры булырға, хакимдың тәрилкәһен яларға кәрәк. Борон замандарҙа ла, совет осоронда ла ундайҙар булған, булды. Мәҫәлән, партия тарафынан тәғәйенләп ҡуйылған "милли шағирҙар". Уларҙы һәр милләттән берәрҙе генә билдәләнеләр һәм шулар аша милли әҙәбиәттәргә, милли мәҙәниәттәргә идара иттеләр, йүнәлеш бирҙеләр.

Минең холоҡ-ҡылығыма ундай сифат бирелмәгән. Бөгөн түгел, иртәрәк йәки һуңыраҡ йәшәһәм дә, ошо көйө, үҙем булып ҡалыр инем. Былай мин конфликтһыҙ кеше, дуҫ-иштәрем, яҡындарым менән уртаҡ тел табып йәшәйем. Мин үҙ башланғысым менән дошманлашҡаным юҡ, мине кемдәрҙер үҙҙәре килеп табып, дошман яһай. Аҡсаға табынып йәшәмәнем һәм йәшәмәйем. Бөгөнгө заманда аҡса ла кәрәк, әлбиттә. Әммә мин инде - элекке тәрбиә кешеһе: үҙгәрә алмам, аҡсалы кәсепкә тотонорға фиғелем килешмәй.

Мөхәббәт шағиры булараҡ, мөхәббәттең юҡҡа сыға барғаны өсөн әрнейем, рәнйейем. Ошо хаҡта шиғырҙарым да бар. Тик үҙ заманыңдан, үҙгәреш-буталыштарҙан ҡотолоу мөмкин түгел.

**➔ Йәш көйө һаҡлана алыуыңдың сере нимәлә?**

-Йәш көйө, тип инде... Иң тәүҙә атай-әсәйемә рәхмәтлемен: шундай булмышлы, конституциялы итеп тыуҙырғандар. Ысынлап та, беҙҙең нәсәптә сәстәр бик һуң ағара. Ҡаҡса ҡиәфәтле кешеләрҙә йыйырсыҡтар ҙа бик һиҙелмәй. Былары - тышҡы яҡтан.

Эске яҡтан ҡараһаҡ, донъя менән, тирә-йүне менән ныҡ риза булмаған, гел көйөп-янып, кешеләрҙе дошман күреп, үҙен эстән ашап йәшәгәндәр иртә ҡартая, минеңсә. Үҙемә килгәндә, дуҫ-иштәремде, яҡындарымды, ғөмүмән, кешеләрҙе аңларға тырышам, улар урынына үҙемде ҡуйып ҡарайым, һәр кемде ғәфү итеп, кисереп, хөрмәт итеп йәшәйем.

Өҫөнсөнән, еңгән ҡартайырға ирек бирмәй. Йәғни, эстә кенә һаҡламайбыҙ. Әйтәһен әйтеп бөтәбеҙ ҙә, биш минуттан - "татыу ғаилә". Кешеләргә үс һаҡламау - бик шәп сифат, тип уйлайым.

**➔ Мөмкин булһа, 60 йыллыҡ тормош юлығыҙҙың ҡайһы мәлен кире ҡайтарырға теләр инегеҙ? Ни өсөн?**

- 60 йыл йәшәлгән ғүмерҙең 15 йылы - тыуған ауылым Дауыт-Ҡайыпта, ә 45 йылы ятраҡкан ҡалам Өфөлә үткән. Мин, шундай мөмкинлек сыҡһа, бала сағымды әҙгә генә булһа ла ҡайтарыр инем. Атайһыҙ үҫһәм дә, тамаҡ ризыҡҡа туйып бөтмәһә лә, бала саҡ - иң-иң ҡәҙерлеһе, иң-иң сафы, иң-иң һағындырғаны. Ауылымда үткән йылдар - иң матур осором.

Икенсе мәлде - баштар китеп ғашиҡ сағымды ҡайтарыр инем, сөнки хәҙер "үлеп ғашиҡ була" алмайым. Өсөнсө мәл - балаларым бәләкәй булып йүгерешеп йөрөгән саҡты. Ғаиләбеҙ теп-теүәл һәм бәхетле саҡты.

*Рәмил ЙӘНБӘК*

### Кире ҡайтыу

Беҙ ирекле, тиеп алдашабыҙ,
Ялғанлайбыҙ, тормош яҡшы,тип;
Ҡара көндәр, шомло төндәр - артта,
Алғы юлдарыбыҙ яҡты, тип.

Йәнәһе лә, коммунистар ғына
Ҡаплап торған икән ҡояшты.
Ғәҙеллекте улар юҡ иткәндәр,
Шул саҡ юғалтканбыҙ оятты.

Ил башлығы тинләп хәйер бирһә,
"Ура" ҡысҡырабыҙ янынан.
Беҙ ҡабатлап ике йөҙлө булдыҡ,
Ялған битлек кейҙек тағы ла.

Миллиард доллар йомған олигарх...
Миллион тинле ябай бер эшсе...
Шул икеүҙе тиңләп буламы ни?
Шунан һин бәхетле, эй, кешем?

Егерме йыл әүәл әйткән һүҙҙе
Тура бәреп әйтә алмайбыҙ.
Тормошто беҙ йәнә бай-бетсәгә,
Түрәләргә генә яйлайбыҙ.

Үҙ бәхетебеҙ үҙебеҙ ялмайбыҙ.
Ҡаршы бер ни әйтә алмайбыҙ.

### Мөхәббәткә яңы йыр

Их, йәшәгем килә өр-яңынан,
Их, һөйәһем килә яңынан.
Теләктәрҙән телем телгә йөҡмай,
Хыялдарҙан йөрәк ярыла.

Бәләм хәҙер ғишыҡ ҡәҙерҙәрен,
Ҡайнар хис баһаһы юғары.
Данлай бәләм һөйөү нескәлеген -
Ҡасмам Пегасымды туғарып.

Уҙған йылдар, оҙон юлдар аша
Йөрәгемдә артҡан сабырлыҡ.
Ошо сабырлыҡты һөйөүемә
Ап-аҡ япма итеп ябырлыҡ.

Беҙ икебеҙ япма-сымылдыҡта
Татырбыҙ ҙа ожмах ләззәтен-
Йыһан киңлегенә күтәребеҙ
Мөхәббәтте ҙурлау ғәҙәтен.

Ер йөҙөнөң һәммә кешеләре,
Иркәм, шулай беҙҙән нур алыр.
Инде юғалһаҡ та үкенесһеҙ:
Ҙур мөхәббәт, ошо йыр ҡалыр.

### Түҙемлек

Өмөт ҡанаттарым ҡайырылһа,
Ваз кисерҙәй булам донъянан.
Нахаҡ һүҙҙәр, ғәйбәт ишеттемме,
Күкрәгемдә нәфрәт ҡуҙғала.

Дуҫтың хыянаты йөрәгемә
Утлы хәнйәр булып ҡаҙалды.
Шыңшыған эт төҫлө, ялап яттым
Мөхәббәттә алған ярамды.

Ҡаным ташты, ғәзиз илкәйемде
Тере килеш киҫкәс өлөшкә.
Йылдар үтеп, йәнем бешеләнде -
Ҡайғы-хәсрәттәргә бирешмәй.

Ауырлыҡтар инде баҫа алмаҫ,
Тормоштан да инде биҙмәсмен.
Яҙмыш ҡына шатлыҡтарын йәлләй,
Шикләнәләр: бәлки, түҙмәсмен...

### Дегәнәктәр

Дегәнәктәр бешеп етте инде -
Көҙҙәр башланыуы билгеһе.
Дегәнәктәй бер уй йөрөй башта:
"Кемдең килһен көҙгә кергеһе?"

Йылдың миҙгелдәре, алмаш-тилмәш,
Тәбиғәттең ҡанын яңырта.
"Кешелә һуң нинә улай түгел?"
Тигән һорау йәнә ҡаңғырта.

Көҙөң етеп: ҡатып-кибеп бөткәс,
Көҙөн яуған йәш ҡар эсенән
Йәш бер сабый булып һөрән һалһаҡ,
Ғәжәп булыр ине, кешеләр!

Ай-һай, тимен, Ер ҙә ҡартаялыр,
Беҙгә генә, ахыры, һиҙелмәй.
Көҙөн уйлап ул да шомланалыр,
Ҡаңғыралыр - күңел һиҙемләй.

### Ябай сер

Ҡырҡ йыл әүәл киттем ауылымдан.
Юҡ, ҡайтмаҫҡа тиеп китмәнем.
Донъя ҡороп йәшәп "кешеләрсә",
Йылдар үтеүҙәрен һиҙмәнем.
Юҡ, ҡайтмаҫҡа тиеп китмәнем.

Уҙған ғүмеркәйҙең бер остого
Тыуған ауылымда йәшәлгән.
Ул ни ғәжәп: күҙем Өфө түгел,
Ҡайыбымды уйлап йәшкәҙәй.
Ауылымда бик аҙ йәшәлгән.

Таштан ташҡа баҫып, таш йорттарҙа
Көн күрәмен ярты быуаттай.
Ә нинә һуң ҡалам, гүзәл ҡалам
Йән тетрәтер хистәр уятмай?
Йән тетрәтер хистәр уятмай.

Яҡын даһа Өфөм урамдары,
Ғәзиз дәһә Өфөм таңдары.
Ҡайны яҡта, зинһар, әйтегеҙсе,
Унан матур ҡала бар тағы?
Шундай ғәзиз Өфөм таңдары.

Ҡайыбымда йәнем тыныслана,
Ауылымда уйҙар яп-яҡты.
Сере ябай икән: торған ерҙән
Кендегенде киҫкән ер яҡшы,
Кендегенде киҫкән ер яҡшы.

### Ҡояш түгел хаким

Заманалар үткән. Ирек тураһында
Һөйләү түгел, хыялланыу ситен.
Борон батырҙарҙын яу сабыуы
Һағыш һыға - күңел шуға китек.

Үҙаллылыҡ, диндең иреклеге,
Тел дуҫлығы - яңы уйҙырмалар.
Уйынсыҡҡа беҙҙе әүрәтә лә,
Ҡабат тоҙаҡ улар ҡуйҙыралар.

Төрөп тағы шыптыр ҡағыҙҙарға,
Әрем ҡаптырырҙар хакимдарым.
Минең, һинең, беҙҙең, хаҡлыҡ даулап,
Һүҙ әйтергә, йәгеҙ, хаҡы бармы?

Рух һындыра, пессимист ул, тиеп
Лаф орорҙар һарай шағирҙары.
Юҡ рухты һуң нисек һындырырға?-
Биккә ябылған ул шығырҙатып.

Тик бер быуын илдә алышынһын,
Китһен һуңғы яугир, могикандар,-
Онотторол данлы үткәндәрҙе,
Һеңдерерҙәр: ҡара аҡ икән дә!

Ҡояш була алмай бер хаким да,
Булмаған ул ерҙә гәзел тормош.
Ике йөҙлөк, нәфсе, дан көсәү һәм
Байлыҡ өсөн мәңге бәреш-орош.

Кеше ағасынан төшкән бирле
Уға юлдаш ошо сифаттары.
Ҡеҫенән дә уйлы, әммә яуыз
Йән эйәһе ерҙә тағы бармы?

Беҙгә ҡала, һарыҡ көтөүеләй,-
Сыбыртҡының нисек шартлауынан -
Лерләшергә уңға, һулға, артҡа
Һәм һиҙелмәҫ тормош ҡатлауы ла.

...Заманалар үткән. Ирек тураһында
Хыялланыу түгел, уйлау ситен.
Халҡым иңрәүҙәре йәнә биктә -
Йөрәк инрәй, йәнә күңел китек.

ИНТЕРНЕТТАН



# МУНСАҢ БУЛМАҺА...

## палаткала ултыр

■ АҠШ-тың Аризона университеты хеҙмәткәрҙәре депрессия менән көрәшеүҙең ҡыҙыҡлы ысулын тәҡдим итә. Улар пациентты башын тышта ҡалдырып, йылытыу элементтары менән йыһазландырылған ҡыҙыу палаткала 2 сәғәт тотоп дауалап ҡарай. 38 градус йылылыҡтағы палаткала тәндә кәйефте яҡшыртыу өсөн яуаплы химик матдәләр бүленеүе яҡшыра икән. Был бета-эндорфиндар ауыртыуҙы баҫа, шулай уҡ кешегә ыңғай эмоциональ тойғолар кисерергә булышлыҡ итә. Был ысулды ҡулланып ҡарауға пациенттарҙың мунсанан һуң физик ҡына түгел, ә психологик йәһәттән дә хәлдәре яҡшырыуы этәргес биргән.

■ Үпкәләү оҙаҡ ваҡыт дауам итһә, йөрәккә насар тәьҫир итеүен беләһегеҙҙер. Насар тойғоларҙы, ваҡиғаларҙы үткәреп ебәрә белмәү ҡан баҫымын күтәрә, был иһә гипертония менән инсультҡа килтерә. Иҫке эмоциональ яраларҙың кеше сәләмәтлегенә нисек йоғонто яһауын тикшергәндән һуң, Сан-Диеголағы Калифорния университеты белгестәре ошондай фекергә килгән. Тәжрибәлә ҡатнашыусы 200 кешене махсус приборҙар менән тикшереп ҡарағандан һуң, кем үҙен ҡасандыр бушҡа рәнйетеүҙәрен онота алмай, уларҙың ҡан баҫымы йыш үҙгәреп тороуы һәм йөрәге йышыраҡ тибеүе асыҡланған. Ғалимдар фекеренсә, ҡайһы берҙә ҡан баҫымы үҙгәреүе ҡурҡыныс түгел, әммә был хәл даими дауам итһә, йөрәк ауырыуҙары хәүефе бермә-бер арта.

■ Көнөнә - ике алма: был һәр ҡатын-ҡыҙ рационының мөһим өлөшө. Бигерәк тә гүзәл зат 50 йәште үткән булһа был мөһим, сөнки алма инсульт һәм инфаркт хәүефен 25 процентҡа түбәнәйтергә мөмкинлек бирә. Бындай һығымтаға Флорида университеты ғалимдары килгән. Улар үткәргән һынауҙарҙа ҡатнашыусылар ике төркөмгә бүленгән. Беренсе төркөмдәге ҡатын-ҡыҙҙар көнөнә ике алмаға тиң булған 75 грамм киптерелгән алма ашарға тейеш булған. Икенсе төркөм ошо уҡ күләмдәге слива ашаған. Өс ай һайын уларҙың һәр береһе анализға ҡан тапшырған. Ул күрһәтеүенсә, кем алма ашаған, уның ҡанында "насар" холестерин күләме тәүҙә 16, һуңынан 8 процентҡа түбәнәйгән. Сливалар бындай һөҙөмтә бирә алмаған. Шуға ла тап алма йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртеүсе булып һанала.

■ Ғалимдар физик көсөргәнештең психикаға ыңғай тәьҫир итеүен күптән дәлилләгән. Табиптар әйтеүенсә, физик күнекмәләр организмда митохондрийҙарҙың күләмен арттыра. Митохондрийҙар энергия бүленеп сығыу өсөн яуаплы булғанлыҡтан, спорт менән шөғөлләнгәндән һуң көс һәм ихтыяр көсө арта. Көньяҡ Каролина университеты ғалимдары фаразлауынса, был матдәләр баш мейеһендә лә әүҙемләшә. Һөҙөмтәлә, хәтер яҡшыра, депрессия, күңел төшөнкөлөгө юҡҡа сыға.

■ Артыҡ күп йоҡларға ярамай, сөнки оҙаҡ йоҡлау һөҙөмтәһендә ҡандағы шәкәр күләме арта. Артыҡ ауырлыҡтан яфаланыусы балаларҙы тикшергәндән һуң, ғалимдар ошондай фекергә килгән. Шулай уҡ аҙ йоҡлау ҙа организм өсөн зарарлы, был осраҡта инсулин секрецияһы ҡыҫҡарған. Филадельфияның балалар дауаханаһы эндокринологы Дорит Корен әйтеүенсә, глюкоза күрһәтестәре үҙгәреп тормаһын өсөн төндә 7,5-8,5 сәғәт йоҡларға кәрәк.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Мәжүсиҙәр ғибәҙәттәрендә йөҙҙәрен күккә, айға, ҡояшҡа, поттарға йүнәлтер булған. Мөхәммәт Бәйғәмбәр аша Ислам дине индерелгәс, мөьминдәргә тәүҙә Иерусалимдағы Әл-Аҡса мәсете яғына йүнәлеп намаҙ ҡылырға ҡушылған. Рәсүлүллаһ сәхәбәләре менән Мәҙинә ҡалаһына күскәндән һуң күпмелер ваҡыт үткәс, төшкө намаҙ мәлендә Аллаһы Тәғәлә илсеһенә Мәккәләге Ҡәәбәгә йөҙөн йүнәлтергә бойороҡ бирә. Шул мәлдән, Ҡәәбә мосолмандар өсөн ҡиблаға, намаҙ, башҡа ҡайһы бер ғибәҙәттәр мотлаҡ шул яҡҡа ҡарап ҡылынырға тейеш булған йүнәлешкә әйләнә. Ҡибла итеп тап Ҡәәбә һайланыуының беҙгә билдәле лә, билдәле булмаған хикмәттәре лә бар. Дин китаптарында улар хаҡында ентекләп бәйән ителә.**



# ҠИБЛА ҠАЙҺЫ ЯҠТА?

Үҙ заманында донъяның төрлө өлөшөндә ҡибланы билдәләү мосолман ғалимдарының мөһим бурысы булып тора. Был үҙ сиратында Ислам дәүләтендә математика, география, астрономия һәм башҡа донъяуи фәндәрҙең үҫешенә килтерә. Ғалимдар һәр урынды ентекләп тикшереп, таблицалар төҙөй. Уларҙың тикшеренеүҙәре урындағы халыҡҡа намаҙ уҡығанда, мәсет төҙөгәндә, кешене ерләгәндә, һуғым һуйғанда ҡибланы дөрөҫ билдәләргә ярҙам итә.

Юғары технологиялар ныҡ үҫешкән заманда ҡибланы билдәләү ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырмай. Бары уны билдәләү ысулдарын һәм был ысулдарҙы дөрөҫ ҡулланыу юлдарын белергә кәрәк. Артабан һүҙ шулар хаҡында барасаҡ.

● Компас - ҡибланы билдәлдәү буйынса иң универсаль һәм уңайлы прибор булып ҡала. Шуға ла мосолман юлға сыҡҡанда мотлаҡ алған әйбер ул. Әлбиттә, ул дөрөҫ күрһәтмәгән урындар ҙа бар. Мәҫәлән, тимер рудаһы ятҡылыҡтары, эшләп ултырған компьютер, башҡа электрон приборҙар янында компас бер аҙ яңылыша. Ләкин күпселек осраҡта иң теүәл, уңайлы юл булып ҡала.

Ҡибланы компас ярҙамында билдәләү өсөн мәктәптәге география дәрестәрен хәтергә төшөрөргә кәрәк. Компастың магнит уғы һәр саҡ төньяҡҡа ҡарай. Ул ғәҙәттә ҡыҙыл төҫкә буялған була. Уҡтың буялмаған яғы көньяҡҡа ҡарай. Компасты ҡәғиҙәләргә ярашлы ҡуйһаң, 0 градус - төньяҡҡа, 180 градус көньяҡҡа тап килә. Өфөгә ҡарата Мәккә ҡалаһы компас буйынса 194 градуста урынлашҡан. Ҡибла көньяҡҡа ҡараған уҡтан уңға, көнбайышҡа табан 14 градуста була ла инде. Башҡортостан ҡала-райондары өсөн айырма артыҡ ҙур түгел. Республиканың көнсығыш өлөшөндә урынлашҡан Учалы, Белорет, Сибай, Баймаҡ һәм Силәбенең Магнитогорск ҡалалары өсөн ҡибла йүнәлеше 200 градус булһа, көнбайышта урынлашҡан Нефтекама, Октябрьский ҡалаларында 190 градус тирәһе.

● Ҡул аҫтында ноутбук, нетбук йә айфон, шулай уҡ интернетҡа сығыу мөмкинлеге булғанда ҡибланы спутник аша билдәләргә була. Махсус сайттарға инеп, кәрәккән йәшәү пунктын яҙыу етә, һә тигәнсә был тораҡ пунктында ҡибланың йүнәлеше күрһәтелә. Хатта йәшәгән йортоңа тиклем йүнәлеште ҡарарға мөмкин. Мәҫәлән, www.theqibla.com сайтына ҡалалар ғына түгел, бөтә эре һәм бәләкәй ауылдар ингән. Уңайлы ла, тиҙ ҙә, теүәл дә.

● Шулай ҙа юлға сыҡҡанда һәр саҡ ҡул аҫтында компьютер, интернет булмай, компасты ла онотабыҙ. Янныбыҙҙа мәсеттәр булһа, уның аша билдәләп була: мәсет михрабы ҡибла яғына йүнәлә. Михраб буйынса билдәләү мөмкинлеге булмаһа, манаралағы ай ҡибланы күрһәтә. Яҡын-тирәлә мәсеттәр булмаһа, ҡибла тураһында урындағы халыҡтан һорашырға ҡала. Ҡибланың нимә икәнен күптәр белмәһә лә, уны күрһәтә алырҙай кешеләр бар әле.

● Ҡибланы аяҙ көндә ҡояш аша билдәләргә лә була. Беҙҙә, Башҡортостанда, ҡояш көндөҙгө дүрттәр тирәһендә Ҡибла йүнәлешендә тора. Сәғәт дүрткә етмәгән, йә уны үткән булһа, ҡояштың сәғәтенә ун биш градус күсә барыуын иҫәпкә алып, дүрттә ҡайһы тирәлә буласағын билдәләргә мөмкин. Ҡояштың ҡайһы ерҙә сыҡҡанын һәм батҡанын белгәндә, һул ҡулды ҡояш сыҡҡан, уң ҡулды ҡояш батҡан яҡҡа ҡуйып, йөҙ йүнәлгән яҡтан саҡ ҡына уңға боролорға кәрәк.

● Әгәр ҡибла йүнәлешен билдәләргә тырышып та, маҡсатыңа өлгәшә алмаһаң, ни эшләргә? Аллаһы Тәғәлә ҡолдарына ҡыйынлыҡтар теләмәй. Ул кешеләргә үтәй алырҙай ғәмәлдәрҙе генә йөкмәтә. Бар көстө һалып та, ул ғәмәлдәрҙе урынына еткереп эшләй алмаһаң, аҡларлыҡ сәбәптәр булғанда йомшаҡлыҡтар бирелә. Эйе, ҡибланы өҫтә әйтелгән ысулдар менән билдәләй алмағанда, йөрәгең ҡушҡан яҡҡа ҡарап намаҙ уҡыйһың. Һуңынан йүнәлеште дөрөҫ билдәләмәүең асыҡланһа ла, намаҙҙы ҡабаттан уҡыу кәрәкмәй.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

ДИНЕБЕҘ НИ ТИ?

# ГОНАҺ ҠОТҠОҺО...

## аҙым һайын

**Дин өлкәһендә беҙ ифрат наҙанбыҙ. Хәҙер, әлбиттә, дини белем бирер, зиһенде асыр сығанаҡ-китаптар күп. Тик беҙ йыш ҡына ул китаптарҙы һатып алып та, уҡырға форсат-ваҡыт тапмай китәбеҙ. Ә инде ошо ҡул аҫтындағы китапта яҙылғанды кеше ауыҙынан йә дин әһеле вәғәздәрендә ишетһәк, иҫебеҙ китеп тыңлайбыҙ. Шуға ла шундай тәҡдим бар: әйҙәгеҙ, динебеҙ, ундағы һабаҡтар, аҡыл, нәсихәт тураһында уҡып, ишетеп белгән ғилем-мәғлүмәтебеҙ менән гәзит биттәрендә уртаҡлашайыҡ. Түбәндәге хат "Динебеҙҙә шулай тиелә" тигән яңы рубрикаға башланғыс булһын.**

Был донъяла гонаһһыҙ әҙәм юҡ. Шайтан, әшнәләре менән берлектә, кеше күңеленә гонаһ эшләргә тигән ҡотҡоһон һалып ҡына тора. Иманлы кешеләр шайтан ҡотҡоһонан ҡотолоу юлын, тәүбәгә килеп, истиғфар итеүҙә таба. Истиғфар - Аллаһы Тәғәләнән эшләнгән гонаһтарыңдың кисерелеүен һорау ул. Бының өсөн намаҙҙан һуң "Әстәғәфируллаһ" тип өс мәртәбә әйтергә, намаҙҙар аралығында ҡылған гонаһтар өсөн ярлыҡау һорарға кәрәк. "Иманлы кеше бәләкәй генә гонаһты ла өҫтөнә тау ауып барған кеүек тойор, ә иманһыҙ кеше оло гонаһты ла себен тешләгән кеүек кенә күрер", тигән хәҙис бар.

Гонаһтар төрлө була. Мәҫәлән: оло гонаһтарҙың береһе - урлашыу. Урлашыуҙың да күп тармаҡтары бар.

● Кешенең йоҡоһон урлау - сәләмәтлелекте урлау ул. Ҡытайҙа иң ҡаты яза булып кешене йоҡлатмай интектереү тора. Өс көн, өс төн йоҡламаған кеше һаулығын юғалта, кешелектән сыға. Бер төн йоҡламаған кешегә һаулығын нығытыр өсөн өс төн тыныс йоҡо кәрәк.

● Ғаилә ағзаларының өлөшөн урлау. Эскегә бирелгән күпме ир-ҡатындар тапҡан-таянғанын араҡыға алыштырып, ғаилә һәм бала хаҡына инәләр.

● Ваҡыт урлау - ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙ бер ҡайҙа ла эшләмәй, өйөндә лә тир түкмәй генә унда-бында йөрөп, ғәйбәт һөйләп, кешеләрҙең ваҡытын алып йөрөп ваҡыт уҙғарыусандар.

● Бәхет урлау - ғаиләле ирҙәргә йә ҡатындарға ғишыҡ уты һалып, уларҙы ғаиләләренән төңөлдөрөп, үҙенә әүрәтеп алған кешеләрҙән дә залимыраҡтар бармы икән?

● Кеше мөлкәтен урлау - хәҙерге заманда был төр гонаһ өсөн яза ҡаралған. Бәйғәмберебеҙ йәшәгән ваҡытта урлашҡан өсөн бармаҡтарҙы ҡырҡыу язаһы булған. Бер ваҡыт бик юғары дәрәжә биләгән ханымдың урлашҡаны фаш ителгәс, халыҡ ни эшләргә белмәй, аптырап ҡалған һәм Бәйғәмбәргә кәңәшкә килгән. Ул асыуланып: "Аллаһы Тәғәленең ҡушҡан язалары ябай халыҡ өсөн генәме ни? Аллаһ менән ант итеп әйтәм, ҡыҙым Зәйнәп урлашһа, мин уның ҡулдарын ҡырҡтырыр инем", - тигән.

Гонаһ эшләү бер ни тормаған заманда йәшәйбеҙ. Шуға ла бер туҡтауһыҙ Аллаһы Тәғәләнән мәғфирәт теләп, истиғфар итеү кәрәктер. Рәсүлүллаһ: "Әгәр кем дә булһа тәүбә һәм истиғфарҙа дауамлы булһа, Аллаһы Тәғәлә ул ҡоло өсөн һәр ауырлыҡтан ҡотолоу сараһы, ҡайғы-хәсрәттән һөйөнөс бирер. Һис көтмәгән ерҙән ризыҡландырыр", - тип әйткән. Фани донъяла шайтандарҙың зарарынан, зыянынан ҡотолор өсөн Сөләймән ғәләйһиссәләмдең ғибрәтле һүҙҙәрен иҫтә тотоу кәрәктер. Ул: "Бөтә булмышың менән Раббыңа ғына һыйын. Йөрөр юлдарыңда һәр ваҡыт Аллаһты юлдаш ит. Ул һинең аҙымдарыңды тура юлға йүнәлделер. Үҙеңде генә аҡыл эйәһе итеп белмә. Раббыңдан ҡурҡ, уны хөрмәт ит, яуыз ғәмәлдәрҙән алыҫ тор. Бына шулар - тәнең өсөн шифа, һөйәктәрең өсөн аҙыҡ булыр" , -тигән.

**Зәлифә ШАКИРОВА.**
**Әбйәлил районы.**

ҺАБАҠТАР

# РӘХМӘТЛЕ БУЛА БЕЛМӘЙБЕҘ...

**Беҙ балалар йортонда үҫкән һуғыш осоро етемдәре. Мин ауылда йәшәүемде, өйөмдө хәтерләмәйем. Берҙән-бер хәтирәм шул: тонок тәҙрә быялаһында эленеп торған бәләкәй генә һауа бөртөгөн алам тип тырнап та, һуҡҡылап та, ялап та ҡарауым. Алып булманы ул бөртөктө. Һауа бөртөгөмө, һыу бөртөгө ине микән ул, тик хәҙер күҙ йәше бөртөгөләй иҫкә төшә. Кипмәй ҙә, ағып та төшмәй, юйылмай ҙа...**



Үҙ аңым менән донъяны ҡабул иткәндә балалар йортонда үҫә инем инде. Беҙҙе Бөрйәндән Өфөгә алып килделәр. Беҙҙең эргәгә алып килгән һәр баланы ҡыҙыҡһынып ҡүҙәтә торғаным. Иң тәүҙә Роза исемле ҡыҙыҡайҙы килтереп ҡалдырып киттеләр. Ул тәҙрәнән урамға ҡарап: "Мама, мама!"- тип ҡысҡырып иланы. Балалар Розаны аптырап күҙәтте. Беҙҙең арала быға тиклем илаҡ балалар булмағайны шул. Күпмелер ваҡыт үтте. Бер көндө "Бәләкәй баҡсала" уйнап йөрөгәндә Фаина исемле ҡыҙыҡайҙы алып килделәр. Роза менән мин уның янына йүгерҙек. Фаина эскәмйәгә ултырҙы. Беҙ йылмайышып ике яҡлап уның янына ултырҙыҡ. Фаина эскәмйәгә менеп баҫты. Беҙ ҙә менеп баҫтыҡ. Ул һикереп төшкәйне, беҙ ҙә һикереп төштөк. Ерән сәсле, түп-түңәрәк һиккелке битле Фаинаны "Илап ҡуймаһын" тип ҡурсалап ҡына йөрөттөк. Ә һуңынан, мәктәп йылдарында, Санияны алып килделәр. Ул, бәлки, төндәрен илағандыр ҙа, әммә көндөҙ бойоғоп йөрөмәне. Сөнки ФЗУ-ла уҡып йөрөгән ағаһы йыш килә ине. Ағаһы, моғайын, Саниәға "Ныҡ бул, бирешмә!" тип өйрәтәлер, тип уйланым. Аҙаҡ беҙгә Надя, Катя исемле ҡыҙҙарҙы алып килделәр. Уларҙың да илап ултырғанын күрмәнем. Беҙ, һуғыш осоро балалары, тормошто нисек бар, шул көйө тыныс ҡабул иттек. Беҙҙең арала һәр саҡ изгелекле мөнәсәбәт булыуы иҫемдә ҡалған.

Йылдар ашығып үттеләр, мәктәпте тамамлап, төрлө яҡтарға таралыштыҡ. Күпмелер йылдар үткәс, бер саҡ балалар йортоноң юбилейында осраштыҡ. Мине аптыратҡаны шул булды: бергә үҫкән, бергә уҡыған һабаҡташтарым араһында Сания менән мин генә башҡорт балаһы икәнбеҙ ҙә. Сания - Сибайҙан, ә мин - Бөрйәндән. Ҡалғандары йә сыуаш, йә мари, йә рус, йә татар. Балалар йортонда тәрбиәләнгәндә барыбыҙ ҙа башҡортса һөйләштек, башҡорт телендә уҡып белем алдыҡ, шуға ла кемдең ниндәй милләт балаһы икәнен дә айырмағанбыҙ. Ә осрашыуға килгәс, уларҙың береһе лә башҡортса һөйләшмәгәнен шәйләп ҡалдым. Башҡортса өндәшәм, әммә береһе лә миңә башҡортса яуап бирмәй. Һәм күңелем кителеп: "Йәмәғәт, башҡорт илендә йәшәйһегеҙ, башҡорт телен һәйбәт беләһегеҙ, ә нинә башҡортса һөйләшмәйһегеҙ?" - тип әйтмәй булдыра алманым. Минең һүҙҙәремә ҡаршы яуап таба алманылар. Ә минең башыма "Юҡҡа ғына халыҡ "Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай" тип әйтмәгәндер" тигән уй килде...

Ә шулай ҙа мин рус йә татар телендә һөйләшеүгә күскән һабаҡташтарым урынында булһам, "Беҙҙе үҫтергән, тәрбиәләгән, белем биргән башҡорт теленә һәм еренә рәхмәт!" тигән һүҙҙәрҙе булһа ла әйтер инем. Ниңәлер улар ҡаушап ҡалды. Һуңынан уйланғандарҙыр, тигән өмөттәмен. Рәхмәтле булыу етешмәй шул кешеләргә.

**Айгөл АХУНОВА.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



### Ихтыяж-теләктәр

**Һәр кешенең тормошо ниндәйҙер теләктәрен, ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүгә йүнәлтелгән. Беҙ нимә өсөн йәшәйбеҙ, кемдең ихтыяжын ҡәнәғәтләндерәбеҙ?**

Әгәр һеҙ ашайһығыҙ, эсәһегеҙ, йоҡлайһығыҙ, һыу инәһегеҙ, ял итәһегеҙ, бәҙрәфкә йөрөйһөгөҙ икән, тимәк, тәнегеҙҙең ихтыяжын ҡәнәғәтләндерәһегеҙ. Тәндең маҡсаты бер - тормоштан мөмкин тиклем күберәк ҡәнәғәтлек алырға!

Әгәр матур кейенергә, призлы урын яуларға, карьера үҫешенә өлгәшергә, көслө, һөмгөл булырға, ҙур аудитория алдында уңышлы сығыш яһарға теләйһегеҙ икән, һеҙ Рух йүнәлеш биргән Эгоның ихтыяжын ҡәнәғәтләндерәһегеҙ. Уның маҡсаты - яуланған ҡаҙаныштарҙан ләҙҙәт алыу. Шул уҡ ваҡытта башҡа кешеләрҙең ихтыяжы тулыһынса инҡар ителә. Кеше үҙенең эгоһы ҡушыуы буйынса ғына йөрөһә, унда эгоизм үҫешеүе мөмкин.

Әгәр Һеҙ тормош мәғәнәһен эҙләһәгеҙ, үҙегеҙҙең һәләттәрегеҙҙе асырға, бөтөн нәмәне аңларға ынтылһағыҙ, күңел ихтыяжын ҡәнәғәтләндерәһегеҙ. Уның маҡсаты - шәхесте уятыу, кәүҙәләнеш ҡулсаһынан сығып, өйгә - сығанаҡҡа ҡайтыу! Күңел, рух шулай уҡ был йүнәлештә башҡаларға ла ярҙам итергә тырыша, сөнки беҙ - бер бөтөндөң төрлө өлөшсәләре!

Шул уҡ ваҡытта теләктәрҙең тормошҡа ашыу сиратын Аҡыл билдәләй! Тән, эго һәм күңел теләктәренән тыш, төрлө ҡуйылыштар һәм программалар бар (һайлауға барырға, ағас ултыртырға, ауырыу кешенең хәлен белергә һ.б.). Теләктәрҙе тормошҡа ашырыуҙа аҡылға аҫҡы аң һәм фәрештәләр ярҙам итә.

Ә тәмәке тартҡанда, алкоголь эскәндә, наркотиктар ҡулланғанда, әрләшкәндә кемдең ихтыяжын ҡәнәғәтләндерәләр һуң? Тәндең бында ҡыҙыҡһыныуы юҡ, ул тарҡалырға, ыҙа сигергә, ауырырға ғына мөмкин. Эго тәмәке еҫенә ыҫланырға, һары тешле булырға, ҡойма аҫтында ятырға, әрпеш күренергә теләмәй. Күңел, рух һәр саҡ үҫергә ынтыла. Аҡыл быларҙың барыһы ла кире йөгонто яһауын аңлай.

Барлыҡ һанап үтелгән осраҡтарҙа төрлө бире-ендәрҙең ихтыяжы ҡәнәғәтләндерелә - уларҙы бысраҡ энергия менән туҡландырып торорға кәрәк. Аҡыл һәр ваҡытта уларҙың теләгенә ҡаршы тора алмай. Ә биреләр тәндең, эгоның, йәндең үҫешендә ҡыҙыҡһыныусанлыҡ күрһәтмәй. Уларҙың маҡсаты - емереү, тарҡатыу, бүлгеләү, туҙҙырыу. Кеше ни тиклем ыҙа сигә, биреләргә туҡланыу өсөн шул тиклем аҙыҡ күбәйә (кире энергия), шуға ла улар ныҡ тырыша ла инде.

Тән бары тик үҙенә ләҙҙәт алыуҙы ғына ҡайғырта, эго тәндең һәм шәхестең үҫешен хәстәрләй, бары тик йән генә ошо өс аспекттың барыһының да гармониялы үҫешен ҡайғырта, сөнки сәләмәт һәм үҫешеүсән кеше генә тормош асылын аңлай ала!

Ә һеҙ кемдең ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүгә өҫтөнлөк бирәһегеҙ - тәндеңме, эгоныңмы, йәндеңме әллә биреләрҙеңме?

**Рауфан МОРТАЗИН.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Оҙаҡ йәшәүҙең биш көнсығыш сере

**Оҙаҡ йәшәүҙең 1-се сере.**

### Тын алыу - яҡшы сәләмәтлеккә юл

***Тын алыу тигеҙ булмағанда, мейе тыныс түгел, ләкин тын алыу тыныс булғанда, мейе лә тыныс.***

*Йоганың боронғо принцибы.*

Кеше һыуһыҙ һәм аҙыҡһыҙ бер нисә көн йәшәй ала, әммә тын ала алмаһа, ул бик тиҙ үләсәк. Тын алыу йәшәү өсөн бик мөһим. Дөрөҫ тын алырға өйрәнһәгеҙ, аң һәм йән торошона ғына йөгонто яһау һәләтен өйрәнәсәкһегеҙ, шулай уҡ энергетик кимәлегеҙҙе лә күтәрәсәкһегеҙ. Дөрөҫ тын алырға өйрәнеү һөҙөмтәһендә тәнегеҙҙе тулыһынса кислород менән тултыраһығыҙ һәм организмығыҙҙың һәр күҙәнәген энергия менән зарядлайһығыҙ, уны юғары тормош активлығы торошонда тотаһығыҙ.

Дөрөҫ тын алыу практикаһы (дөрөҫ позалар кеүек үк) һеҙҙәге әлегә йоҡомһорап ятҡан энергия запасын азат итәсәк.

Түбәндә бирелгән ысулдар йоганың быуаттар һуҙымында тупланған тәжрибәһенә нигеҙләнгән һәм бөтөн донъяла оптималь сәләмәтлеккә һәм бәхеткә өлгәшеү стратегияһы булып таныла.

Бер боронғо философ: "Дөрөҫ итеп тын алыу - тимәк, дөрөҫ йәшәү", - тигән. Тәрән итеп тын алыу йәндең һәм тәндең һоҡланғыс торошон тәьмин итә. Хәҙер күптәр мейеләрен ял иттереү өсөн тын алыу күнекмәләре системаһын ҡуллана. Билдәле атлеттар тулыһынса көсөргәнештән арыныу йәки бик яуаплы ярыштарҙа үҙҙәрен юғары формала күрһәтеү өсөн тын алыу күнекмәләренә мөрәжәғәт итә. Актерҙар, профессиональ йырсылар һәм дикторҙар шаршау йәки "кадр артында" тын алыу гимнастикаһы ярҙамында тауышын кәрәкле тулҡынға көйләй.

Физик камиллыҡтың төп элементтарының береһе булып дөрөҫ тын алыу ысулы тора, әммә, үкенескә күрә, ул тейешенсә баһаланып бөтмәй әле. Йога йәки хәрби бераһыш кеүек сәнғәт төрҙәренең меңәр быуатлыҡ тарихына күҙ һалһағыҙ, һеҙ уларҙың нигеҙендә тәрән һәм дөрөҫ тын алыу практикаһы ятыуын күрерһегеҙ.

Әгәр оҙаҡ йәшәргә, бәхетле булырға теләһәгеҙ, үҙегеҙҙең ни тиклем көслө булыуығыҙҙы уйлағыҙ һәм дөрөҫ итеп тын алырға өйрәнегеҙ, түбәндәге күнекмәләрҙе ҡулланығыҙ.

**Һоҡланғыс сәләмәтлек өсөн тын алыу күнекмәләре**

**1. Тын алығыҙ һәм уны тотҡарлап тороғоҙ: супер тын алыу**

Был алым бер нисә аҙна даими практиканан һуң энергияғыҙҙы һиҙелерлек арттырыр һәм ул ҡулланыу өсөн бик еңел. Ул шулай уҡ иғтибар туплау өсөн иң яҡшы күнекмә.

Икегә тиклем һанағанса тәрән итеп тын алығыҙ, уны һигеҙгә тиклем һанағансы эстә тотоғоҙ һәм дүрткә тиклем һанағансы сығарығыҙ. Уны еңелләштереү өсөн атлағанда эшләү яҡшы: ике аҙым яһағанса тәрән итеп тын алығыҙ, һигеҙ аҙым атлағансы тынығыҙҙы тотоғоҙ, дүрт аҙым атлағанда сығарып бөтөрөгөҙ. Тиҙҙән энергетик кимәлегеҙҙә һәм дөйөм хәл-торошоғоҙҙа һиҙелерлек үҙгәреш тойорһоғоҙ.

## БАШ ЭШЛӘТМӘК



**1.** Артҡа ҡарай оса алған ҡош. **2.** Англиялағы мадам. **3.** Был "һинд алмаһы" Европаға Александр Македонский аша эләккән. **4.** Бик әрһеҙ, шыма кешегә эт (...)ы тиҙәр. **5.** Ҡыҙҙырылған бойҙай. **6.** Урыҫтар өсөн "япраҡ"лы ылыҫлы ағас. **7.** Был Латин Америкаһы дәүләтендә тоҙҙан мотель төҙөгәндәр. **8.** Хара-киринан ҡурҡмаған батыр. **9.** Грамлап үлсәнгән эсемлек. **10.** Ҡарағайҙың һағыҙы. **11.** Капюшонлы йылан. **12.** "Ағас бейек булһа л, (...)ы ерҙә". **13.** Был металды алтынға ҡатылыҡ өсөн ҡушалар. **14.** Ҡафиәләр оҫтаһы. **15.** Сәс йыуыу өсөн ҡулланылған һөт продукты. **16.** "Ярлының яҫтығы - ер, (...)ы - болот". **17.** Сөгәнең икенсе атамаһы. **18.** Ҡайҙа утын алып бармайҙар? **19.** Был сәй эсемлеге эҫе көйөнсә ҡан баҫымын күтәрә, һалҡын көйөнсә төшөрә. **20.** Ҡатын-ҡыҙҙың ҡул биҙәүесе. **21.** Тиреһен ташлай торған йән эйәһе. **22.** Ишек келәһе. **23.** Туҙ майы. **24.** Титестерҙың эсемлеге. **25.** Бәхет ерҙән сыҡмаҫ, (...)ҙән сығыр. **26.** Шүрлекле ашамлыҡ. **27.** Бер ҙә эшкәртелмәгән, һөрөлмәгән үләнле ер. **28.** Ҡолаҡ япрағы ҡысытһа, (...) булыр. **29.** Йәйрәп ятҡан киң дала. **30.** Донъялағы иң бейек дәүләт. **31.** Аттың ҡулбашы өҫтөндәге ҡалҡыу ер. **32.** Әфйүн сәскәһе. **33.** Һепертке өсөн "үҫкән" ҡыуаҡ. 34. Баба ҡошо йәки берғаҙан. **35.** Параличтың икенсе атамаһы. **36.** Беле йәки һуна ҡош булараҡ. **37.** Ордены булған кеше. **38.** Был газ һыуҙы плюс 20 градуста туңдырырға ярҙам итә. **39.** Әмир етәкләгән ғәрәп "диңгеҙе" дәүләте. **40.** Ҡышҡы һыуыҡта татлана торған емеш. **41.** "Кедрҙар дәүләте". **42.** АҠШ-тағы кукуруз штаты. **43.** Ғөрөф-ғәҙәт, йола, церемония. **44.** Баш ҡалаһы "өс ҡаланан" торған Африка дәүләте. **45.** Урыҫ ҡатыны. **46.** Африканың иң ҙур ҡалаһы. **47.** Ҡатын-ҡыҙҙарҙың еңел күлдәге. **48**. Ике дуэт.

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**32-се һандағы кроссворд яуаптары:** 1. Алдаҡсы. 2. Ҡармаҡ. 3. Никах. 4. Ғәйеп. 5. Мәхшәр. 6. Ситәүкә. 7. Алфавит. 8. Кәрәсин. 9. Бырау. 10. Дәғүә. 11. Ҡатын. 12. Кәсеп. 13. Кәләш. 14. Балыҡ. 15. Бүрек. 16. Истәк. 17. Ҡаракүл. 18. Күркә. 19. Ғәрәсәт. 20. Кинәнес. 21. Кәңәш. 22. Ҡыш. 23. Килен. 24. Йәй. 25. Көҙ. 26. Сәбәп. 27. Йөрәк. 28. Спорт. 29. Зиһен. 30. Һарай. 31. Иптәш. 32. Тин. 33. Сенаж. 34. Лилипут. 35. Ҡәйнә. 36. Утрау. 37. Папирос. 38. Биҙрә. 39. Кәбеҫтә. 40. Танау. 41. Ҡолаҡ. 42. Ҡорот. 43. Зиндан. 44. Торна. 45. Капот. 46. Ғифрит. 47. Туғаҙаҡ. 48. Помидор.

## ЙӘШЕЛ ДАУА

# МИЛӘШ, МЫШАР



**Миләш ағасы (рябина) менән һоҡланмаған һәм унын файҙалы сифаттары тураһында белмәгән кеше юҡтыр. Был ағас емештәре бөйөрҙә һәм бәүел ҡыуығында таштар барлыҡҡа килеүҙе тоҡарлай, ҡан тамырҙарын нығыта, организмды витаминдар һәм микроэлементтар менән тәьмин итә, ҡан баҫымын төшөрә, ҡандың ойошоусанлығын күтәрә, бауырға май ултырыуын һәм ҡанда холестерин тупланыуын кәметә.**

**Склероз.** Миләш ағасының ҡабығын иҙергә. 0,5 литр һыуға 5 ҡалаҡ иҙмә алырға һәм 2 сәғәт талғын утта ҡайнатырға. Һыуынғас, һарҡытырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 25-30 мл ҡабул итергә.

**Кардиосклероз.** Шулай уҡ эшләргә, тик 30 минут ҡайнатырға. Көнөнә 3 тапҡыр 1-2 ҡалаҡ ҡабул итергә.

**Геморрой.** Был осраҡта көҙ миҙгелендә емештәр өлгөргәс дауаланалар. Һутын һығып алырға һәм көнөнә 3 тапҡыр һыуыҡ һыуға ҡушып, яртышар стакан ҡабул итергә.

**Түбән кислоталылыҡ.** Был осраҡта ла шулай уҡ көҙ миҙгелендә дауаланалар. Сентябрь-октябрь айында көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1 балғалаҡ емеш һутын ҡабул итергә.

**Күреү һәләте.** Көнөнә 3 тапҡыр ашағанға тиклем 1-3 ҡалаҡ емеш һутын ҡабул итергә, ә ҡышҡыһын емештәренән яһалған төнәтмә ҡабул итергә: 1 стакан ҡайнар һыуға 1 ҡалаҡ емеш һалырға, 4 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 2-3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Әйткәндәй, миләштең киптерелгән емештәренең дауалау сифаттары ике йыл һаҡлана.

**Боғаҡ шешеү, бөйөр ауырыуҙары.** Бер стакан ҡайнар һыуға 2 балғалаҡ миләш сәскәһе алырға, йылы урынға ҡуйып, 4-6 сәғәт төнәтергә. Һарҡытырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр 50 мл ҡабул итергә. Ошо уҡ төнәтмә ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарынан да ярҙам итә.

**Миләш препараттарын ҡандың ойошоу кимәле юғары булғанда ҡулланыу тыйыла. Шулай уҡ юғары кислоталылыҡ булған осраҡта яңы бешкән емештәрен һәм һутын ҡулланырға ярамай. Миләш һутын ашҡаҙан һәм бөйән эсәге яман шеше булғанда ҡулланмайҙар. Әйткәндәй, әсеһә, миләш һуты дауалау сифаттарын юғалта.**

# ҠАУЫН



**Ҡауындың (дыня) дауалау сифаттары һанап бөткөһөҙ: ул аҙ ҡанлылыҡтан, подагранан, бөтә йөрәк-ҡан тамырҙары, эсәк, бауыр ауырыуҙарынан дауалай, һыуһынды баҫа, нервылар системаһын тынысландыра, организмдан холестеринды сығарыуға булышлыҡ итә. Ҡауын менән дауаланған осорҙа тик йәшелсә-емеш менән генә туҡланырға, ит һәм һөт ризыҡтарынан баш тартырға кәңәш ителә.**

**Бөйөрҙөң таш ауырыуы, һейҙек юлы ташы ауырыуы.** 1 стакан иҙелгән ҡауын орлоғон 3 литр йылымыс ҡайнатылған һыуға һалып төнгөлөккә төнәтергә ҡуйырға. Һыу кеүек бер ниндәй сикләүһеҙ эсергә. Был тиҙ һәм ыңғай һөҙөмтәләр бирер. Орлоҡтарын яҡшылап киптерергә, ләкин йыумаҫҡа. Быяла банкала һаҡларға.

Киптерелгән ҡауын орлоҡтарын иҙеп, импотенция булғанда һәм простата биҙен дауалау өсөн көнөнә 3-4 тапҡыр берәр балғалаҡ ҡабул итәләр.

Әбүғалисина былай тип киҫәткән: "Ҡауынды башҡа аҙыҡтарҙан һуң ашарға кәрәк, юғиһә, күңел болғаныуы ихтимал. Ул ашҡаҙанда боҙолһа, ағыулы матдәгә әйләнә. Шуға күрә, әгәр ҡауын ашағандан һуң ашҡаҙан ауыртһа, тиҙерәк уны сығарырға тырышырға кәрәк, иң яҡшыһы, кеше нисек тә булһа ҡоҫорға тейеш". Быға тағы ла шуны өҫтәргә мөмкин: ҡауынды спиртлы эсемлектәр, бал, һыуыҡ һыу менән бергә ҡулланырға ярамай. Бының эсәктәрҙең шешеүенә, эс китеүенә алып килеүе бар.

# ҠЫЯР



**Ҡыяр күптәрҙең яратып ашаған йәшелсәһе. Күпселек осраҡта ҡыяр салат һәм ҡышҡылыҡҡа тоҙлау өсөн ҡулланыла. Ә шул уҡ ваҡытта ул тәмле генә түгел, ә файҙалы ла икәнлеген барыһы ла белмәй. Бигерәк тә ҡыяр һуты кеше организмын кәрәкле матдәләр менән байытырға һәләтле.**

Ҡыяр 93-94 процент һыуҙан тора. Ләкин ул ябай һыу түгел, ә организм метаболизмын яҡшыртыусы структураланған шыйыҡса. Нәҡ "дөрөҫ" һыу организмдағы күпселек алмаштырыу процесын нормалләштерә, һыу балансының оптималь кимәлдә булыуын контролдә тота һәм төрлө ағыулы матдәләрҙең һәм токсиндарҙың сығарылыуына булышлыҡ итә. Шулай уҡ ҡыяр файҙалы витаминдарға ла бай. Мәҫәлән, унда PP, биотин, B төркөмөнә ҡараған витаминдар һәм күп булмаһа ла аскорбин кислотаһы, ретинол һәм токоферол бар. Тағы ла ҡыяр үҙендә эфир майы һәм организмда артыҡ май йыйылмаһын өсөн кәрәкле тартрон кислотаһын да туплай. Ҡыярҙа шулай уҡ көкөрт, йод, кремний һәм фосфор, тимер, кальций, магний, хлор һәм калий минералдары күп.

Барлыҡ был матдәләр ҡыяр һутында бар һәм шуға күрә уны ҡулланыу файҙалы, тип белдерә белгестәр. Ҡыяр һутын йөрәк, бауыр ауыртҡанда, ҡан баҫымы йыш үҙгәргәндә эсергә мөмкин. Шулай уҡ үҙәк көйгәндә, ашағандан һуң күкрәктә ауырлыҡ һәм яныу тойғанда, аппетит юғалғанда ла ҡулланырға була.

Тик ҡыяр һутын эшләгәндән һуң тиҙ арала эсеү мөһим, уны оҙаҡ һаҡларға ярамай. Шулай уҡ һут эшләү өсөн йәш һәм боҙолмаған ҡыярҙарҙы ғына һайларға кәрәк.

# ПЕРСИК



**Персикты (шафталы) түбән гемоглобин булғанда, анемия ваҡытында ҡулланыу тәҡдим ителә. Унын составындағы тимер алма, сейә, абрикос, грушаға ҡарағанда күберәк.**

Персик бигерәк тә операция, нур терапияһы үткән ауырыуҙарға файҙалы. Ғөмүмән, унын химик составы организмда барлыҡҡа килеүе мөмкин булған кире үҙгәрештәргә ҡаршы иммунитетты көсәйтә. Токоферол матдәһе иһә ҡартайыу порцесын әкренәйтә.

Диатез, аллергия булғанда персиктың һөйәктәрен яҡшы итеп ҡыҙҙыраһың, онтайһың, ваҡлайһың, ҡәһүә төйгөс машинала ваҡлайһың. Килеп сыҡҡан ондо бер аҙ һыу менән бутап, аллергия сыбартмаһы өҫтөнә һылайһың.

Һимереү, диабет менән интегеүселәргә персик ашау кәңәш ителмәй. Шулай уҡ ҡалҡан биҙендә гипофункция булғанда персиктан алыҫ тороу тәҡдим ителә, сөнки ул ҡалҡан биҙе гормондарын барлыҡҡа килтереүгә ҡамасаулай. Аллергиянан яфаланыусылар ҙа персик ашауҙан тыйылырға тейеш.

**Рим ӘХМӘДОВ.**

✓ *Илле яулығың булһа ла, ил ауыҙын тыға алмаҫһың.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# БЕЙЕҮСЕЛӘРЕБЕҘ...

## Олимпия уйындарында

**Лондонда үткән утыҙынсы Олимпия уйындарының Мәҙәни программаһы сиктәрендә ҙур фестиваль дә ойошторола. 21 июндән 9 сентябргә - параолимпия уйындары тамамланғансы дауам итәсәк был сарала Башҡортостан Республикаһынан Фәйзи Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре дәүләт академия ансамбле лә сығыш яһаны.**

Был фестивалдең программаһы төрлө жанрҙағы сығыштарҙан: карнавал, цирк тамашалары, театраль һәм опера постановкаларынан, фильмдар, поп-музыканттарҙың гала-концерттарынан, хатта мода күрһәтеүҙән тора. Ғәскәровсылар унда 2 августан 5 августка тиклем концерттар ҡуя.

Ансамблдең ижади етәксеһе Рим Әбделмәнов әйтеүенсә, улар Европаның иң оҙон сауҙа урамы - Оксфорд-стрит эргәһендә йәшәгән һәм Кенсингтон баҡсалары тип йөрөтөлгән парктың Рус паркы тигән урынында сығыш яһаған. Тап ошонан алыҫ түгел принц Уильям менән уның ҡатыны Кейт Миддлтондың йәйге резиденцияһы урынлашҡан, Рәсәй илселеге лә бынан алыҫ түгел.

Ансамблдең директоры Радик Шәрәфетдинов был сәйәхәтте Лондондың Рәсәйгә эстафета тапшырыуы итеп тә ҡабул итергә мөмкин, тип белдерҙе, сөнки донъяның иң сағыу спорт сараларының береһе иҫәпләнгән Олимпия уйындары 2014 йылда тап Рәсәйҙә - Сочиҙа үтәсәк. Программаның үтә тығыҙ булыуы сәбәпле, артистарға спорт сараларында ҡатнашырға мөмкинлек булмай.

**Республикабыҙҙың Фәйзи Ғәскәров исемен йөрөткән иң данлыҡлы ижади коллективы әлегә Бразилияла гастролдә, унан һуң улар тура Германияла Рәсәй көндәрен асыу тантанаһында ҡатнашасаҡ. Ә Фәйзи Ғәскәровтың тыуыуына 100 йыллыҡ айҡанлы саралар Өфөлә 23 ноябрҙән 27 ноябргә тиклем дауам итәсәк. Унда Рәсәйҙең иң яҡшы коллективтары сығышын да күрергә мөмкин буласаҡ.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**



ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

### Маринадлы корнишондар

**3 лиртлы банкаға: 1,2 (1,4) л һыу, 2 ҡалаҡ тоҙ, 3 ҡалаҡ шәкәр, 15 бөртөк ҡәнәфер, 6 лавр япрағы, 1 балғалаҡ төйөлгән корица, ҡара борос, борсаҡлы борос, 180-200 мл 6 процентлы һеркә (70 процентлыһын алһағыҙ - 1 ҡалаҡ).**

Ҡыярҙарҙы 6-8 сәғәт һалҡын һыуҙа тоторға, остарын ҡырҡырға, стерилле банкаға тултырырға һәм ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут тоторға. Һуңынан һыуын ҡойоп алырға һәм киренән ҡайнау хәленә еткерергә. Ҡыяр тултырылған банкаға тоҙ, шәкәр, тәмләткестәр, 3-4 теш һарымһаҡ, әсе борос ҡуҙағы һалып, ҡайнап ултырған һыуҙы ҡойорға, һеркә өҫтәргә, яҡшы итеп ябырға һәм урап, һыуынырға ултыртырға.

### Йәшелсә салаты

**5 кг ҡыярҙы (түтәлдә оҙаҡ ятып, артыҡ өлгөрөп киткәндәре лә ярай) кубиклап турайбыҙ, 2 кг помидорҙы, 0,5 кг татлы боросто ит турағыстан үткәрәбеҙ.**

1 стакан шәкәр, 1 стакан үҫемлек майы, 2 ҡалаҡ тоҙ, 2 балғалаҡ һеркә кислотаһы, 3 теш ит турағыстан үткәрелгән һарымһаҡ алабыҙ. Кәстрүлгә ҡыяр, помидор, борос, тоҙ, шәкәр һәм майҙы һалып ҡайнатабыҙ, биш минуттан һуң һарымһаҡ өҫтәп, тағы 1 минут ҡайнатабыҙ. Һеркә өҫтәгәс, тағы 1 минут ҡайнатырға. Алдан әҙерләнгән банкаларға һалып, ябырға.

### Тиҙ тоҙланған ҡыяр

**1 ҡыярға: 1 ҡалаҡ һеркә, 2 балғалаҡ шәкәр, 2 балғалаҡ укроп, тәменсә тоҙ.**

Ҡыярҙы урталай ҡырҡырға. Бар тәмләткестәрҙе лә бергә бутарға, ҡыяр өҫтөнә һибергә һәм бер нисә сәғәткә ҡалдырырға. Тоҙло ҡыяр әҙер.

### Ҡыяр һәм патиссон тоҙлау

**1 литрлы банканың төбөнә петрушка, укроп, ҡарағат һәм сейә япраҡтары, һарымһаҡ, хуш еҫле һәм ҡара борос, 1 лавр япрағы һалырға.**

Банканы ҙур булмаған ҡыярҙар менән тултырырға, мөмкин булһа, уларҙы горизонталь рәүештә һалығыҙ, ҡалған урынға ҙур булмаған патиссондар, помидорҙар тултырып, өҫтөнән укроп һабаҡтары һалырға була. Банкаларға ҡайнар һыу ҡойоп, ҡайнатып алынған ҡапҡастар, уларҙың өҫтөнән таҫтамал менән ябып, 2-3 минут торорға. Һуңынан һыуҙы түгергә һәм банкаларҙы тағы ла ҡайнар һыу менән тултырырға, алда әйтелгәнсә ябырға һәм 5-6 минут торорға. Һуңынан был һыуҙы айырым һауытҡа ҡойоп алырға, 1 ҡалаҡ тоҙ, 2 ҡалаҡ шәкәр һалып, ҡайнатырға һәм марля аша банкаларға кире ҡойорға. Банкаларға 1 балғалаҡҡа яҡын һеркә эссенцияһы өҫтәргә. Банканы ябырға, әйләндерергә һәм ошо рәүешле берәй нәмәгә урап, һыуытырға ҡуйырға.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

# ХАЛЫҠ АУЫҘЫНА...

## мисәт баҫып булмай

Илле яулығың булһа ла, ил ауыҙын тыға алмаҫһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер шәкерт бик борсолоп Остазы эргәһенә килә һәм: "Хөрмәтле Остазым, бергә уҡыған шәкерттәр ниңәлер миңә ҡырын ҡарай һәм был минең тормошомдо түҙеп торғоһоҙ итә. Ошо мөнәсәбәтте нисек үҙгәртергә була, әллә Һеҙ миңә артабан да түҙергә ҡушаһығыҙмы?" - тип һорай. "Был мәсьәләне еңел генә хәл итәбеҙ, - ти Остаз. - Дәрес ваҡытында һин минең эргәмә кил һәм ҡолағыма шыбырҙаған бул. Мин дә һиңә яуап итеп шыбырҙаған булырмын..."**

**Шулай итәләр ҙә. Был күренеш шунда уҡ бар шәкерттәрҙең дә ҡыҙыҡһыныу үҙәгенә әйләнә. Күпмелер ваҡыттан һуң улар Остазға мөрәжәғәт итә: "О, беҙҙең Остазыбыҙ! Яратҡан шәкертегеҙ менән нимә хаҡында шыбырҙашыуығыҙҙы беҙгә лә әйтмәҫһегеҙме?" Остаз шәкерте менән шыбырҙашыуҙың йөкмәткеһен әйтеп бирә:**

**- Һин үҙеңдең таҫырайған күҙҙәреңде йәшерә алаһыңмы? - тип һораным.**

**- Эйе, - тине ул.**

**- Һин күпме аҡса эшләнең? - тип һораным.**

**- Ун һум,- тине ул.**

**- Күпмеһен юғалттың? - тип һораным.**

**- Биште, - тине ул.**

**- 32-һе лә өйҙәме?- тип һораным.**

**- 29-ы ғына өйҙә, - тине ул.**

**Остаздың был хәбәренән бер ни ҙә аңламаған шәкерттәр тамам аптырап ҡала. Шунан улар аңлатыуҙы һорап, Остаздың яратҡан шәкертенә мөрәжәғәт итә.**

**- Барыһы ла ябай ғына, - ти шәкерт.- Остаз һеҙҙең ваҡ-төйәк менән булғанығыҙҙы белә, шуға ла һеҙгә һабаҡ бирергә теләне. Һеҙ Унының минең менән шыбырҙашыуҙы миңә булған иғтибар билдәһе тип ҡабул иттегеҙ һәм миңә мөнәсәбәтегеҙҙе үҙгәрттегеҙ.**

**- Ләкин һеҙҙең был серле диалог ниҙе аңлата һуң?- тип ныҡыша шәкерттәр.**

**- Мин ун һум аҡса эшләгәйнем, уның биш һумын улымды уҡытыуға тотондом, - ти шәкерт.**

**- Ә 32 һаны, моғайын да, ниндәйҙер мөһим иҫәпте белдерәлер?**

**- Минең 32 тешем бар ине, 29-ы ғына тороп ҡалды...**

**- Улай булғас, һин беҙгә иң тәүге һорауҙың мәғәнәһен аңлат, - ти тамам аптырауға ҡалған шәкерттәр.**

**- Таҫырайған күҙҙәр - улар һеҙҙең күҙҙәр. Улар ҡомһоҙлоҡтан таҫырайған. Мин һеҙҙә ҡыҙыҡһыныу уятып, күҙҙәрегеҙҙең таҫырайыуын бөтөрҙөм. Ҡыҙыҡһыныусанлыҡ ҡына ваҡ-төйәк менән булышыусыларҙы үҙгәртә ала.**

**- Был хәлдән беҙ ниндәй һабаҡ алырға тейеш һуң? - ти шәкерттәр тәрән борсолоу менән.**

**- Һабаҡ шундай: ҡомһоҙлоҡ, матди донъяла ла, рухи донъяла ла бәләкәй генә ҡәнәғәтләнеү бирә. Әммә ул һеҙгә артабан камиллашырға, юғары аңды үҫтерергә ҡамасаулай. Ҡомһоҙлоҡтан ҡотолдороу өсөн һеҙҙең уй-фекерҙәрҙең ваҡ-төйәк эргәһендә буталыуын күрһәтергә кәрәк ине..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5387
Заказ 3199